ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 май (һабанай) 2022

№ 18 (1008)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был байрам...**

һәр саҡ беҙҙең менән!



6-7

**Беҙ һуғыштың тере шаһиттары**



8-9

**"Ҡыҙыл атлылар" -**

Башҡорт кавалерия дивизияһының пропаганда ҡоралы



11-12

**Атайымды һағынам...**



13

**Төрлөһөнән** 14


***"Күге аҫтында йәшәгән, һауаларын һулаған, һыуҙарын эскән һәм ниғмәттәрен ашаған ватаныгыҙҙы зыялы һөйөгеҙ, бының исемен бөйөк итмәк өсөн тырышығыҙ. Ата-әсәләрегеҙҙе нисек һөйһәгеҙ, милләтегеҙҙе шулай һөйөгеҙ. Милләтегеҙ өсөн хеҙмәт итмәк йәнегеҙгә ғәнимәт тип белегеҙ".***

***Ризаитдин Фәхретдин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Үлемһеҙ полк" парадына кемдең портреты менән сығаһың?

***Зиннур ҠӘЛӘМОВ, хеҙмәт ветераны, Учалы районы, Сораман ауылы:*** Мин атайым Шоғайып Алтынбай улы менән ҡартатайым Алтынбай Ҡотлоғәлләм улы Ҡәләмовтарҙың портреттарын алып сығыр инем Бөйөк Еңеү парадына. Ә, ғөмүмән, һуғыш башланғас, беҙҙең нәҫелдән биш кеше яуға китә: Алтынбай, Ғәбит, Ғабдулла, Фәтҡулла һәм атайым Шоғайып Ҡәләмовтар. Үкенескә, Ғабдулла менән Фәтҡулла бабайҙарым яу ҡырында хәбәрһеҙ юғала. Оҙаҡ йылдар уларҙың ҡайҙа ерләнгәнен белә алманым. Бары тик һуңғы йылдарҙа ғына, интернет киңлектәрен гиҙеп, Ғабдулла бабайымдың һуңғы төйәге Эстонияла икәнен белдем. Алтынбай олатайыма, атайым Шоғайып менән Ғәбит бабайыма, бәхеткә күрә, тыуған ауылдарына иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға насип була.

Ҡартатайым Алтынбай Ҡәләмовҡа һуғыш башланғанда 40 йәш була, ул 1942 йылда фронтҡа китә. Ул Ленинград фронтында Ленин ҡалаһын обороналауҙа ҡатнаша. Һауанан да, ерҙән дә ут ямғыры аҫтында блокадала ҡалған Ленинградҡа берҙән-бер "Йәшәү юлы" Ладога күле аша ята. Олатайым ошо үлемесле, ләкин мөһим юлдан ылау менән йөк ташыған. Фашистар туҡтауһыҙ утҡа тота, самолеттан ата, йыш ҡына боҙ ярылып, иҫәпһеҙ-һанһыҙ аттар, һалдаттар, машиналар йөгө-ние менән боҙ аҫтына киткән хәлдәр ҙә булған. Дошман менән тиңһеҙ алыштарҙың береһендә олатайымдың күҙенә ярсыҡ тейеп, яралана һәм уны хеҙмәт армияһына күсерәләр. Еңеү сәғәте һуҡҡансы ул Силәбе трактор заводында эшләй.

Атайым Шоғайып Ҡәләмовҡа иһә һуғыш башланғанда ни бары 20 йәш кенә була. Ул Мейәс ҡалаһынан фронтҡа оҙатыла. Ҡорал етмәгәнлектән, ағас мылтыҡтар тоттороп, һуғышырға өйрәтәләр тәүҙә йәш һалдаттарҙы. Тиҙҙән атайымдың часын поезға тейәп, танкистар курсына уҡытырға алып китәләр. Юлда немец самолеты составты бомбаға тота. Иҫән ҡалғандарҙы йәйәү алып китәләр, ләкин бараһы юлдары фронт һыҙығына яҡын булғанлыҡтан, һуғыш барған яу яланына килеп сығалар. Йәш һалдаттарға окоп ҡаҙырға бойороп, һуғышҡа әҙерләнергә ҡушыла, ә атайымды һәләк булған пулеметсы урынына ҡуялар. Ошо бәрелештә атайым ҡаты яралана. Шартлай торған немец пуляһы уң ҡулының терһәк һөйәген онтай. Ырымбур госпиталенә килеп эләгә, унда ҡулын ҡырҡырға итәләр, ләкин атайым риза булмай, ныҡ тора.

Бер аҙ дауаланғас, ғәрипләнеүе хаҡында медицина белешмәһе биреп, ҡайтарып ебәрәләр. Шулай итеп, атайым 1943 йылдың декабрендә Магнит ҡалаһынан 80 саҡрымда ятҡан ауылына йәйәүләп ҡайтып төшә. Тыуған йортта стеналар ҙа ярҙам итә, тигәндәй, өҫтәүенә йәш организм бирешмәй, яралар әкренләп төҙәлә, сәрпелгән һөйәктәре лә уңала. Атайым тракторсы булып колхозда эшләй башлай. Әсәйебеҙ Рауза менән тормош ҡоралар, һигеҙ бала үҫтерҙеләр. Атайыбыҙға Бөйөк Еңеүҙең ярты быуатлыҡ юбилейын күрергә, уның тантаналарында ҡатнашыу бәхете тейҙе. Ул 2000 йылдың 10 мартында вафат булды. Беҙ, уның балалары ғына түгел, ейән-ейәнсәрҙәре лә батыр яугирыбыҙ иҫтәлеген йөрәк түрендә һаҡлайбыҙ. Бөйөк Еңеүҙе яулаған миллионлап яу ҡаһармандарын бер сафҡа туплап, улар менән ғорурланып, йәш быуында илһөйәрлек тәрбиәләүгә ҙур өлөш индергәндәре өсөн "Үлемһеҙ полк" проекты авторҙарына рәхмәтлебеҙ.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ОНОТМАҺЫН МИНЕ ТЫУҒАН ИЛ

*Яралынан аҡҡан ҡан кеүек*
*Таң ҡыҙара офоҡ ситендә.*
*Һөжүм үтте. Тынлыҡ. Ял итә*
*Бәрелеш ҡыры туҙан, төтөндә.*

*Ләкин берәү таңды күрмәне:*
*Ул йәш егет Урал буйынан.*
*Ҡоҫҡан кеүек бала әсәһен,*
*Ҡалҡыу ерҙе ҡосоп йығылған.*

*Һәм боҫланып аҡҡан ҡайнар ҡан -*
*Һуңғы бүләк һөйгән еренә,*
*Айырыла алмай, изге тупраҡты*
*Үбә кеүек һаман ирендәр.*

*Эй, ғүмерҙең һуңғы сәғәте,*
*Һин миңә лә шулай ҡуҡрәп кил.*
*Батырҙарын иҫкә алғанда,*
*Онотмаһын мине лә Тыуған ил.*

Мәлих ХАРИС.




12+

***✓ Бөгөн ҡарайым да йәнем әрней: ситтәр килеп, ил байлығын талай, урмандарҙы ҡыра, ерҙәребеҙ ҡуйынын соҡой... Беҙҙең атай һәм олатайҙарыбыҙ ейәндәренә шундай тормошта йәшәһендәр өсөн ҡан түктеме ни!***



## ШАҒИР ҺҮҘЕ



### Дуҫ ҡәбере янында

*Хуш бул, дуҫҡай,*
*ҡәбереңә, бәлки,*
*Һуңғы тапҡыр килеп торамдыр.*
*Ишетәһеңме, позициялар буйлап,*
*"Һөжүмгә!" тип сигнал уйналды.*
*Был сигнал,*
*ҡаты оран булып,*
*Үс алырға беҙҙе саҡыра.*
*Ғәфү ит, дуҫ,*
*оҙаҡ тора алмайым,*
*Тағы атакаға ашығам.*
*Һәм ғәфү ит, дуҫҡай,*
*ҡәбереңдә*
*Сәскә менән биҙәп торманыҡ.*
*Һәйкәл өсөн баш осоңа тағы*
*Йондоҙ-фәлән яһап торманыҡ.*
*Үҙ окобың - һинең ҡәберең булды,*
*Һәм һин - һалдат - уны аңларһың:*
*Хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең үпкәләргә*
*Ҡаты яҙмышына һалдаттың.*
*Башыбыҙҙы эйҙек окобыңа,*
*Бер минутҡа ғына теҙләнеп.*
*Үс алырға өнһөҙ анттар бирҙек,*
*Автоматты ҡыҫып, тешләнеп.*
*Залп бирмәнек,*
*һиңә тигән залптар*
*Дошман йөрәгенә атылыр.*
*Һеҙ ҡорбандар өсөн*
*иң ҙур һәйкәл -*
*Еңеү тигән һәйкәл һалыныр.*

**Төхфәт МОРАТ.**

### Һалдат йөрәге

*Һөйләйҙәр:*
*һалдат йөрәге*
*Туҙа, имеш, тип яуҙа.*
*Ышанма, зинһар, уларға,*
*Бушты һөйләйҙәр. Ялған!*
*"Яҡтыраҡ йондоҙ яналыр,*
*Төн ҡара булған һайын".*
*Дәртлерәк йөрәк ҡағалыр,*
*Бой ҡаты ҡыҙған һайын!*
*Мин күрҙем: һуғыш ҡырында*
*Бронялар бөгөлөп төшә;*
*Әйләнә таштар туҙанға,*
*Нигеҙенән тауҙар күсә.*
*Тик һалдат ҡала урынында*
*Тере йә үле көйө.*
*"Һәр аҙым ер - илем, ти ул,*
*Һәр окоп - тыуған өйөм".*
*Ҡуҙғалһа һалдат һөжүмгә,*
*Бара тик алға табан -*
*Ҡайҙа әсәләр ҡан илай,*
*Ҡайҙа ауылдар яна, -*
*Шунда ынтылалыр һалдат,*
*Шунда ырғыла һалдат.*
*Балҡып, Данко факелындай,*
*Йөрәге бара алдан!*

**Ғәйнан ӘМИРИ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? "Үлемһеҙ полк" парадына кемдең портреты менән сығаһың?

***Салауат ӘМИНЕВ, Әбйәлил районы Таштуй ауылының имам-хатибы:*** Әлбиттә, ҡәҙерле атайым Ғәбделрәшит Шәмиғүн улының фотоһүрәте менән баҫам "Үлемһеҙ полк" парады сафтарына. Атайым Бөйөк Ватан һуғышының башынан алып аҙағынаса тиерлек гел алғы һыҙыҡта фашистар менән алышып, ауыр яралар һәм контузия алып, бер күҙен юғалтып, шул хәлендә лә госпиталдә санитар булып эшләп, тыуған ауылына иҫән ҡайтҡан бөхетле яугирҙарҙың береһе булды. Бәлки, мулла олатаһы доғалары һаҡлағандыр, бәлки, һуғыштан һуң донъяға киләсәк балалары һәм әсәйем бәхетенәндер. Бәлки, яҙмыш 6 йәшенән генә атаәсәһенән тороп ҡалған үкһеҙ етемгә ҡарата шәфҡәт йөҙө күрһәткәндер... Ләкин тәненән имен урыны юҡ ине: өс тапҡыр пулянан, күп тапҡырҙар мина, граната ярсыҡтарынан яралана.

Әйтеүемсә, атайым бәләкәй генә сағынан ауыл муллаһы булып торған Шафиҡ олатаһы тәрбиәһендә үҫә. Үҙе уҡымышлы дин әһеле булараҡ, ҡартатаһы ейәнен бик тә уҡытырға теләй, ләкин яҡын кешеһен юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып, атайым инде өлкәнәйә барған олатаһын ҡурсып, уға терәк булып, ауылда ҡалыуҙы өҫтөн күрә, ләкин йәше еткәс тә Ҡыҙыл Армия сафына саҡырыла һәм Ҡаҙағстанда өс йыл хеҙмәт итеп ҡайта. Ҡайтыуына, донъяһы-ҡаралтыһы, мал-тыуары тартып алынған, мулла тип ситнәтелгән олатаһы мунсала көн күреп ята. Шулай ҙа бирешмәйҙәр, атайым колхозда эшләй башлай, өйләнеп, ике ҡыҙҙары тыуа.

Тормош яйлана тигәндә, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Атайым, яңыраҡ ҡына армия хеҙмәтенән ҡайтҡан хәрби кадр булараҡ, һуғыштың тәүге көнөнән үк фронтҡа оҙатыла. Уға, әҙерлекле хәрби булараҡтыр инде, станковый пулемет тапшырып ҡуялар, шулай итеп, ул пулеметсы булып китә. "Тәүге йылдарҙа һалдаттарға мылтыҡ, винтовкалар етешмәне, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡоро ҡул менән булһа ла һөрәнләп, атакаға ташланырға тура килә ине; кем ҡолай, ярала йә һәләк була, шуның ҡоралын эләктереп алып, алға йүгерәһең",- тип һөйләр ине атайым. Ул һуғыштың иң ҡыҙыу осоронда хәл иткес алыштарҙың береһе булған Великие Луки ҡалаһын азат итеүҙә ҡатнаша, был алыш 1942 йылдың ноябренән 1943 йылдың ғинуарына тиклем Калинин фронтының 3-сө удар армияһы көсләрә ҡатнашлығында бара. Бында беҙҙең башҡорт егеттәре күп була, байтағы ошо яуҙа баштарын һала.

Атайыма үҙенең яҡташы, Үтәгән ауылынан Харисов тигән иптәше менән икеһенә дошман дзотын юҡ итергә бойорола. "Төн ҡараңғылығынан файҙаланып, йылдам ғына шыуышып яҡын килгәс, мин аяғүрә баҫып, граната ырғытыуға, боҫоп та өлгөрмәнем, артымса уҡ Харисов та гранатаһын ташларға итте, ләкин уның гранатаһы, әлеге ҡараңғылыҡтан күренмәгән сәнскеле тимер сыбыҡҡа ҡаҡлығып, беҙҙең тарафта шартланы. Ятҡан еремдә күҙҙән уттар сәсрәп, сәнсепсәнсеп ауыртты ла, ап-асыҡ тойҙом: бер күҙ усыма ағып төштө. Харисовтың хәле бөтөнләй мөшкөл ине. "Бәхил бул, туғандарыма еткер инде", - тип кенә әйтә алды ла йән бирҙе..." - тип һөйләгәйне атайым. Ана шулай күҙһеҙ ҡалып, госпиталдә ятып сыҡҡас, атайымды, санитарҙар етешмәү сәбәпле, ошонда ҡалдырып, яралыларҙы дауалап, тәҙәтеп булмаҫтай аяҡ-ҡулдарын бысып, хирургҡа әҙерләп биреүсе санитар итеп ҡалдыралар. Өс йыл фронттың алғы һыҙығында һуғышып, бер йыл әлеге госпиталдә хеҙмәт иткән атайымды, 4 йыл тигәндә, ниһайәт, иленә ҡайтарып ебәрәләр. Был ваҡытта уның күкрәген Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, "Батырлыҡ өсөн" ике миҙал биҙәй.

Ләкин ауылда ла фронтовиктарҙы рәхәт тормош көтөп тормай: хужалыҡ ҡаҡшаған, емереклек, аслыҡ... Әле уңалып та бөтмәгән яралары әрнеп һыҙлауға ҡарамаҫтан, ең һыҙғанып колхоз эшенә тотона атайым. Һуғыштан алда тыуып ҡалған ике апайыма өҫтәлеп, тағы дүрт ҡыҙ менән ике малай, береһе - мин, донъяға килгәнбеҙ. Ғаилә ҙур, ашау ягы наҡыҫ: атай-әсәйебеҙ һаман булһа яңғыҙ һыйырыбыҙҙың һөтөн-майын, ит урынына башмаҡтарын, биш тауыҡтың йомортҡаһын дәүләткә тапшырып торҙо. Шундай хәлдә лә атайым ҡайҙа ҡул көсө кәрәк - шунда, фронттағыса намыҫлы, фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөһө күрһәтте, көн-төн эшләне. Хатта хаҡлы ялында ла буш ятманы: ҡарауылда ла, заповедникта егерь булып та эшләне.

Атайымдар быуыны ысын мәғәнәһендә ҡаһарманлыҡ, илһөйәрлек һәм эшһөйәрлек өлгәләре ине. Бөгөн ҡарайым да йәнем әрней: ситтәр килеп, ил байлығын талай, урмандарҙы ҡыра, ерҙәребеҙ ҡуйынын соҡой... Беҙҙең атай һәм олатайҙарыбыҙ балаларына, ейәндәренә шундай тормошта йәшәһендәр өсөн ҡан түктеме ни! Яттарҙан талатмайыҡсы илебеҙҙе, берҙәм булайыҡ, аҡсаға һатылмайыҡ. Атайолатайҙарыбыҙ рухы быны ғәфү итмәҫ...

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Халыҡ гәзит-журнал-китап уҡыуҙан төңөлә бара, тип уфтаныуһа ла, дуҫтарыбыҙҙы бөтөнләй үк юғалтып бөтмәгәнбеҙ икәненә ышанабыҙ. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Шулай итеп, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 757 һум 80 тингә яҙылып ҡуйһағыҙ, беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ.**

• Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.

• **Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең еғәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙылыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы мәктәп олимпиадалары еңеүселәрен премия һалымын түләүҙән азат итте. Радий Хәбиров уҡыусыларҙың интеллектуаль үҫешенә йүнәлтелгән Бөтә Рәсәй мәктәп олимпиадалары һәм башҡа конкурстар еңеүселәрен һәм призерҙарын, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларҙы Башҡортостан Башлығы премияһы һалымын түләүҙән азат иткән указға ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Бөрө - Таҙтүбә - Һатҡы автомобиль юлы төҙөлөшө барышы тураһында һөйләне. 60,9 саҡрым оҙонлоҡтағы автомобиль юлы республиканың төньяҡ-көнсығышында бик кәрәк. Әлеге ваҡытта бында ямғыр канализацияһы һәм таҙартыу ҡоролмалары төҙөлә: Дыуан һәм Ҡариҙел райондарында һыу үткәргес торбалар монтажланды, ете арҡалы күпер төҙөлдө, 35 саҡрымдан ашыу юлға асфальт түшәлде. Яңы трассала хәрәкәтте 2022 йылдың декабрендә асыу планлаштырыла.

✓Дондағы Ростовтан Өфөгә Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларынан 306 мәжбүри күскенсе килде. Граждандарҙың бер өлөшө Стәрлетамаҡҡа ваҡытлыса урынлашыу пунктына юлланды, ҡалғандары Өфөлә ҡалды. Ваҡытлыса урынлашыу пункттары профилакторийҙарҙа һәм шифаханаларҙа асылған. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова хәбәр итеүенсә, ДНР һәм ЛНР граждандарына документтар юллауҙа һәм эш менән тәьмин итеүҙә мотлаҡ ярҙам күрһәтелә.

✓1 майҙан Башҡортостанда һәм тотош илдә 12 проценттан алып 9 процентҡа тиклем түбәнәйтелгән ставка буйынса льготалы ипотека эшләй башланы, тип хәбәр итте Рәсәйҙең Финанс министрлығы. Яңыртылған дәүләт программаһы 2022 йылдың аҙағынаса ғәмәлдә була. Бюджеттан финанслау күләме 461 миллиард һумға баһалана. Башҡортостан һәм башҡа төбәктәр өсөн кредиттың максималь суммаһы - 6 миллион һумға тиклем. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бынан алда Рәсәй Президенты Владимир Путин льготалы ипотека ставкаһын кәметергә тәҡдим иткәйне.

✓Республика баҫыуҙарында аграрийҙар дым ҡаплатыуҙы тамамлап, сәсеүгә төштө, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Быйыл республикала бөтәһе 2,170 миллион гектар майҙанда яҙғы культуралар сәсергә кәрәк. Ауырғазы районы яҙғы сәсеү буйынса алдынғылыҡты бирмәй. Мәләүез һәм Ҡырмыҫҡалы райондары аграрийҙары ла һәйбәт темп күрһәтә.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Үлемһеҙ полк" парадына кемдең портреты менән сығаһың?

***Минира БИКӘНӘСОВА, Ауырғазы районы Төрөмбәт дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы, шағир:*** "Үлемһеҙ полк" парадына олатайым Мөхәмәт Резбаевтың фотоһүрәтен тотоп сығыр инем. Ул Ғафури районы Баҡраҡ ауылында тыуып үҫә. Ғаилә ҡороп, дүрт балаға ғүмер биреп, тыныс ҡына йәшәгән ерҙән илебеҙгә афәт килә. Олатайым һуғыштың тәүге көндәренән үк һалдат сафына алына. Колхозда иген үҫтереп, аттар ҡарап эштә сыныҡҡан мөһабәт кәүҙәле, ҡурҡыу белмәҫ ир-уҙаманына 37 йәш кенә була ул саҡта. Мең михнәттәр аша йәшәү менән үлем араһын үтергә тура килә уға. Һуғыш тураһында һөйләргә яратмаһа ла, башынан үткән хәл иткес бер ваҡиғаны иҫкә ала торғайны шулай ҙа.

...Мөһим заданиенан ҡайтып килгән разведчиктар төркөмө дошман ҡамауына эләгә. Олатайым да шунда була. Бер көндө хәлһеҙләнгән әсирҙәрҙе сафҡа теҙеп баҫтыралар. "Һеҙҙе былай ғына атмайбыҙ. Хәҙер күңелле тамаша буласаҡ, тәүҙә шуны ҡарайыҡ", - тип ояттыҙ йылмая немец офицеры. Шул ваҡыт ярһыу овчаркалар етәкләгән бер төркөм һалдат килеп баҫа. Эттәр туктауһыҙ ярышып абалай, бына-бына әсирҙәр өҫтөнә ташланыр кеүек. Сафҡа теҙелеп торғандарға тәртип буйынса унға тиклем һанарға ҡушыла. Әсирҙәр бер-бер артлы үҙенә тап килгән һанды ҡысҡыра: беренсе, икенсе, өсөнсө... унынсы! Ошо унынсы әсирҙе автомат төйҙәһе менән сафтан төртөп сығарып, немец һалдаттары овчаркаларын ысҡындыра... "Ошо икән дошман ҡулынан үлемем! Эх, теге юлы снаряд ярсығынан үлһәм, мең артыҡ булыр ине", - тип уйлай олатайым. Тағы бер ҡат иҫәптән һуң сират миңә етәсәк, үлер алдынан белгән доғаларымды уҡып, әжәлде Хоҙайға һыйынып ҡаршы алайым, тип ул шым ғына доға уҡый башлай: "Лә иллаһи иллалаһ..." Беренсе, икенсе, өсөнсө... Унынсы... Олатай дошман эттәренең һөжүменә ҡаршы атлай... Бәй ни күрә: немецтар тырым-тырағай йүгерешә башлай, урман яғынан "ура-а" ҡысҡырған тауыштар ишетелә. Хоҙайҙың ҡөҙрәте тимәй, нимә тиһең! Шулай иҫән ҡала Мөхәмәт Резбаев. Һуғыштың ахырынаса алғы һыҙыҡтарҙа һуғышып, күп ҡалаларҙы азат итеүҙә ҡатнаша, бихисап орден һәм миҙалдар менән наградлана.

"Йәмле яҙҙың майында һуғыштың бөтөүе хаҡында ишеттек, - тип хәтерләй әсәйем Зифа Резбаева. - Ауылға һалдаттар ҡайта башланы, мин көн һайын улар араһынан атайымды эҙләйем. Тик яҙ үтеп, йәй үтеп китте - атайым юҡ та юҡ. Әсәйем фронттан ҡайтҡан һалдаттарҙан уның хаҡында һораша, хатта күрше ауылдарҙыҡыларҙы ла юллап табып, атайым хаҡында белешеп йөрөнө. Белгән-күргән кеше юҡ. Шулай ҙа өмөттө һүндермәй, көҙгө лә аяҡ баҫтыҡ. Һалҡын октябрь айының ҡырпаҡ ҡарлы бер көнөндә ауылға ике һалдат ҡайтып төштө. Улар туп-тура беҙҙең өйгә табан атлай. Беҙ, ике апайым, мин һәм ҡустым, тын да алмай уларҙы күҙәтәбеҙ. Ниһайәт, таныныҡ: атайыбыҙ ҡайтып килә бит! Шатлығыбыҙҙың иге-сиге юҡ. Яу юлдарында бер туған ҡустыһы Мөхтәр ағай Резбаев менән осрашып, бергә ҡайтып килеүҙәре икән..."

Әсәйем атаһын - минең олатайымды һуғыштан ана шулай көтөп алыуҙары хаҡында тулҡынландырғыс итеп һөйләй торғайны. Олатайым һуғыштан һуң тыуған колхозында тырышып эшләй, балаларын аяҡҡа баҫтыра. Ауыл халҡы уны ихтирам итеп "комбат олатай" тип йөрөтә ине. Кешеләргә ағымлы, ихтирамлы, ҡунаҡсыл булды. Өләсәйем менән оҙон, бәхетле ғүмер кисерҙеләр. Беҙ, ейәндәре, Мөхәмәт олатайыбыҙ менән хаҡлы ғорурланабыҙ. Бынан ары тандарыбыҙ тыныс, күгебеҙ аяҙ булһын, илебеҙ именлеген һаҡлаған уландарыбыҙ имен-һау йөрөһөн!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**



● **Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың шундай юлдары ла бар:**

- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 336 һум.

- Коллектив менән яҙылыусыларға (көмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 336 һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция үҙе килтереп бирәсәк.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ИШАРА

# БЕР ТӨРЛӨ ҺӨЙЛӘЙҘӘР...

## икенсене эшләйҙәр

**Һәр атҡан таңым менән күңелгә ниндәйҙер шиғыр юлдары килә. Бына әле, май байрамдары көндәрендә, Мостай Кәримдең 1941 йылда яҙған ошо шиғыр юлдарын иҫкә төшөрҙөм:**

**Сал ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың,**
**Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,**
**Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың,**
**Гүзәллеген һаҡлап Иҙелдең,**
**Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,**
**Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,**
**Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,**
**Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн -**
**Мин фронтҡа китәм, иптәштәр...**

Был шиғыр беҙҙең йөштәшебеҙ. Эйе, шундай ҡурҡыныс, әммә юғары илһөйәрлек рухы хөкөм һөргән йылдарҙа тыуғанбыҙ беҙ. Ә бына бөгөн, күпме ҡорбандар биреп яуыз дошманды, фашизмды еңгән халҡым ниңәләр көсһеҙләнә, рухы һүнә бара кеүек. Ә бит был хәл бөгөн генә түгел, 1970 йылдарҙа уҡ күҙәтелә ине.

Иҫемдә, 1972 йылда Мәскәүҙә уҡыуымды тамамлап, диплом тотоп, Өфөгә ҡайттым. Унға, һулға бәреләм, эшкә урынлаша, торлаҡ таба алмайым. Бер көндө уҡытыусымдан көнәш һорарға барҙым һәм: "Ағай, һәйбәт кешеләр күренмәй, ҡайҙа юғалды улар?"- тип һорамай булдыра алманым. Уҡытыусы ағай көрһөндө лә: "Мәскәүҙә, Третьяковка музейында Ивановтың "Явление Христа народу" картинаһын күрҙеңме?"- тип һораны. "Эйе, бер ҙур стенаны биләп эленеп тора ул, ә бүтән стеналарҙа шул әҫәргә йыйылған төрлө йөҙҙәрҙең эскиздары эленгән", - тинем. Уҡытыусым: "Бына шул эскиздарҙың атамаларына иғтибар иттеңме, "Үкенеүсе", "Икеләнеүсе", "Ҡурҡыусы" һ.б. Бына шундайҙар ғына ҡалды шикелле беҙҙең тормошта ла. Күнелдәргә ҡурҡыу, икеләнеү хисе инеп урынлашты..." - тип тамамланы уҡытыусым һүҙен.

Эйе, рухты күтәреү өсөн йыш ҡына шиғыр уҡып алам. Йә булмаһа, шулай уҡ юғары рух менән һуғарылған матур бала саҡ ваҡиғаларын иҫкә төшөрәм. Хәтеремдә, бик кеҫкәй саҡта "Минең уйымды әйт" тигән уйын уйлап сығарғайныҡ. Ҡыҙыҡ уйын ине ул, сөнки ул ышаныҫҡа ҡорола ине. Уйынды алып барыусы һинә һорау бирә, үҙе үк яуабын да ҡабатлай, дөрөҫ яуапты инҡар итергә ярамай. Әлбиттә, беҙҙең бөтөн уй-һорауҙар Чапай, Буденный, Гитлер, фашист, һуғыш, Еңеү, йондоҙ кеүек һүҙҙәргә бәйле ине. Яуап бирә алмаһаң, уйылаусы: "Йә, әйт, улайһа, яҡшы кешеме, әлләә насар кешеме?" йәки "Насарлыҡмы, әлләә яҡшылыҡмы?" тип ярҙам итеп тә ебәрә ине. Бала саҡ уйыны ышаныҫҡа ҡоролғайны. Ә бөгөн ышаныс тигәндең бер нәмәһе лә ҡалмай бара түгелме? Хатта ышанып таянырҙай закондар ҙа юҡ һымаҡ илебеҙҙә...

Эйе, әленән-әле бала саҡты иҫкә төшөрөп, бала саҡ хәтирәләре менән йәшәлә. Ышаныҫҡа, тоғролоҡҡа, сафлыҡҡа ҡоролғайны ул саҡта беҙ уйнаған уйындар. Ә бына әлеге "уйын ҡороусылар" бер төрлө уйлай, икенсе төрлө һөйләй, өсөнсө төрлө эш башҡара. Ышаныс юҡҡа сыға...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Торатауға менеү өсөн баҫҡыс һалыуға әҙерлек эштәре башланды, тип хәбәр итте геопарк етәкселеге. Подрядсы төҙөлөш вагондарын ҡуйған да инде. Яҡын көндәрҙә төҙөүселәр ошо майҙансыҡта эшкә тотона, уны йыл аҙағына тамамларға тейеш. Хәҙер шиханға тиҫтәләрсә һуҡмаҡ илтә, әммә уларҙың барыһы ла тиерлек Ҡыҙыл китапҡа ингән үҫемлектәр аша үтә. Шихандың флораһын һәм фаунаһын һаҡлап ҡалыу өсөн белгестәр уңайлы экомаршрут әҙерләгән. Уның дөйөм оҙонлоғо - 5,65 саҡрым, ә баҫҡыс - 402 метр, тирә-яҡты күҙәтеү һәм ял итеү майҙансыҡтары бар.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мираҫ йылын Өфө - Күмертау - Стәрлебаш - Ишембай - Стәрлетамаҡ автоуҙышы менән билдәләне. Сара 26-28 апрелдә "Тыуған төйәктең бөтә ҡиммәттәре - беҙҙең китаптарҙа" девизы аҫтында үткәрелде. "Китап"тан хәбәр итеүҙәренсә, хәҙер баҫма китап продукцияһын һатыу нөктәләре киңәйә бара: март-апрель айҙарында баҫма продукцияны республиканың Әлшәй, Миәкә һәм Шишмә райондарында һатып алырға мөмкин, башҡа муниципалитеттар менән эш дауам итә.

✓Башҡортостанда урмандарҙы тергеҙеү һәм ағас үҫентеләре үҫтереү өсөн урман питомниктары булдырыла. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта урманды файҙаланыуҙың яңы төрөн - "урман питомниктары булдырыу һәм уларҙы файҙаланыу"ҙы индергән закон ҡабул итте. Был төп ағас тоҡомдары үҫентеләрен үҫтереүҙе күҙ уңында тота. Урман питомниктары өсөн бүленгән участкаларҙа капиталь объекттар һәм капиталь булмаған ҡоролмалар төҙөргә мөмкин.

✓Күмертауҙа элекке Күмертау күмер киҫелешенең күле биләмәһендә туристик экологик парк булдырыу күҙаллана. Ул ике йүнәлештән: экопарктан һәм глэмпингтан тора. "Экопарк" туристик комплексын ойоштороу инвестициялар йәлеп итеүгә, Күмертау ҡалаһында яңы предприятие асыуға, республикала туристик продукт хеҙмәттәре сифатын яҡшыртыуға булышлыҡ итер", - тип хәбәр итте Башҡортостандың иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры урынбаҫары Екатерина Кликунова.

ҠЫҪҠАСА

# БАЛАҢ ЕТӘҮМЕ?

✓ **Республиканың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградалары һәм маҡтаулы исемдәре тураһында" законға тейешле үҙгәрештәр индерергә йыйына.** "Бүләкләнеүселәр иҫәбендә ете һәм унан күберәк балаларҙың ата-әсәләре, шулай уҡ опекундар һәм попечителдәр, шул иҫәптән ете һәм унан күберәк етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы тәрбиәгә алған ғаиләләр, патронат тәрбиәселәр буласаҡ. Башҡортостанда "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы 2014 йылда булдырылды. Урындағы үҙидара органдары тәҡдиме менән йыл һайын республикабыҙҙа ун ғаилә ошо юғары наградаға лайыҡ була. Сәләмәт һәм әүҙем тормош алып барған, спорт һәм ижад менән шөғөлләнгән, үҙ өлгөһөндә йәмғиәттә традицион ғаилә ҡиммәттәрен нығытыуға булышлыҡ иткән ғаиләләр", - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләнеүселәргә 100 мең һум премия бирелә. Премияға һалым һалынмай, ул тулы күләмдә түләнә.

✓ **Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Бөрйән районында урынлашҡан яңы тарихи-мәҙәни музей комплексына сәфәренән алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты.** "Беҙҙең "Шүлгәнташ" музей комплексына төүгеләрҙән булып Рәсәй Фәндәр академияһы президенты Сергеев Александр Михайловичтың килеүе символик мәғәнәгә эйә. Музей бик ҡыҙыҡлы, экспозициялары сағыу, тәрән ғилми йөкмәткеле. Беҙгә ҡайһы бер эштәрҙе тамамларға ғына ҡалды, уны июнь уртаһында асырға йыйынабыҙ". Музейҙа 7 тематик блок - "Таймлайн", "Медиазал", "Каяға төшөрөлгән рәсемдәр", "Археология", "Тәбиғи-фәнни", "Һаҡлау", "Урал батыр эпосы". Музейҙың төп экспонаты - мәмерйә диуарына төшөрөлгән боронғо һүрәттәрҙең репродукциялар йыйынтығы. Уны махсус заказ буйынса француз ғалимдары әҙерләгән. "Был урынға туристарҙы йәлеп итеү беҙҙең өсөн нык мөһим. Бында ғалимдар килеп, тикшеренеүҙәр үткәрһен өсөн фәнни үҙәк ойошторола. Былтыр "Шүлгәнташ"ҡа юлды төҙәкләндерҙек, быйыл мобиль элемтә мәсьәләһен хәл иттек. Газ үткәрергә ҡалды, һуңынан һәйбәт отель төҙәрбеҙ. Йәйләп Бөрйән районында тағы бер күркәм урын барлыҡҡа килер", - тип яҙҙы республика Башлығы.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың киләһе пленар ултырышында депутаттар "Башҡортостан Республикаһының айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон ҡабул итергә йыйына.** Закон проекты "ТКО-Башҡортостан" дәүләт мәғлүмәт системаһында мәғлүмәт урынлаштырғанда хоҡуҡ боҙған өсөн административ яуаплылыҡ билдәләй. Атап әйткәндә, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса урындағы үҙидара органдарына һәм төбәк операторҙарына штраф индерергә тәҡдим ителә (әгәр улар системаға талап ителгән мәғлүмәттәрҙе тапшырмаһа йәки мәғлүмәте тулы йә иһә дөрөҫ булмаһа). Вазифалы кешеләрҙе - 3-5 мең һум, юридик берәмектәрҙе 15-30 мең һумға штраф көтә. Былдай сара башҡарыу дисциплинаһын һәм ҡалдыҡтар менән эш итеү системаһының һөҙөмтәлелеген арттырырға тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СТУДЕНТТАР МЕНӘН...



**Башҡортостан Башлығы Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институты студенттары менән осрашты. Билдәле булыуынса, Радий Фәрит улы 14 йыл ошо Хоҡуҡ институтында эшләгән, кафедра ассистентынан алып директорға тиклем хеҙмәт юлы үткән.**

Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, студенттар менән ошондай осрашыу уҙғарыу - уның шәхси инициативаһы, ул 14 йыл ғүмерен юғары мәктәпкә арнаған, хәйер, һуңғы тиҫтә йылдарҙа күп нәмәләр үҙгәргән. "Беҙ еңел булмаған осорҙа йәшәйбеҙ, коронавирусты ла үткәрҙек. Әммә яңыраҡ Украиналағы хәл-ваҡиғаларға бәйле ил Президенты махсус хәрби операция үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Көслө санкция һәм эмоциональ баҫым яһала. Беҙ һеҙҙең менән баштарыбыҙҙа, философияла, эске сәйәсәттә етди, глобаль үҙгәрештәр алдында торабыҙ. Быларҙың барыһын да бергәләп үтергә кәрәк, беҙҙең эшебеҙ хаҡ. Мин һеҙҙең фекерегеҙҙе белергә, тәшөнкөлөккә бирелмәһегеҙме-юҡмы икәнен аңларға теләйем. Үҙебеҙҙең юғары уҡыу йорттарында белем алған студенттар менән осрашыуҙар циклы ойоштороla, әммә мин уларҙы нәҡ һеҙҙән башларға булдым, сөнки минә юрист-студенттарҙың философияһы аңлайышлы һәм яҡын", - тине Радий Хәбиров.

Радий Хәбиров институт биләмәһе буйлап экскурсия ваҡытында күп традицияларҙың һаҡланып ҡалыныуына иғтибар итте. "Үҙебеҙҙең сәскә түтәлен йәки үҙем эшләгән осорҙа төҙөлгән футбол майҙансығын күргәс, рәхәт булды. Әлбиттә, беҙ Хоҡуҡ институтына инфраструктураны яҡшыртырға ярҙам итербеҙ".

# СӘЛӘМӘТЛЕК ХАҠЫНА...

**"Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк " акцияһында күсмә Һаулыҡ үҙәктәре, күсмә флюорографтар, маммографтар, шулай уҡ күсмә ФАП-тар һәм Ғ.Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы менән Республика кардиология үҙәгенең күсмә диагностикалау үҙәктәре ҡатнашыуы хаҡында хәбәр иткәйнек инде.**

Белгес-табиптар бригадаһы иҫәбендә терапевт, хирург, акушер-гинеколог, онколог, кардиолог, офтальмолог, уролог, невролог, стоматолог, эндокринолог һәм башҡалар бар. "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы ҡарамағына республиканың бөтөн районлары ла инделәр: ауыл халҡы белгестәргә күренә, медицина ҡаралыуы үтә һәм төүге медицина ярҙамы ала. Был акция башланғандан алып бөтәһе 2296 кеше медицина ҡаралыуы, 1410 тикшерелеү, шул иҫәптән 916 кеше флюорография, 494-е маммография үткән. 200 кешенең ҡанында глюкоза кимәле, 169-ында - холестерин күрһәткесе норманан юғары булыуы, 263 кешелә юғары ҡан баҫымы асыҡланһа, 167 кешенең кәүҙә ауырлығы артыҡ булыуы асыҡланған. 205 социаль әһәмиәттәге сир, шул иҫәптән, 116 кешелә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуы, 52 кешелә шәкәр сире һәм берәүҙә туберкулез билдәле булып, 4 пациентта яман шеш сиренә шик ҡуйылған. Бөтөн был пациенттарға ла өҫтәмә тикшеренеүҙәр үтеү һәм диагнозды дөрөҫләү, шулай уҡ дауаланыу өсөн йүнәлтмәләр бирелгән һәм улар контролгә алынған. Ошо акция сиктәрендә 399 кеше коронавирусҡа ҡаршы вакцина эшләткән, шуларҙың 280-е өлкәндәр һәм 119 бала. 119 кеше ҡабатлап вакцина эшләткән.

# КӘМЕГӘН

**Башҡортостандың федераль трассаларында юлда һәләк булыусылар һаны 75, зыян күреүселәр 30, ә юл транспорты ваҡиғалары 10 процентҡа кәмегән.**

Был ыңғай күрһәткескә өҫтәмә рәүештә 155 видеотеркәү комплексын ҡуйыу буйынса эш алып барыу һөҙөмтәһендә өлгәшелгән. Республика Хөкүмәте һәм ЮХХДИ-ның тығыҙ хеҙмәттәшлеге аварияларҙы кәметергә булышлыҡ иткән. "Беҙҙең маҡсат - юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыларҙан штраф йыйыу түгел, ә ошо боҙоу осраҡтарын булдырмау, - ти Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Былар юл хәрәкәтендә ҡатнашыусылар тиҙлек режимын һаҡлаһын, уларҙың именлеге өсөн эшләнә. Шуға күрә камераларҙы йәшермәйбеҙ".

Билдәләнеүенсә, бөгөн федераль трассаларҙағы стационар камераларҙың дөйөм һаны - 214 берәмек, шул иҫәпкә өҫтәмә рәүештә ҡуйылған 155 ҡорамал да инә. "Приуралье" юл идаралығы федераль ҡаҙна идаралығы начальнигы урынбаҫары Денис Абрамов был сараның төп маҡсаты - юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙы хәүефһеҙлек менән тәьмин итеү икәнлеген билдәләй. Мәҫәлән, ҙур резонанс тыуҙырған юл-транспорты ваҡиғалары, шулай уҡ авария әҙемтәләренең ауырлығы 2021 йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда кәмегән. Был хаҡта һәләк булыусылар һаны аҙайыуы ла дәлилләй. Былтыр тәүге өс айҙа 31 кеше яҡты донъя менән хушлашһа, быйыл ошо осорҙа 8 үлем осрағы теркәлгән. Федераль трассала хәүефһеҙлек кимәлен арттырыуға йүнәлтелгән эш даими бара, йәғни яһалма яҡтыртҡыстар ҡуйыла, хәүефле урындар картәләнә, йәйәүлеләр йөрөгән урындар төҙәкләндерелә, юл хәрәкәтен ойоштороуҙың техник саралары яңыртыла.

# ДӘҮЛӘТ ЯРҘАМЫ АЛ!

**Башҡортостанда экологик йәһәттән таҙа продукция етештереүселәргә аҡсалата ярҙам күрһәтелеүен күҙаллаған закон үҙ көсөнә инде.**

Төбәктә "Башҡортостан Республикаһында ауыл хужалығын үҫтереү" тураһындағы закондың 6-сы статьяһына үҙгәрештәр индерелде. Уға ярашлы, республикала ауыл хужалығы тармағында эшмәкәрлек алып барыусыларға төбәк бюджетынан ярҙам күрһәтеү өсөн исемлек киңәйтелде. Был исемлеккә, башлыса, ауыл хужалығы аҙыҡтүлеген һәм яҡшыртылған характеристикалы продукция етештереүселәр индерелде.

Дәүләт ярҙамы кредитлау сығанаҡтарын ҡулланыу мөмкинлеген арттырыуға, хәүефтәрҙән страховкалауҙы һәм тупраҡ уңдырышлылығын арттырыу маҡсатында башҡарылған эшмәкәрлекте финанслауға ҡайтып ҡала.

Продукцияның "яҡшыртылған характеристикаһы" тиеү етештереүҙә тик сифатлы сеймал һәм "таҙа" технологиялар ҡулланыуҙы, генлы инженерия, ионланған нурланыу әсулдарынан баш тартыуҙы күҙаллай. Шулай уҡ тауарҙың тышлығына ла талаптар арта - ул яныһан эшкәртелгән йәки биотаркалыусы материалдан булырға тейеш. Былдай "таҙа" продукция етештереү юғары сифатлы һәм экологик йәһәттән таҙа булған бренд булдырыуға ярҙам итәсәк һәм шулай уҡ халыҡтың һаулығына яҡшы йоғонто яһаясаҡ, тигән ышаныста республика етәкселеге.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Родина" кинотеатры фойеһында фронт кинооператорҙарына арналған "Илагыҙ, тик төшөрөгөҙ!.." тигән күргәҙмә эшләй. Ундағы бер айырым слайд беренсе башҡорт кинооператоры, башҡорт документаль киноһына нигеҙ һалған Ғилуан Әмировҡа арналды. Ул яҡташтарын 1941 йылда фронтҡа оҙатыу тураһында байтаҡ сюжеттар авторы. 1943 йылдан алып Бөйөк Ватан һуғышының аҙағынаса Ғилуан Ғилметдин улы 2-се Украина фронтында хәрби кинооператор булып йөрөй. Автомат һәм кинокамера тотоп, Ҡыҙыл Армияның Украинаны, Румынияны, Венгрияны, Болгарияны һәм Югославияны азат иткән мәлдәрен төшөрә.

✓Өфөлә үтәсәк байрам программаһында Рәсәй сәхнәһе йондоҙҙары - Рәсәйҙең халыҡ артисы Николай Басков, РСФСР-ҙың халыҡ артисы Лев Лещенко ла ҡатнашасаҡ. Концертҡа ветерандар, урындағы һуғыштарҙа һәм ҡоралды низағтарҙа ҡатнашыусылар, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, республика халҡы һәм ҡунаҡтары саҡырыла. "Торатау" Конгресс-холы алдындағы амфитеатр майҙанында киске 7-лә башланған концерт байрам сараларын тамамлаясаҡ. Көндөң мәҙәни программаһына киске 10-да фейерверк нөктә ҡуясаҡ.

✓Өфөлә ауыл хужалығы етештереүселәренә үҙ продукцияларын йыназландырылған урындарҙа һатырға тәҡдим итәләр. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баҡсасыларҙың беренсе форумында ҡалалар һәм районлар хакимиәттәре башлыҡтарына баҡсасылар үҙ ерҙәрендә үҫтергәнде һата алһын өсөн ваҡытлыса сауҙа нөктәләре ойоштоорорға ҡушты. Радий Хәбиров былдай сауҙа урындары һанын арттырыу кәрәклеген белдерҙе. "Баҡсаһында үҫтергән продукцияһын һатырға килгән әбейҙәрҙе ҡыуырға түгел, киреһенсә, улар өсөн шарттар булдырырға, сауҙа урындарын төҙәкләндерергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓"Башавтотранс" һәм Өфөнөң бер нисә шәхси ташыусыһы ҡала маршрутталарында йәмәғәт транспортында йөрөү өсөн яңы тариф билдәләнә. "Башавтотранс" автобустарында ҡулаҡса һәм банк картаһы менән - 33 һум, "Алға" транспорт картаһы менән - 28 һум, экспресс режимда 40 һум түләргә кәрәк. Ҡайһы бер маршруттарҙа "Алға" картаһы менән иҫәпләшкәндә юл хаҡы 30-35 һум була. Баш ҡала властары йәмәғәт транспортында юл хаҡының артыуын запчастарға, яғыулыҡҡа, ремонтҡа һәм лизинг түләүҙәренә хаҡтарҙың күтәрелеүе менән бәйләй.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ "Дөйөм алғанда, республикала 2022 йылдың 1 ғинуарына ер участкаһы менән льготалы категорияға ҡараған 68707 граждан тәьмин ителде. Был иҫәптә торғандарҙың дөйөм һанының 74 процентын тәшкил итә", - тине министр.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҮҘЕБЕҘСӘ, БАШҠОРТСА!

**Радий Хәбиров йәмәғәт туҡланыуы өлкәһендә Aibat Hallyar (Әйбәт хәлдәр) проектына нигеҙ һалыусы Марат Нәсхетдиновты "Инвестчас" ултырышына саҡырҙы һәм уның бизнес үҫеше, дәүләт ярҙамына мохтажлығы менән ҡыҙыҡһынды.**

Йәмәғәт туҡланыуы өлкәһендә 2019 йылда эшҡыуар Марат Нәсхетдинов башлап ебәргән был старт-ап Рәсәй Президенты Владимир Путин "Рәсәй - мөмкинлектәр иле" коммерция булмаған ойошманың Күҙәтеү советы ултырышында башҡорт милли кухняһы үҙенсәлектәре менән ҡыҙыҡһыныу белдергәндән һуң бөтөн илгә танылды. Владимир Путин эшҡыуарҙың был башланғысын хупланы. Шуны ла әйтергә кәрәк, 2020 йылда Марат Нәсхетдинов "Кунаҡсыллыҡ оҫталары" Бөтөн Рәсәй конкурсында еңеүсе булып, "Уралда иң яҡшы стритфуд" призын яулағандан һуң әлеге эшен артабан дауам итә алды.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөләге "Әйбәт хәлдәр" тиҙ туҡланыу милли ресторанында ла булды. "Ризыҡты беҙҙең өләсәйҙәр ысулы буйынса бешерелгән йоҡа ҡабартмаға һәр төрлө эслек төрөп әҙерләйбеҙ. Күбеһенсә урында етештерелгән продукцияны файҙаланабыҙ, сөнки шулай ябай ҙа, отошло ла һәм, иң мөһиме, тәмле лә", - тип һөйләне М. Нәсхетдинов Башҡортостан Башлығына. Кафела булғанында Радий Хәбиров бындағы ризыҡты - тары бутҡаһы менән әҙерләнгән "Өләсәй ҡыстыбыйы", билмән һәм тундырма менән морсты тәмләп ҡараны. "Миңә бик оҡшаны! Реклама өсөн әйтмәйем, был, ысынлап та, туҡлыҡлы, тәмле ризыҡ. Беҙҙең эшҡыуарҙы хуплағаны өсөн Президент Владимир Владимирович Путинға рәхмәт", - тине Радий Хәбиров.

# МИНИСТР МЕНӘН ОСРАШЫУ

**Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская журналистарҙың ер-мөлкәт өлкәһе менән бәйле һорауҙарына яуап бирҙе. Ер участкаларын файҙаланыуға ҡағылышлы быйылғы үҙгәрештәр, республиканың иҡтисади үҫеше һәм инвестиция сәйәсәте сиктәрендә дәүләт ярҙамы саралары тураһында сығыш яһаны.**

- Министрлыҡ күсемһеҙ милек объекттары эйәләренә ер участкалары алырға ярҙам сараларын ҡарарға тәҡдим итә. Мәҫәлән, ер участкаларын һатҡанда бина, төҙөләш һәм ҡоролма эйәләренә льгота биреү ҡуҙаллана, йәғни алған участканың хаҡы кадастр хаҡының 25 проценты күләмендә билдәләнә. Бөгөнгә ул 50 процент тәшкил итә. Шуға ярашлы күсемһеҙ милек объекты эйәһенең ер участкаһын уның кадастр хаҡының дүрттән бер өлөшөнә тиң хаҡ буйынса алыу мөмкинлеге буласаҡ, - тине Наталья Полянская.

Ул шулай уҡ ведомствоның дәүләт хеҙмәттәрен электрон төргә күсереү буйынса бурысын үтәүе тураһында хәбәр итте: "Башҡортостандың дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәре порталына ер-мөлкәт мөнәсәбәттәре өлкәһендә 26 дәүләт хеҙмәте индерелде, -тине ул. - 2022 йылда тағы өс хеҙмәтте электрон төргә күсереү планлаштырылған. Электрон төрҙә бирелгән ғаризаларҙың 40 процент тирәһе - участканы рөхсәт ителгән файҙаланыу төрөн үҙгәртеү процедураһы буйынса".

Журналистар Наталья Полянскаяға социаль өлкәгә ҡағылышлы бер нисә һорау бирҙе. Һүҙ льготалы категорияға ҡараған граждандарҙы ер участкалары менән тәьмин итеү буйынса эшмәкәрлек тураһында барҙы. "Дөйөм алғанда, республикала 2022 йылдың 1 ғинуарына ер участкаһы менән льготалы категорияға ҡараған 68707 граждан тәьмин ителде. Был иҫәптә торғандарҙың дөйөм һанының 74 процентын тәшкил итә, - тине министр. - Күп балалы һәм инвалид балаһы булған ғаиләләрҙең күбеһе бушлай бирелгән ер участкаһынан баш тартып, аҡсалата алыуҙы һайлай. Хәҙер сертификат алыуға сираттың 74 процентын яптыҡ". Билдәләнеүенсә, ярҙам сараһы индерелгәндән алып, йәғни 2020 йылдың 13 октябренән 2022 йылдың 1 ғинуарына тиклем БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы, бүленгән бюджет йөкләмәһе лимитына ярашлы, ер участкаһы урынына торлаҡ шарттарын яҡшыртыу маҡсатында бер тапҡыр аҡсалата түләү биреү тураһында 600 таныҡлыҡ бирҙе.

# ЙӘЙ ҠЫҘЫУ БУЛАСАҠ!

**Өфөлә Нуғай ҡасабаһына яңы юл былтыр төҙөлә башланы. Әле төҙөләш майҙанында тәүлек әйләнәһенә 30 белгес һәм 25 берәмек заманса техника эшләй. Ҡоролманың оҙонлоғо 105,6 метр буласаҡ. Әлеге ваҡытта күперҙең дүрт терәүе эшләнгән һәм улар араһындағы балкалар монтажлана башланы. Яңы юл тимер юлын аша сығыу урынынан 200 метр алыҫлыҡта урынлашҡан, ул киләһе йылға файҙаланыуға тапшырыласаҡ.**

Бөгөн ғәмәлдәге юлдан Зинино, Нуғай, Аҡбирҙе, Ҡарамалы, Шипово, Блохино ауылдарына һәм ҡалаға табан 50 мең самаһы автомобиль үтә. Дүрт һыҙатлы яңы юл был йүнәлештәге хәрәкәтте көйләйәсәк, тимер юлын аша сыҡҡанда күҙәтелгән юл-транспорт ваҡиғаларын кәметәсәк. Төҙөләш майҙанында булып, Республика Башлығы Радий Хәбиров күсмә кәңәшмә һәм "Өфөнөң көньяҡ ҡапҡалары" транспорт проекты буйынса фекер алышыу үткәрҙе. "Был үҙ эсенә дүрт ҙур контрактты алған ҡатмарлы комплекс. Уның беренсе этабында Пугачев урамын реконструкциялауҙы планлаштырабыҙ. Икенсе этапта Кузнецов затоны микрорайонында Пугачев урамынан Өфө-Аэропорт юлына тиклем юл урау ул төҙөйәсәкбеҙ, был объектты проектлай башланыҡ инде. Шулай уҡ Галле округы урамын "Урал" М-5 федераль трассаһы менән тоташтырған көнсығыш сығыу юлы төҙөләшөн әүҙем алып барабыҙ. Йәй ҡыҙыу буласаҡ, - тип белдерҙе ул.

# БАЛАЛАРҒА...

**Башҡортостанда 8-ҙән 16 йәшкә тиклемге балаларға 2022 йылдың майынан пособие түләй башлаясаҡтар. Балалы ғаиләләргә был ярҙам сараһы тураһында Владимир Путин хәбәр итте.**

Яңы түләүҙе алыу шарттары 3-тән 7 йәшкә тиклемге балаларға бирелгән пособиены юллағандағы кеүек. Ул Башҡортостанда балаға йәшәү минимумы күләменән 50, 75 йәки 100 процент күләмендә тәғәйенләнә. Ғаиләнең мөлкәте иҫәпкә алына, шулай уҡ "нулле килем" ҡағиҙәһе лә эшләй. Алгоритм түбәндәгесә: әгәр балаға йәшәү минимумының 50 проценты күләмендә тәғәйенләнгәндә (5339,5 һум) ғаиләнең уртаса килеме йән башына йәшәү минимумынан кәм булһа, пособие балаға төбәктә йәшәү минимумының 75 проценты күләмендә тәғәйенләнә (8009,25 һум). Әгәр балаға йәшәү минимумының 75 проценты күләмендә тәғәйенләнгәндә (8009,25 һум) ғаиләнең уртаса килеме йән башына йәшәү минимумынан кәм булһа, пособие балаға төбәктә йәшәү минимумының 100 проценты күләмендә тәғәйенләнә (10679 һум).

Башҡортостанда балалы ғаиләләр 20 төр пособие ала. Шуның 11-е - төбәк, 9-ы - федераль бюджет иҫәбенән. Йыл һайын республикала 70 мең тирәһе балалы ғаилә түләү алыуға мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, 3-тән 7 йәшкә тиклем балаларға тәғәйенләнгән пособиены 67987 ғаилә ала, уларҙа 79519 бала тәрбиәләнә. Дәүләт хеҙмәттәре порталында аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн 8 йәштән 17 йәшкәсә балаларға айлыҡ түләүгә ғариза тултырырға мөмкин, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығынан. Бөтә ғаризаларҙы Пенсия фонды дөйөм тәртиптә - 1 майҙан ҡабул итә башланы.

ҠЫҪҠАСА

# "АТАЙСАЛ"ДАР ЙЫЙЫЛДЫ

✓ **2021 йылдың мартында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың башланғысы менән "Атайсал" проекты старт алғайны.** Проекттың порталында 2700 ҡатнашыусы теркәлгән, уларҙан 7800-ҙән ашыу ғариза килгән. Бөгөнгә алты меңдән ашыу проект бойомға ашырылған. "Атайсал" ярҙамында бер йылда республикала йөҙәрләгән балалар һәм спорт майҙансығы төҙөлгән, ике йөҙҙән ашыу шишмә төҙөкләндерелгән, мәсеттәр, ҡорамдар һалынған, ҡала һәм ауыл китапханаларына 3 меңдән ашыу китап тапшырылған, ҡала һәм райондарҙа төрлө саралар үткәрелгән. Меценаттар ошо проекттарҙы тормошҡа ашырыуға 570 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлткән. Апрель аҙағында Өфөлә үткәрелгән "Яҡташлыҡ көсө" форумында "Атайсал" проектына яҡынса йомғаҡ яһалды. Сара үҙенең тыуған төйәген үҫтереүгә ресурсын, ваҡытын, көсөн һалырға әҙер яҡташтарыбыҙға рәхмәт билдәһе итеп үткәрелде.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин 2022-2031 йылдарҙы Рәсәйҙә фән һәм технологияларҙың ун йыллығы тип иғлан итте.** Был ҡарар "йәмғиәтте һәм илде үҫтереүҙең мөһим бурыстарын хәл итеүҙә фән һәм технологияларҙың ролен көсәйтеү маҡсатында" ҡабул ителде. Указға ярашлы, ун йыллыҡтың төп бурыстары: талантлы йәштәрҙе тикшеренеүҙәргә йәлеп итеү; тикшеренеүселәрҙе һәм уйлап табыусыларҙы "йәмғиәтте һәм илде үҫтереүҙең мөһим бурыстарын" хәл итеүгә ылыҡтырыуға ярҙам күрһәтеү; Рәсәй халҡы өсөн технологик өлкәләге ҡаҙаныштар тураһында мәғлүмәт алыу мөмкинлеген арттырыу. Координация комитеты рәйестәштәре итеп президент ярҙамсыһы Андрей Фурсенко һәм хөкүмәт рәйесе урынбаҫары Дмитрий Чернышенко тәғәйенләнде. 2021 йыл да Рәсәйҙә Фән һәм технологиялар йылы тип иғлан ителгәйне.

✓ **Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы Журналистар союзы менән берлектә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 77 йыллығына арналған "Геройҙар иҫтәлегенә. Быуындар бәйләнеше" хәрби-илһөйәрлек конкурсын ойоштора.** Конкурс Башҡортостандың дөйөм белем биреү учреждениелары уҡыусылары араһында 2022 йылдың 14 июненә тиклем үткәрелә. Конкурс эштәренең (иншалар, әҙәби этюдтар, эсселар) геройҙары яҡын туғандар (өләсәй-олатайҙар), тыл хеҙмәтсәндәре, уҡытыусылар, күршеләр, таныш хәрбиҙәр һәм башҡалар булырға мөмкин. Ғаиләлә быуындар бәйләнешен сағылдырған фотоһүрәттәр, рәсемдәр, хаттар, документтар ҡулланырға була. Дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-11-се класс уҡыусылары өсөн конкурс өс этапта уҙғарыла: Мәктәп этабы. Муниципаль этап. Республика этабы. Һәр муниципаль берәмек конкурстың республика этабына муниципаль этап еңеүсеһенең бер генә эшен тәҡдим итергә хоҡуҡлы.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ Уның эшмәкәрлеген яйға һалыу өсөн 300 грамм бөтнөк үләне һәм 100 грамм һары мәтрүшкәне бергә ҡушып, төнәтмә эшләргә була. 1 ҡалаҡ йыйылманы термосҡа һалып 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгәлеккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә. Төнәтмәне бер нисәгә бүлеп, көн дауамында эсеп бөтөргә. Дауаланыу - 14 көн.

### Тоҙ ултырғанда

❖ Быуындар һыҙлауы организмда матдәләр алышыныуы боҙолоуын белдергән күрһәткес. Быға бәйле үт ҡыуығы, бөйөр, быуындарға таш рәүешендә тоҙҙар ултыра. Был осраҡта төрлө майҙар һөртөү ярҙам итмәсәк мөмкин, тоҙҙо организмдан сығарыусы үләндәр ҡулланыу кәрәк. Шифалы ромашка, күгүлән (спорыш), һары мәтрүшкә, баҫыу ҡырҡбыуыны үләндәре, фасоль ҡабығы, гөлйемеште бер тигеҙ өлөштә алып ҡушырға. Шуға ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөп, һығып алырға. Таҙа быяла һауытҡа ҡойорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда йылы көйөнсә ярты стакан эсергә. Дауаланыу - 1 ай. Шунан 1 айға туктап тороп, ҡабаттан дауаланырға.

### Мейеләгә ҡан әйләнеше

❖ Мейеләгә ҡан әйләнеше боҙолғанда был төнәтмә файҙалы булырға мөмкин. Шулай ул веналарҙа тотҡарлыҡ, периферик ҡан тамырҙары варикозы ауырыуҙарынан ярҙам итә, тромб барлыҡҡа килеүҙе иҫкәртә. Аритмия, тахикардия, невроз, юғары ҡан баҫымы булғанда файҙалы. Дауаны әҙерләү өсөн дарыуханан алынған төнәтмәләр кәрәк: 100-әр мл пион, валериана, арыҫлан ҡойроғо, 50 мл эвкалипт, 25 мл бөтнөк. Төнәтмәләрҙе бергә ҡушып, ваҡламайынса 10 бөртөк ҡәнәфер (гвоздика) ҡушырға һәм 2 аҙна төнәтергә. 25-30 тамсы дауаны көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда эсергә. Был рәүешле 1-2 ай дауаланғас, 2 аҙна туҡтап торорға һәм кире ҡабатларға мөмкин.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләнә.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Һауыттарҙы соҡоп эшләп етештереү йүкә ағастары үҫкән төбәктәрҙә киң таралған. Был өлкә, бөтә Башҡортостан аша ҙур һыҙат булып үтеп, Урал алды (Кама йылғаһынан Урал йылғаһына тиклем) һәм Урал теҙмәһенең көнбайыш һырттарын: Таҡаты, Елмерҙәк, Алатау һ.б. үҙ эсенә ала. Был зонала Йүрүҙән, Өфө йылғалары буйындағы, Ағиҙел арьяғында Сим, Ләмәҙе, Инйәр, Еҙем, Егән, Нөгөш буйҙарындағы һәм шулай уҡ Урал тауҙарының көньяҡ армыттарындағы башҡорт ауылдары ултырған. Ағиҙел һәм Кама араһында ла оҫта көбөсәләр булған.

Урал алды һәм ҡайһы бер тау райондарынан соҡоп эшләнгән тәпән, көбәләр Өфө һәм Ырымбур губерналарына, Көньяҡ Уралдан Төньяҡ Урал арьяғына, Ырымбур һәм Волга буйы далаларына, ҡайһы берҙә хатта бынан да алыҫыраҡҡа таралған.

XX быуат башына был әйберҙәр күпләп етештерелгән кәсепселек үҙәктәре барлыҡҡа килгән. Ләмәҙе, Инйәр, Еҙем йылғалары буйындағы ауылдарҙа ҡайһы бер ғаиләләр ағастан һауыт-һаба эшләүгә ныҡлап тотоноп, йылына бер нисә тиҫтә һәм хатта йөҙәрләп тәпәндәр етештергән. Яҡын-тирәләге ауыл баҙарҙары "ағас һауыт арбалары" менән тулған. Еҙем-Ҡаран ауылының баҙары ла бындай әйберҙәрҙең төрлөлөгө менән дан тотҡан. Шулай уҡ пристандарҙа, улус үҙәктәре, Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалаларында ла һатыуға сығарғандар.



*Боронғо һауыт-һаба. Ғафури районы, Сәйетбаба ауылы, 1971 йыл. Автор фотоһы*

Йүкә урмандары булмаған һәм тығыҙ ултырған Бәләбәй өйәҙе халҡы ағас һауыт-һаба артынан Урал тауҙары тарафтарына йөрө-гән, ҡайһы берҙә был маҡсатта Ағиҙел йылғаһын да кискәндәр. Хәҙерге Бөрйән районының төпкөл таулы төбәктәренән көбө, тәпәндәр Ағиҙел һәм Нөгөш йылғалары буйлап Йомағужа, Мәләүез һәм башҡа пристандәр, йылға буйында ултырған баҙарҙарға һал менән ағыҙылған. Тау юлдары буйлап әҙер һауыт-һабаны Ҡана заводына һатырға алып барғандар. Әтек ауылынан Урал һыртының төп тарлауыҡ һәм артылыштарын үтеп, Һаҡмар буйы ауылдарына алып барғандар. Көньяҡ райондарҙа эшләнгән һауыт-һаба, был төбәктә оҫталар күп булғанға күрә, урындағы баҙарҙарҙа һатылып бөткән. Был баҙарҙар араһында Мораҡ (Ҡыҙыл Мәсеттә) һәм Ырымбур тимер юлының Һары станцияһы баҙарҙары айырылып торған. Арба юлы булған төбәктәргә һатыуға тәғәйенләнгән әйберҙе слауҙар һәм саналар менән алып барғандар.



*Ағас һауыт-һаба. Ейәнсура районы Ибрай ауылы, 1981 йыл. Т.К. Сурина фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ХӘТЕРКИТАП

# БЫЛ БАЙРАМ...

## һәр саҡ беҙҙең менән!

**Еңеү көнө байрамының үҙенең йолалары бар, әммә улар барыһы ла бер ваҡытта - Рейхстаг көмбәҙенә байраҡ ҡаҙаған көндә генә барлыҡҡа килмәгән. Уларҙы иҫкә алып, барлап үтәйек.**







### Ял көнө. Салют.

Халыҡ 1 майҙан уҡ яңылыҡтар көтә, сөнки бомбаға тотоу хәүефе күптән үткән, совет ғәскәрҙәре Берлин өсөн көрәшә. 8-енән 9-ына ҡараған төндә сәғәт 3-сө 10 минутта Юрий Левитан радионан армия һәм флот буйынса Юғары Баш командующийҙың Бойороғон уҡый. Шунан һуң инде ҡалала берәү ҙә йоҡламай, барлыҡ тәҙрәләрҙә лә уттар ҡабына. Иртә менән мәскәүҙәр урамдарға ашыға, бер ниндәй ойоштороуһыҙ митингылар башлана. Артистар йыр башлаһа, уны халыҡ күтәреп ала, барыһы ла ҡыуанысынан ҡысҡыра, илай. Ҡыҙыл майҙанда ике урында патефон уйнай, кешеләр бер уҡ ваҡытта төрлө көйҙәргә бейей. Хәрби кейемле кешеләр ҡаланан тыныс ҡына үтеп китә алмай: уларҙы ҡосаҡлайҙар, күккә сөйәләр, ҡотлайҙар, ян-яҡҡа тартҡылайҙар...

Киске 10 тула 5 минутта тағы ла Левитандың тауышы яңғырай: "Иғтибар! Мәскәү һөйләй! Советтар Союзының барлыҡ радиостанциялары эшләй! Совет халҡының немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы алып барған Бөйөк Ватан һуғышы Еңеү менән тамамланды. Фашистик Германия тулыһынса тар-мар ителде!" Унын сығышы тамамланыу менән Мәскәү күген салют балҡыта. Прожекторҙар яҡтыртыуы аҫтында меңдәрсә ҡоралдан утыҙ залп бирелә.

Шунан алып 9 Майҙа Мәскәүҙә Еңеү көнө салютһыҙ үтмәй. Дөйөм халыҡ митингылары тағы ла ике йыл уҙғарыла, әммә һуңынан 9 Май ял көнө булыуҙан туҡтай. Ял көнөн бөтөрөүгә иҡтисади һәм сәйәси сәбәптәр этәрә. Тәү сиратта һуғыштан һуң илде аяҡҡа баҫтырырға кәрәк була, ә Сталиндың үлеменән һуң Никита Хрущев 9 Майҙы ял көнө итергә бик теләк белдермәй, сөнки был байрам "халыҡтар юлбашсыһы" менән ныҡ ассоциациялана. Был көндә хатта демонстрациялар ҙа үтмәй, улар 7 ноябрь һәм 1 Майҙа ғына уҙғарыла. Еңеү көнө шәхси байрам ғына булып ҡала: уны ғаиләм, күршеләр менән генә билдәләйҙәр.

1964 йылда СССР менән Новороссийскиҙы азат итеүҙә һәм 1945 йылда Еңеү парадында ҡатнашҡан Леонид Ильич Брежнев етәкселек итә башлай. КПСС-тың яңы Генераль секретары, беренсенән, байрамдар ярата, икенсенән, 9 Май уның өсөн шәхси тарих була. Ул, ил был ваҡиғаға бик аҙ иғтибар бүлә, тип иҫәпләй һәм тап ул идара иткән ваҡытта Еңеү көнө йолаға һәм атрибутҡа әйләнә. Ил буйынса күп һәйкәлдәр, мемориаль комплекстар төҙөлөүе һәм ветерандарҙы хөрмәтләү өсөн дә беҙ уға бурыслы. Бөйөк Еңеүҙең 20 йыллығында был дата ял көнө тип иғлан ителә, байрам традицияһы ла тергеҙелә.

### Еңеү парады

Ҡыҙыл майҙандағы Еңеү парады 1945 йылдың 24 июнендә үтә һәм уның менән маршал Рокоссовский командалыҡ итә. Был ҙур әһәмиәткә эйә ваҡиға, совет халҡының барлыҡ ауырлыҡтарҙы үтеп, бөтән донъяға үҙенең һынмаҫ рухын, ғорурлығын һәм данын танытыу символы була. Шуға күрә парадта ҡатнашыусыларҙың махсус һайлап алалар: һалдаттарҙың хәрби наградалары булырға, улар 30 йәштән оло һәм буйҙары 176 сантиметрҙан кәм булмаҫҡа тейеш. Парад формаһын көн-төн "Большевичка" фабрикаһында тегәләр. Парадта 35 мең кеше ҡатнаша, ә кейемдәрҙе бер айҙан да кәм ваҡытта тегеп өлгөртөргә кәрәк була. Штандарттарҙы һәм байраҡтарҙы Ҙур театр белгестәре эшләй.

Был көндө ямғыр яуа. Маршал Жуков парадты ҡабул итергә Ҡыҙыл майҙанға күк атта килеп инә. Ул ғәскәрҙәрҙе "Германия империализмын еңеү менән" тәбрикләгәндән һуң, колонналар тантаналы маршта ил етәкселәре торған трибуна эргәһенән үтә. Парад алдынан Рейхстагка байраҡ ҡаҙаусы яугирҙар бара. Байраҡты Берлиндан, парадҡа дүрт көн ҡалғас, самолет менән алып киләләр. Әммә уны тотоп барырға лайыҡлы кеше таба алмайҙар, геройҙарҙың барыһы ла яралы була. Ойоштороусыларҙың байраҡты башҡа кешеләр тотоп барыу идеяһы кире ҡағыла. Һөҙөмтәлә Еңеү байрағы майҙанға сығарылмай. Уның ҡарауы, совет һалдаттары немец байраҡтарын мавзолей алдына ташлай. Был штандарттарҙы тотош Германия буйынса йыйялар һәм 900-ҙән 200-өн һайлап алалар. Һуңынан Мәскәүҙә уларҙы парадтан һуң яндырғандар тип һөйләйҙәр, ғәмәлдә иһә, уларҙың күбеһе әле лә төрлө музейҙарҙа һаҡлана. Был ритуал боронғо римдарҙан алынған: полководец Римға триумф менән ҡайтҡанда, һалдаттар ҡорам итәгенә еңелеүселәрҙең байрағын ташлаған. СССР-ҙа - Ленин мавзолейы итәгенә.

Ошонан һуң 9 Май парады 20 йыл үткәрелмәй. 1965 йылда, власть башына Леонид Ильич Брежнев килгәс, Еңеү байрағы Ҡыҙыл майҙанға сығарыла. Уны полковник Константин Самсонов алып сыға, Егоров менән Кантария уны оҙата бара. Парадты ул ваҡыттағы оборона министры маршал Родион Малиновский ҡабул итә.

Сираттағы парад 40 йыллыҡ юбилей хөрмәтенә 1985 йылда ойоштороla. СССР-ҙа һуңғы Еңеү парады 1990 йылда үтә. 1995 йылда Рәсәй Президенты Борис Ельцин Мәскәүҙә ике парад үткәрергә ҡуша. Уның береһе Ҡыҙыл майҙанда була: Бөйөк Ватан һуғышы фронттары һаны буйынса ветерандарҙың 10 йыйылма полкы, шул ваҡыттағы кейемдәрҙә һалдаттар һәм Суворов, Нахимов училищелары курсанттары парадта уҙа.

Икенсе парад Поклонная горала күптән түгел генә төҙөлгән мемориаль комплекста үтә. Бында сит ил делегациялары ҡатнаша. Парадта, Рәсәйҙең иҫәпләшергә кәрәкле держава булыуын иҫкәртҡәндәй, ауыр хәрби техника һәм авиация күрһәтелә. Ә инде 19 майҙа Ельцин "Совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышында еңеүен мәңгеләштереү тураһында" законға ҡул ҡуя, унда Еңеү көнөнөң бөтә халыҡ байрамы булыуы һәм йыл һайын парад һәм артиллерия салюты менән уҙғарылырға тейешлеге билдәләнә.

2007 йылдан алып парадта ветерандар ҡатнашмай - ҡартаялар. Уның ҡарауы, 2008 йылдан парадта танкылар күрһәтелә башлай. 2010 йылға тиклем Юғары Баш командующий һәм башҡалар парад үткәндә баҫып торорға тейеш була, һуңғы йылдарҙа улар парадты ултырып ҡарай.

### Бер минутлыҡ тынлыҡ

Был традиция 1965 йылда башлана. Үҙәк телевидениеға ниҙер уйлап табырға тура килә һәм журналист Ирина Казакова яуҙа ятып ҡалғандар хөрмәтенә бер минутлыҡ тынлыҡ идеяһын тәҡдим итә. Ауырлыҡ менән текст яҙыла, музыка һәм метроном һуғыуы, Юрий Левитан менән Вера Енютина тауышы яҙҙырыла. Хронометраж 17 минут самаһы тәшкил итә. Радиотапшырыуҙар һәм телевидение буйынса дәүләт комитеты рәйесе, ветеран, алты орден кавалеры Николай Месяцев мәңгелек ут идеяһын тәҡдим итә. Ул ваҡытта Билдәһеҙ һалдат ҡәбере булмағанлыҡтан, усаҡты студияла, гипс һауыт эсендә, гранитҡа оҡшатып эшләнгән фонда яндыралар. Стенаға "Ятып ҡалғандар иҫтәлегенә" тигән яҙыу ҡуйыла. 1965 йылдың 9 Майында программа эфирға сыға. Һуңынан студияға тиҫтәләрсә мең хат килә, әммә бер открытканың артына ике генә һүҙ яҙылған була: "Рәхмәт. Әсә".

1984 йылда, Левитан вафат булғандан һәм Енютина эмиграцияға киткәндән һуң, бер минут тынлыҡты һәр ваҡыт бер диктор иғлан итә. Игорь




Кириллов был бурысты барыһынан да оҙағыраҡ башҡара. 1991 йылда илдә болғаныш башлана. Бер минутлыҡ тынлыҡ элеккесә эфирға сыға, видеоретте замансалаштырып, күберәк ҡорамдар күрһәтергә тырышалар, Мәңгелек утты алып ташлайҙар, кадр артындағы тексты Никита Михалков уҡый. Хәҙер ул кадрҙарҙы бер ҡайҙан да табып булмай, әммә 1995 юбилей йылында дәүләт каналдарында тап шул күрһәтелә. Һуңынан эфирға ҡабат Кириллов сыға. Программа 3-4 йылға бер төшөрөлә, әммә 1965 йылда яҙылған текст үҙгәртелмәй тиерлек. Мәңгелек ут, Билдәһеҙ һалдат ҡәбере эргәһендәге кешеләрҙең йөҙҙәре һәр саҡ кадрҙа була.

### Билдәһеҙ һалдат ҡәбере

Кремль диуары эргәһендә бындай мемориалды эшләү ҡарары 1965 йылда ҡабул ителә, әммә эш шунда уҡ башланмай. 1966 йылда Зеленоградта, Крюково станцияһы эргәһендә төҙөлөш эштәре барышында һуғыш ваҡытынан ҡалған туғандар ҡәберлеге табыла. Ундағы билдәһеҙ һалдаттарҙың берәһен Кремль диуары эргәһенә ерләргә ҡарар ителә. Шул уҡ йылдың 2 декабрендә Георгий таҫмаһы менән уратылған һәм ҡорал лафетына ҡуйылған табут Мәскәүгә килтерелә. Уны тере коридор аша алып киләләр, халыҡ күҙ йәштәрен тыя алмай. Ерләү сараһы 3 декабрҙә, маршалдар Жуков һәм Рокоссовский ҡатнашлығында үтә. Был ваҡытҡа монумент проекты әҙер була һәм уны 1967 йылдың 8 майында асалар. Ул беҙҙең көндәргә лә үҙгәрешһеҙ килеп еткән тиергә мөмкин, бары тик 1975 йылда постаментты ҡаплаған байраҡ өҫтөнә каска менән лавр ботаҡтары өҫтәлә.

Мәңгелек утты Ленинградтағы Марс яланы ялҡынынан алалар, унда мемориал революция ваҡытынан уҡ була, ә йондоҙ 1957 йылдан яна. Факелды Олимпиада уты кеүек эстафета менән килтерәләр, ә манеж майҙанынан Ҡыҙыл майҙанға тиклем уны Алексей Маресьев тотоп килә. Мәңгелек ут бары тик профилактика ваҡытында ғына һүндерелә, әммә уттың бер өлөшөн "алып ҡалалар". 2009 йылда мемориал реконструкцияға ябылғанда Мәңгелек ут Поклонная гораға күсерелә - бының өсөн унда йондоҙҙоң күсермәһе эшләнә. Ә бына совет заманында Билдәһеҙ һалдат



ҡәбере эргәһендә почетлы ҡарауыл булмай, ул бары тик 9 Майҙа ғына ҡуйыла. Даими пост 1997 йылда барлыҡҡа килә.

### Венок һалыу йолаһы

1965 йылға тиклем һәйкәлдәргә етәкселәр бары тик рәсми тантана ваҡытында ғына сәскә һала, әммә 9 Май ял көнө булмағас, митингылар үткәрелмәгәс, тантана ла булмай. Бары тик халыҡ үҙе килеп сәскәләр һалып китә. 9 Май ял көнө тип иғлан ителгәс, ул тейешле кимәлдә билдәләнә башлай һәм мемориалдар эргәһендә тантаналы сара үткәреү, сәскә, венок һалыу традицияһы барлыҡҡа килә. Шул ваҡытта ҡәнәферҙәр "хәрби сәскә" символы тип ҡабул ителә. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында был йола онотола, әммә оҙаҡҡа түгел - 1993 йылда Рәсәйҙең Юғары советы байрам сараларын һәм ветерандар менән осрашыуҙар ойоштороуҙы тәҡдим итә, сөнки өләштәргә бүлгеләнгән дәүләттең берҙәм идеологияһы булмай - 1 Май әһәмиәтен юғалта, 7 ноябрь бөтөнләй юҡҡа сығарыла. 9 Май иһә ярлылар өсөн дә, миллионерҙар өсөн дә изге дата булырға тейеш була һәм ул бөгөнгәсә шулай ҡала ла.

### Георгий таҫмаһы

Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллыҡ юбилейына РИА Новости бар халыҡҡа "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн" миҙалына орден лентаһының күсермәһе булған таҫманы таратырға тәҡдим итә. Был акцияның нигеҙендә килер быуындарҙың кешелек тарихындағы иң ҡурҡыныс һуғышта кем һәм ниндәй ҡорбандар менән еңеү яулауын, беҙ кемдәрҙең вариҫтары булыуыбыҙҙы, кем һәм нимә менән ғорурланырға, иҫләргә тейешлегебеҙҙе онотторамау фекере ята.

2005 йылда акция беренсе тапҡыр үтә, яңы символ булдырылыуҙан алып уҙған йылдарҙа 9 Май, Георгий таҫмалары буйынса төрлө бәхәстәр ҙә тыуа: берәүҙәр уны юғары, изге символ итеп ҡабул итһә, бәғзеләр өсөн ул карнавал йолаһын үтәү генә. Шуға ҡарамаҫтан, Еңеү көнөндә ике яҡ та Георгий таҫмаларын таға.

### Үлемһеҙ полк

Совет заманында ла кешеләр Еңеү көнөндә һуғышта ҡатнашыусыларҙың портреттарын тотоп сыға һәм беренсе тапҡыр бындай осраҡ 1965 йылда теркәлә. Әммә ул ваҡытта был бик әһәмиәтле лә тойолмай, сөнки тере ветерандар ҙа күп була. Әммә йылдар үтә бара уларҙың сафы һирәгәйә. Рәсәйҙә мемориалдарға һәләк булған туғандарының фотоларын тотоп килеү традицияға әйләнә. 2007 йылда Төмәндә беренсе "Еңеүселәр парады" үтә. Быға урындағы ветерандар советы башлығы Геннадий Ивановтың күргән төшө сәбәп була: "9 Май, Еңеү көнө. Рәсми тантананан һәм хәрби парадтан һуң "Изге һуғыш" йыры оҙатыуында урамдан меңдәрсә төмәнле атланы. Һәр берәһенең ҡулында Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булған туғандарының, яу яланына ҡайта алмаған ирҙәре, атайҙары, олатайҙарының аҡлы-ҡаралы фотоһы..." Әлбиттә, ысынбарлыҡтағы парадта меңдәрсә кеше булмай, улар ни бары өсәү була. 2008 йылда был һан бер нисә тиҫтә булып китә. Иванов барлыҡ төбәктәргә акцияны хуплауҙарын тәҡдим итеп хаттар яҙа. Уны күптәр, шул иҫәптән Мәскәү ҙә ишетә. Себерҙәге билдәле парадҡа тиклем ике йыл ҡалғас, Поклонная горала 5 мең бала һәм үҫмер аллея буйлап һуғышта ҡатнашҡан туғандарының портреттарын тотоп үтә.

Шуға ҡарамаҫтан, "Үлемһеҙ полк"-тың барлыҡҡа килеүе 2012 йыл тип иҫәпләнә. Ул йылда Томскиҙа был сара 6 мең кешене берләштерә. Уны журналистар ойоштороғанлыҡтан, тиҙ генә популярлыҡ яулай. Ике йылдан һуң "Үлемһеҙ полк" Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә 500 ҡалала үтә. 2013 йылда Мәскәүҙә мең кешенән торған колонна туплана, уның башында Василий Лановой була.

"Үлемһеҙ полк" үҙаллы йәмғәт хәрәкәтенә әүерелә, уның сайты булдырыла һәм унда үҙеңдең яҡын кешеләрең - ветерандар тураһындағы тарихты һөйләргә мөмкин була.

2015 йылда, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығында Мәскәүҙә "Үлемһеҙ полк" өсөнсө тапҡыр уҙа һәм унда 50 мең кеше ҡатнаша. Улар араһында ил Президенты Владимир Путин да була. Халыҡ үҙе булдырған һәм күтәреп алған идея тиҙ арала популярлыҡ яулай һәм тарала. Бындай хәрәкәткә йәмғиәттә ихтыяж була һәм ул ҡәнәғәтләндерелә.

2020 йылда "Үлемһеҙ полк" онлайн форматта үтә. Ҡулланыусылар архив фотоларын һалып, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, һуғышты үткән яҡындары, туғандары тураһында һөйләй.

**Клара ХОМЕНКО.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

23 февралдә беҙҙең 16-сы гв. атлы дивизияһы артынан барған 15-се гв. атлы дивизияһы яугирҙары, 7-се гв. корпусының штаб һәм тыл хеҙмәткәрҙәре лә Штеровка, Федоровка, Никитовка ауылдары, Юлино-1 һәм Юлино-2 утарҙары янында немец частарының көслө һөжүменә дусар була. Ошо дивизияның иҫән ҡалған яугирҙарынан, өс штаб һәм махсус подразделениеларҙың шәхси составынан дивизия сәйәси бүлеге начальнигы, гв. подполковнигы Г.С. Кузнецов етәкселегендә төркөм ойоштоpола. Был яугирҙар үҙҙәрен төрлө яҡтан уратып алған дошман көстәренә аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә. Улар Юлино-2 утарынан төньяҡтараҡ урынлашҡан ат һарайҙарына һөжүм итә, икеүһен ҡулға төшөрә. Әммә өсөнсө ат һарайына атака уңышһыҙ тамамлана, төркөм етәксеһе Г.С. Кузнецов ҡаты яралана. Фромандиновка, Юлино-1 и Юлино-2 янындағы бәрелештәрҙә 15-се атлы дивизия штабының барса шәхси составы тиерлек һәләк була, яралана. Петровский исемендәге совхоз йүнәлешендә корпус штабы ла дошмандың көслө уты аҫтына эләгә. Корпус командиры урынбаҫары, гв. генерал-майоры Иван Степанович Дудко, штаб начальнигы, гв. полковнигы Иван Дмитриевич Сабуров, сәйәси бүлек начальнигы, гв. полковнигы А. А. Карпушенко, штабтың оператив бүлеге начальнигы, гв. полковнигы Надашкевич һәм башҡа офицерҙар һәләк була. Комкор, генерал-майор М.Д. Борисов яраланған хәлендә әсирлеккә алына.

Үлемесле алыштарҙа, иң хәтәр ситуацияларҙа ла ихтыяр көсөн һаҡлай алған боевой офицер, 7-се гв. корпусының артиллерия командующийы Р.И. Головановский, иҫән ҡалғандарҙы бер төркөмгә туплап, Должик йырынына килеп еткәс, түңәрәк оборона ойоштора. Юлино-2 утары яғынан дошман бер туҡтауһыҙ һөжүм итеп тора, ул 15-се атлы дивизияның ҡаршылыҡ күрһәткән төркөмдәрен юҡ итергә тырыша. Улар, немецтарҙың атакаларын кире ҡағып, Ивановка - Штеровка шоссеһы янындағы өс курган йүнәлешендә, төньяҡ-көнсығышҡа, фронт һыҙығына табан барыуын дауам итә. Ошо ҡанлы бәрелештәрҙә иҫән ҡалған, инде бер-береһе менән тамам буталып бөткән ике дивизия яугирҙары, атлы һәм йәйәүле һалдаттар, артиллерия ҡалдыҡтары, яралылар тейәлгән ылауҙар, тәрән ҡарҙы ярып, алға ынтыла. Колоннаға юлды Чернухино кешеһе В.И. Денисов күрһәтә. Өс курган янына етеүгә, яугирҙар Юлино-2 яғынан дошмандың көслө артиллерия уты аҫтына эләгә. Снарядтар һыҙғырыуы, көслө шартлауҙар, аттарҙың ярһып кешнәүе, яраланған яугирҙарҙың ыңғырашыуҙары, һүгенеү ауаздары, киҫкен командалар - былар барыһы ла бергә ҡушылғас, ҡәһәрле һуғыш ауазы булып, Дон далаһының төпһеҙ күгенә аша...

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Дүрт йыл буйы барған Бөйөк Ватан һуғышы һәр ғаиләгә онотолмаҫ ҡайғы һәм күтәргеһеҙ ауырлыҡтар алып килде. Тыл һәм фронттың берҙәмлеге, алға ҡуйылған азатлыҡ идеяһы совет халҡына Еңеү яуларға ярҙам итте. Ә бының өсөн бихисап ҡорбандар бирелде. Ул замандың шаһиттары йылдың-йылы һирәгәйә бара. Фронтовиктарҙың балалары үҙҙәре хәҙер - сал сәсле оло быуын кешеләре һәм, Бөйөк Еңеүгә 77 йыл үтһә лә, был көндө бөгөнгөләй хәтерләйҙәр. Һыҙланыуҙар, әрнеүҙәр аша шул алыҫта ҡалған бала саҡ йылдарынан улар яҡтылыҡ та таба. Социалистик Хеҙмәт Геройы, педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Лира КАМАЛОВА һәм Рәсәй Фәндәре академияһы академигы, геология-минералогия фәндәре кандидаты, техник фәндәр докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған нефтсеһе, Рәсәй Федерацияһының почётлы ер аҫты тикшереүсеһе Эрнст ЮЛБАРИСОВ менән шул йылдарҙы иҫкә алдыҡ.**

# БЕҘ ҺУҒЫШТЫҢ



***СССР-ҙа һуғышта ҡатнашҡан яугирҙарға заманында льготалар булдырҙылар. Тик һуң булдырылды ул. Магазинға барып, льготаға нимәләр алырға уларҙың һаулығы ла юҡ ине инде. Льготалар менән балалары, ейәндәре файҙаланды, тиергә була. Ә һуғышта һәләк булғандарҙың балаларына бер нәмә лә ҡаралманы, улар һәр саҡ ситтә тороп ҡалды. Башҡортостандан алда бер нисә өлкәнең губернаторҙары һуғыш балаларына льготаларҙы үҙҙәре булдырҙы. 2013 йылда "Башҡортостан" гәзитендә "Һуғыш балалары иғтибарға һыуһаған" тигән мәҡәләм сыҡты.***

**▸ Лира Шәрифйән ҡыҙы, һуғыш башланғанда һеҙгә алты-ете йәш тирәһе булған. Кешеләр тормошона ҡотолғоһоҙ үҙгәреш килеп ингәнен аңланығыҙмы икән ул саҡта?**

**Л. Камалова:** Унан алдағы йылдарҙы ла хәтерләйем, сөнки атайым Ҡыҙыл армияға 1938 йылда уҡ алынды. Ул Күгәрсен районында мәктәп директоры булып эшләй ине. Уҡытыусы булһын, диплом алһын тип, әсәйемде Темәскә уҡырға алып килә. Темәстән Икенсе Эткол-ға килеп еткәйнек, беҙҙе төшөрҙөләр ҙә, атайымды шул уҡ ат менән хеҙмәт армияһына алды ла киттеләр. Тик унын армияға алынғанын, нишләптер, әйтмәнеләр. Атайым туберкулез менән ҡаты ауырып, 1942 йылда ғына ҡайтып инде. Йәшәренә өс ай тирәһе ҡалған тигәйнеләр, ләкин ул аяғына баҫа алды. "Балаларым хаҡына тереләм", - ти торғайны. Атайыма 1947 йылда ғына уҡытырға рөхсәт бирҙеләр.

**▸ Фронтовиктарға һуңлап булһа ла ниндәйҙер льготалар булдырылды. Ә һуғыш осоро балаларына иғтибар булдымы? Һеҙ бына тоя инегеҙме?**

**Л. Камалова:** Булды, тип әйтә алмайым, сөнки беҙ күмәк инек бит, беҙҙең ҡайғы булмағандыр, тием. Ә шулай ҙа беҙ һуғыштың тере шаһиттары. Һуңғы ваҡытта донъялар боларып тора, илһөйәрлек, әхлаҡ, әҙәп тигән төшөнсәләргә иғтибар итеү, тәрбиә эшен яҡшыртыу кәрәклеге ҡабат ҡалҡып сыҡты. Шуғамылыр, беҙгә лә иғтибар арта башланы. Беҙ берҙәм булдыҡ, сөнки һуғыш килтергән ҡайғылар ҙа, юғалтыуҙар ҙа уртаҡ ине. Еңеү ҙә уртаҡ.

**▸ Йәғни, беҙҙең хәтер өҙөлмәгән, шулай тип раҫлай алабыҙмы?**

**Л. Камалова:** Олатайҙар, атайҙар, ейәндәр, бүләләр быуынында хәтер сылбыры өҙөлмәҫ, тип өмөтләнәйек. Бының өсөн оло быуын үҙ башынан кисергәндәрен балаларына еткерергә тейеш. Мин үҙем педагог булып ҡайҙа ғына эшләһәм дә, һуғыш тематикаһына ҙур иғтибар бирҙем. Бүребайҙа эшләй башлаған йылдарҙа унлаған уҡытыусы һуғыш ветераны ине. Уларҙы балалар тәрбиәләгәндә йәлеп итә торғайныҡ, хәлдән килгәнсә ҡәҙерләргә тырыштыҡ. Әлек мәктәптә аҡса булманы. 9 май етһә, ветерандарға бүләк алырға үҙемдең аҡсаны бирә торғайным. Беҙ бит иман төшөнсәһен белеп үҫкән быуын, атайымдың һәм әсәйемдең өлөшө булһын, тип тә уйлай торғайным. Мәктәпкә мең ярым кубометр утын әҙерләйбеҙ, иң тәүҙә ветерандарға килтереп бирәбеҙ. Һуғыш тематикаһына уҡыусыларҙан инша яҙҙырыу традицияһы булды, уларҙы мотлаҡ район гәзитендә баҫтыра торғайныҡ. Тынысылыкты һаҡлау, оло Еңеү хаҡына ниндәй ҡорбандар бирелгән - быларҙы бөгөн дә балаларыбыҙға, уларҙың балаларына һөйләп барырға тейешбеҙ.

Үҙемдең балаларымды ауылға алып барып, әтмәкес, ҡуян тубығы, кәзә кәбеҫтәһе, һарына кеүек үләндәрҙе күрһәтеп, бына ошоларҙы ашап үҫтек, тип һөйләнем. "Кит инде, шуны соҡоп ашап йөрөмәгәнһегеҙҙер",- тиҙәр. Бер балаҡайға үҙебеҙ күргән аслыҡ тураһында һөйләгәйнем, ул: "Икмәк күберәк ашарға ине. Икмәк күберәк ашаһағыҙ, асыҡмаҫ инегеҙ", - тине. Ул саҡта икмәк тә булманы, тиһәм, тегенең ышанғыһы килмәй: "Нисек булмаһын, ти, инде?" - ти. Олатай-өләсәйҙәр, атай-әсәйҙәр балалар араһында пропаганда алып бармаһа, бына шундай ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та һөйләшеүҙәр килеп сығасаҡ. Кешегә ҡай саҡ бер тапҡыр түгел, ун мәртәбә әйтергә кәрәк. Ҡабатларға кәрәк. Һуңғы йылдарҙа шәжәрә, ырыу-нәҫел ебен барлау популяр булып китте. Ә мин һәр кеше үҙенең һуғыш менән бәйле быуындарын ныҡлап белергә, шуға бәйле шәжәрәһен төҙөргә теләйеш, тип уйлайым. Хатта ғаилә китабын яҙа ала. Мин был бурысты үтәнем, Еңеүҙең 75 йыллығына атайым, әсәйем, уларҙың һуғыштан әйләнеп ҡайта алмаған ҡустылары тураһында "И помнит мир спасенный" тигән китабым сыҡты.

**Э. Юлбарисов:** Эйе, һуғыш йылдарына бәйле нәҫел шәжәрәһен төҙөү тураһындағы фекер менән мин дә килешәм. Беҙҙең дә нәҫел шәжәрәбеҙ бар. Һуғышҡа тиклемге хәлдәрҙе асыҡлап, уны янынан тулыландырҙым. Атайымдың ҡустыһы атылған, уны мин белмәй инем. Атайым хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә булғас, Мәскәүҙә уҡыған саҡта уның яҙмышын асыҡларға тырышып, ағайым менән Оборона министрлығына ла мөрәжәғәт итеп ҡараныҡ, тик яуап алып булманы. Эҙләнеп, архив материалдарын йыйып, ҡайҙа һәләк булғанын барыбер асыҡлай алдым. Благоварҙан уның менән бергә хеҙмәт иткән полкташы яҙғайны беҙгә: "Атайың беҙҙең командир ине. Немец снаряды уны үтәнән-үтә сыҡты. Яраланған кешеләрҙе Харьковҡа лазаретка алып киттеләр". 1943 йылда Харьковтан немецтарҙы ҡыуалар, был саҡта ҡала совет ғәскәре ҡулында була. Әммә бер-ике көндән немецтар Харьковты янынан алалар һәм лазареттағы ике йөҙ офицерһалдатты атып үлтерәләр ҙә, яндыралар. Атайым яраһынан тере ҡалып та, улар ҡулына эләкһә лә, йәшәй алмаҫ ине.

**▸ Һәр ғаилә үҙенең китабын яҙырға тейеш, тигәндән сығып әйтәм, һеҙ бит был бурысты үтәгәнһегеҙ. "Был донъяға беҙ килгәнбеҙ икән, юҡҡа түгел, юҡҡа түгелдер" тип аталған автобиографик китабығыҙҙы ҡыҙ уңында тотам. Унда һуғыш йылдарына ҙур ғына урын бирелә.**

**Э. Юлбарисов:** Мин үҙемдең китабымда республикала 1944 йылда асылған 5-се һанлы балалар йортон миҫал итеп алдым. Был балалар йортон булдырырға, тигән ҡарарға Косыгин ҡултамға ҡуйған. Уны революциянан һуң башланған хөкүмәт сәйәсәтенең дауамы тип аңларға кәрәк. Шул саҡтарҙа әле етемдәрҙе, үкһеҙ етемдәрҙе йыйырға, тәрбиәләргә, уҡытырға, уларға ярҙам итергә тигән эш алып барыла. Һуғыш ваҡытында ошо уҡ хәл ҡабатлана. Беҙҙең республикалағы кеүек ҙур балалар йорто Союзда дүртәү генә булған.

5-се һанлы балалар йортоноң үҙенсәлеге ниндәй ине? Ул милли кадрҙар әҙерләүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы. Етемдәрҙе бөтә райондарҙан йыйһалар ҙа, милли кадрҙар әҙерләү бурысы торғас, иң яҡшыларын ғына ҡабул иткәндәр. Минең был китабым бер класс балаларына арнала. Беҙ балалар йортона 1947 йылда килгән етем йәки үкһеҙ етем балалар бергә йәшәнек, бергә уҡыныҡ. Ә бәхетле бала саҡты беҙгә кем бүләк иткән дә, кем беҙҙе уҡытҡан, тәрбиәләгән һәм кеше иткән? Иң әлек ошо турала ентекләп яҙырға тейешмен, тинем. Дүрт-биш баланың биографияһын ҡыҫҡаса килтереп, уларҙың оло тормош юлына сыҡҡас, кем булып киткәнен яҙҙым. Улар араһынан Министрҙар советы рәйесенең урынбаҫары, министр урынбаҫарҙары, академик ғалимдар, фән кандидаттары, ике генераль директор, министрлыҡтың проект-конструктор бюроһы директоры, атҡаҙанған нефтсе һәм ике атҡаҙанған төҙөүсе, педагогтар, табиптар, инженерҙар, спорт мастерҙары һәм эшҡыуарҙар сыҡты. Дүртәүһе оҙаҡ йылдар сит илдә эшләне. Икәүһе Европа, Азия, Африка, Көньяҡ Америка илдәрендә яуаплы вазифала булды. Үҙемдең ғаиләгә килгәндә лә балалар йортонда белем алыуҙың һөҙөмтәһен күрергә була. 90-сы йылда өс бер туған Юлбарисовты - Марат, Эрнст һәм Илдарҙы - үҙҙәре эшләгән хеҙмәт коллективтары өс кимәлдәге - РСФСР-ҙың, БАССР-ҙың һәм баш ҡаланың Ленин районы халыҡ депутаттары советына кандидат итеп күрһәтте. Әлбиттә, ындай ышанысты һорап алып булмай.

**▸ Һеҙ һуғыш балалары хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан кешеләрҙең береһе, ул хәрәкәт нисек барлыҡҡа килде?**

**Э. Юлбарисов:** СССР-ҙа һуғышта ҡатнашҡан яугирҙарға заманында льготалар булдырҙылар. Тик һуң булдырылды ул. Магазинға барып, льготаға нимәләр алырға уларҙың һаулығы ла юҡ ине инде. Льготалар менән балалары, ейәндәре файҙаланды, тиергә була. Ә һуғышта һәләк булғандарҙың балаларына бер нәмә лә ҡаралманы, улар һәр саҡ ситтә тороп ҡалды. Башҡортостандан алда бер нисә өлкәнең губернаторҙары һуғыш балаларына льготаларҙы үҙҙәре булдырҙы. 2013 йылда "Башҡортостан" гәзитендә "Һуғыш балалары иғтибарға һыуһаған" тигән мәҡәләм сыҡты. Ул саҡта Учалыла әүҙем эшләгән элекке хоҡуҡ яҡлаусы Ә. Әминев тигән кеше бар ине. Ул да һуғыш балалары тураһында бик күп мәғлүмәттәр йыйҙы, исемлек төҙөнө. Ғөмүмән, Өфөлә был эш менән урындағы КПРФ ныҡ шөғөлләнде. Мин дә уларға ярҙам иттем. Бер ваҡыт был инициативаны "Берҙәм Рәсәй" әләктереп алды, һуғыш балалары тураһында Указ сығарҙылар. "Үлемһеҙ полк"ты хәҙер "Берҙәм Рәсәй" ойоштора.

**Л. Камалова:** Беҙҙең "Һуғыш балалары" тигән документыбыҙ бар, уны матур итеп алып килеп бирҙеләр. Матди яҡтан ниндәй ярҙамы барҙыр, белмәйем. Һәр хәлдә, "Мин һуғыш балаһы" тип ҡайҙалыр барырға ла оялам. Сиратһыҙ врачҡа инәм, тиһәң, кешеләрҙән ризаһыҙ йөҙөн күреүҙән тартынам.

Әлбиттә, элек уҡытыусы абруйы ҙур ине. Атайымдың яҙғандары һаҡлана миндә. "Уҡытыусыға йөҙ илле грамм шәкәр, өс йөҙ грамм май, ярты кило он бирҙеләр", тип теркәп барған.

**Э. Юлбарисов:** Етемлек һурпаһын татығандарға еңел булманы бит. Атайым март айында һуғышҡа алынған, ул киткәс, тышта буран сыҡһа, мин тәҙрә төбөнә баҫам да: "Атайым өшөй, аяғы туна инде, ҡулы туна инде", - тип илар булғанмын. Әсәйем, ағайым гел шуны иҫкә төшөрә ине. Әсәйем Өфөлә балалар йорто асыла тигәнде радионан ишетә, унан баш ҡалағы туғандар ҙа кәңәш бирә, шулай итеп, беҙ ғаиләнән өсәүебеҙ балалар йортона эләктек. Ағайым һәм мин өсөнсө бала - 5-сегә, ә кинйәһе 1-се балалар йортонда булдыҡ.

**Л. Камалова:** 1943-1944 йылдарҙа аслыҡ үҙокҡа үтте, беҙ, балалар, бергә йыйылышып, йәшел үләндә һөйләшеп ултыра торғайныҡ. Һуғыш касафатылыр, бер ҡасан да көлөп, ҡысҡырып, уйнап йөрөмәнек. Бер таҡмаҡ иҫтә ҡалған.

*Немец ҡыҙы сәсен тарай,*
*Алтын тарағы булһа.*

✓ *"Уҡығыҙ, уҡып ҡына кеше була алаһығыҙ", - тип әйтә торғайнылар. Был беҙҙең өсөн иң яҡшы лозунг булды, һәм беҙ уны тормошҡа ашырҙыҡ. Мәктәпте мин тик "биш"кә генә тамамланым.*



# ТЕРЕ ШАҺИТТАРЫ

*Атайым да ҡайтыр әле
Эсендә йәне булһа.*

Шунан: "Йән нимә була икән, үҙе үлһә лә, йәне тере ҡаламы икән?" - тип һөйләшкән булабыҙ. Атай юҡ, әсәй гел эштә, беҙҙе күберәк өләсәй-олатайҙар тәрбиәләне. Һуғыш йылдарында балалар йортона бала-сағаны йыйып йөрөнөләр. Бер әсә лә балаһын балалар йортона бирмәне. Ирем ҡайтһа, нимә тип әйтермен, ти торғайнылыр

**Еңеү көнөн иҫләйһегеҙме?**

**Э. Юлбарисов:** Эйе, иҫемдә. Миңә алты йәш ине. Ағайым менән баҡсала серек бәрәңге йыйып йөрөйбөҙ. 9 май - эҫе, ҡояшлы көн! Бер заман аэроплан килеп сыҡты ла, ниндәйҙер ҡағыҙҙар һибеп, Инйәрҙең арьяғына осоп үтеп китте. Олораҡ ағайҙар Инйәрҙе йөҙөп сығып, был яҡҡа йән-фарман сабалар. Кискә табан туған тейешле ағайымдарға барһам, листовка элеүле тора: унда Сталин совет халҡын еңеү менән ҡотлай ине.

**Л. Камалова:** Еңеү көнө минең хәтерҙә шулай тороп ҡалған: Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылы халҡы тауға йыйылған. Ул саҡта телефон тигән нәмә юҡ, митинг үткәрергә булһа, халыҡты ат менән сабып йөрөп йыялар ине. Беҙ, бала-саға, айырымыраҡ торабыҙ. Халыҡ илаша. Һуғыш бөткәндә миңә ун бер йәш, бөләкәй түгелмен, барыбер аңламайым. "Былар нишләп илай икән? Шатлыҡлы хәбәр әйттеләр, һуң, иларға түгел, ҡыуанырға, көлөргә кәрәк бит", - тибеҙ беҙ балалар. Илауҙың да ҡыуаныс икәнен аңламайбыҙ. Элек ап-аҡ прәник була торғайны. Әбейҙәр шул прәникте ваҡ ҡына итеп турап алып сыҡҡандар ҙа, беҙгә, балаларға, өләштеләр. Прәникте оҙаҡ итеп имәбеҙ. Еңеүҙе бына шулай билдәләнек.

**Лира апай, атайығыҙҙың ҡайтҡанын да хәтерләйһегеҙҙер, моғайын?**

**Л. Камалова:** Эйе, хәтерләйем. Бер рус ҡатыны һәйбәт ат егелгән кашауай санала тауҙан килеп төштө. Ул ирен фронтҡа оҙатып ебәргән дә, Баймаҡтан атайымды ултыртып алып килгән икән. "Ул ирен һуғышҡа оҙата, ә мин тылға ҡайтам", - тип, атайым үртәлеп, уңайһыҙланып йөрөнө.

**Э. Юлбарисов:** Уҡытыусыларҙы һуғышҡа алдылар, тип әйткәйнем бит әле. Ҡырҡ дүртенсе йылды Сталинград, Курск алыштары үткәс, уларҙың иҫән ҡалғандарын, артабан үҙ һөнәрҙәре буйынса эшләһендәр өсөн, тыуған яҡтарына ҡайтаралар. Тик беҙҙең атайға әйләнеп ҡайтырға насип булманы.

**Еңеү иғлан ителгәндән һуң, әкренләп фронтовиктар тыуған яҡтарына ҡайта башлайҙар...**

**Л. Камалова:** Ҡырҡ дүртенсе йылда Ғәлиев тигән уҡытыусы ҡайтҡанын хәтерләйем, бөтә ауыл менән ҡаршы алдылар. Унда ла ауылдаштарҙың күҙ йәшен күреп: "Нишләп илайҙар икән?"- тип уйлағайным. Беҙҙең өй ауыл ситендә, һәр бер ҡайтҡанды ҙурлап ҡаршы алалар ине. Ә бына дәррәү ҡайтыу булманы. Берәмләп кенә ҡайттылар Әсәйемдең ҡустыһы Әхмәт ағайым һуғышҡа тиклем Күгәрсен районында мәктәп директоры булып эшләгән. Ул һуғышта хәбәрһеҙ ғәйеп булғас, өләсәйем уны көттө. Сыбығын тотоп, көтөүгә сығып китә. Көтөү машина юлы буйлап килә. Өләсәйем Баймаҡ яғына ҡарап тора торғайны. Бөләкәй улы Сәхиулла Япон һуғышында булып, армияла һигеҙ йыл йөрөп ҡайтты. Элек исемде тулы итеп өндәшәләр ине бит. Өләсәйем атайыма "Сәхиулла, Әхмәҙулла", шунан ғына "Шәрифулла", тип әйтә торғайны. Үҙе үлгәнсе балаларының исеме теләнән төшмәне. Һәр ғаиләләге әсәй-өләсәй шулай булды. Төньяҡ Осетияла бер әсәнең ете улы һуғышта ятып ҡала, улар тураһында йыр ҙа бар. Ауылдың бер осона уларға ете торна һәйкәле ҡуйылған. Мин шуны һәр саҡ уҡыусыларға һөйләй торғайным. "Ете улын көтөп-көтөп тә, көтөп ала алмайынса үлде. Юҡ, ул үлмәне, ә улдарын көтөп, кипте", - тип яҙҙылар ул әсә тураһында.

**Һуғыш балалары иңенә өлкәндәр ауырлығы ла ятты. Юҡҡа ғынамы ни уларҙы "иртә олоғайған" быуын тип тә атайҙар...**

**Л. Камалова:** Әйтәм бит, көлөп-уйнап йөрөгән тиле бала сағыбыҙ булманы. Өйҙә лә тыныс инек. Ололарҙың: "Бөгөн нимә табам, иртәгә нимә ашатам?"- тигән хәсрәте, хәстәре беҙгә лә күсте. Беҙ уларҙы үҙебеҙгә һеңдергәнбеҙ. Ололар донъяһына иртә индек, шуға ла эш башлап китеүе ауыр булманы. Иртәрәк сыныҡтыҡ һәм иртәрәк олоғайҙыҡ. Беҙ бер ваҡытта ла артығын даулашып йөрөмәнек. Бала сағыбыҙ ғына түгел, йәшлегебеҙ ҙә бик юҡ ине. Ҡытлыҡ заманға тура килде. Университетҡа уҡырға индек, көҙ килә инек тә, йәй генә өйгә ҡайта инек. Стипендияға уҡыныҡ, йәйге ике айлыҡ стипендияға кейендек.

**Э. Юлбарисов:** Ә беҙ уҡығанда Хрущев шул йәйге стипендияны бөтөрҙө лә ҡуйҙы.

**Л. Камалова:** Шулай, самалап йәшәргә өйрәндек. Тағы бер нәмә иҫемдән сыҡмай: ҡыҙыл дипломды элек сәхнәлә бирә торғайнылар. Кейергә күлдәгем бар, аяҡҡа таба алмайым. Элек сепраҡ танкеткалар була торғайны. Минең аҡ төҫтә танкеткам бар. Университетҡа килеп еткәнсе уға туҙан ултырҙы. Бәрәфкә инеп, теш порошогы менән танкеткамды таҙарттым. Ҡараһам, ректор янына барғанда ла, кире килгәндә лә юл буйлап минең аяҡтан ап-аҡ порошок ҡойолоп ҡалған... Ана шунан белегеҙ инде беҙҙең хәлдәрҙе. Үҙаллы тормош юлына баҫып, әҙерәк аҡса эшләй башлағас, гел үҙемә оҡшаған аяҡ кейемен ике пар итеп алам. Шундай гәҙәтем бар минең. Ошо тормош юлын ҡабат үтә алыр инемме икән, тип, уйлайым, шунан, юҡ, үтә алмаҫ инем, тип ҡуям. Көйәнтәләп һыу ташыу, брикет менән ут яғыу. Шырпы табыуы ауыр. Усаҡты тоҡандырып ебәрергә, һоҫҡо тотоп, күҙ эҙләп йөрөй торғайныҡ. Һыуытҡыс юҡ, май һорап, күршеләргә ағас ҡалаҡ тотоп барабыҙ. Әле 60-сы йылдарҙа бер икмәк һатып алыр өсөн дә күршеләрҙән аҡса һорап тора торғайныҡ. Бүребай мәктәбенә утын әҙерләгәндә Йылайыр урмандарында балта тотоп үҙем йөрөнөм. Ҡайһы ваҡыт балалар: "Шылтыратып хәл белергә ваҡыт булманы, йә арыған инем", - тип аҡланалар. Минең бер ҡасан да "ваҡытым юҡ", тип әйткәнем булманы, һәм беҙгә арырға ла ярамай ине.



*Еңеү көнө минең хәтерҙә шулай тороп ҡалған: Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылы халҡы тауға йыйылған. Ул саҡта телефон тигән нәмә юҡ, митинг үткәрергә булһа, халыҡты ат менән сабып йөрөп йыялар ине. Беҙ, бала-саға, айырымыраҡ торабыҙ. Халыҡ илаша. Һуғыш бөткәндә миңә ун бер йәш, бөләкәй түгелмен, барыбер аңламайым. "Былар нишләп илай икән? Шатлыҡлы хәбәр әйттеләр, һуң, иларға түгел, ҡыуанырға, көлөргә кәрәк бит", - тибеҙ беҙ балалар. Илауҙың да ҡыуаныс икәнен аңламайбыҙ. Элек ап-аҡ прәник була торғайны. Әбейҙәр шул прәникте ваҡ ҡына итеп турап алып сыҡҡандар ҙа, беҙгә, балаларға, өләштеләр. Прәникте оҙаҡ итеп имәбеҙ. Еңеүҙе бына шулай билдәләнек.*

**Ҙур һынау үткәнһегеҙ, сауабын Аллаһы Тәғәлә насип итһен. 9 Май һеҙҙең өсөн ниндәй байрам? Беҙ уны нисек ҡаршы алырға тейешбеҙ?**

**Л. Камалова:** Мин уны, иң элек, ғаилә байрамы тип ҡабул итәм. Урыҫтар пасха булһа, яҡындары менән бергә йыйылалар бит, беҙ ҙә Еңеү байрамында бөтә туғандар бергә йыйылышып, һәләк булғандарҙы хәтергә алырға тейешбеҙ. Көн матур булһа, ҡырға сығып, тәбиғәт ҡосағында үткәрергә була. Митингылар ҙа, "Үлемһеҙ полк" та үҙ урынында, ә туған-ырыу барыбер бергә осрашырға тейеш, ундай осрашыу-күрешеүҙәр - үҙе үк патриотик тәрбиә. ГДР булған заманда миңә унда командировкаға барыу насип булды. "Һеҙ һуғышты оноттоғоҙмо, беҙҙе ғәфү иттегеҙме?" - тигән һорау бирҙеләр. Мин башымды күтәрҙем дә, нимә булһа ла булыр, тип: "Беҙҙең халыҡтың һандығында өсмөйөшлө хаттар, повесткалар ята. Кеше уларҙы һаҡлаған саҡта, тырышһа ла, һуғышты онота алмаҫ. Беҙ күргән-кисергәндәр, юғалтҡан кешеләребеҙ һәр саҡ беҙҙең менән бергә", - тинем.

Атайым: "Ҡустым Грузияла ятып ҡалды, әсәйемдең ҡустыһы - Украинала, һин шуларҙың ҡәберҙәрен табырға тейешһең", - тигәйне. Грузияға барып, аманатты үтәнем. Әсәйемдең "хәбәрһеҙ юғалған" ҡустыһын ете йыл элек интернет аша табып алдыҡ. Хәҙер асыҡланды, ул Украинаның ҡайһылыр ҡалаһында ерләнгән. Барып килергә ниәт иткәйнем, тик бола башланғас, йөрөп булманы. Мин Трептов паркында булдым, илай торған ҡайындың япраҡтарын тотоп ҡараным, ысынлап та, унда күҙ йәше аға кеүек. Ленинградта Пискарев ҡәберлегенә лә махсус барҙым. Татьяна Савичеваның көндәлеген уҡып баҫып торҙом.

**Үҫкән саҡта ир бала барыбер атай ярҙамына мохтаж була. Эрнст Мирсаяф улы, һеҙ: "Атайым ҡайтып төшөр әле", - тип хыялланманығыҙмы?**

**Э. Юлбарисов:** Беҙ, тормош шулай була икән, тип ҡабул иткәнбеҙ. "Был донъяға беҙ килгәнбеҙ икән, юҡҡа түгел, юҡҡа түгелдер" тигән китабыма рецензияһында класташым Фәнис Исхаҡов: "Мин Эрнстың тормошондағы ошо хәлдәрҙең биш процентын ғына белгәнмен икән", - тип яҙҙы. Һәр беребеҙ үҙебеҙҙең көскә генә таянғанбыҙ. Һуғыш балаларының тормошо ҡатмарлы булһа ла, улар үҙҙәрен раҫланылар, хатта ил кимәлендә генә түгел, ә донъя кимәлендә танылыу алғандары байтаҡ. Фронтҡа киткән сағында атай инәйемә: "Балаларҙы уҡыт", - тип әйткән. Аманатты үтәр өсөн ул хәленән килгәндең бөтәһен дә атҡарҙы. Уҡытыусылар ҙа беҙгә: "Уҡығыҙ, уҡып ҡына кеше була алаһығыҙ", - тип әйтә торғайнылар. Был беҙҙең өсөн иң яҡшы лозунг булды, һәм беҙ уны тормошҡа ашырҙыҡ. Мәктәпте мин тик "биш"кә генә тамамланым.

Беҙгә тормошта бирешмәҫкә, ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ниндәйҙер осҡон һалынған. Әлбиттә, был ҡандан да киләләр, шулай уҡ үҙемдең дә тырышлыҡ бар. Инәйем дә, ике ағайым да минең өсөн үрнәк булды. Туғандарым күп төрлө һөнәр эйәләре ине, ошо сифат беҙҙең балаларға ла күсте. Улар ҙа заман ауырлыҡтарына бирешмәйҙәр, беҙгә оҡшағандар - йәмғиәткә ысын күңелдән файҙа килтерергә тырышалар, алдашмайҙар, һөҙөмтәле эш күрһәтәләр.

**Л. Камалова:** Атайым 1964 йылда ғына тыуған яғы Күгәрсенгә ҡайтты. "Тыуған яғыма ҡайтам, мине шунда ерләһендәр", - тип васыят ҡылды. Миңә: "Һине тыуған ереңдән мәхрүм иттем, алып ҡайтам", - тине. Беҙ бөләкәйҙән Баймаҡ яғында үҫкәс, унда өйрәнгәнбеҙ: "Бында тороп ҡалайыҡ, расписка бирәм, таш яуһа ла һине алып ҡайтып ерләйем", - тип инәлеп ҡарайым. "Юҡ, ағайымдар янында зыяратта урыным да бар", - тине. Йәш саҡта "тыуған яҡ" тигәнде аңламайһың бит инде. Атайым тыуған яғына ҡайтҡас, тағы ла егерме йыл йәшәне.

Ҡай саҡ күҙҙе йомоп, үткән ғүмерҙе уйлап ултырам. Һуғыш йылдары ғүмеремдең иң сағыу күренеше булып килеп баҫа. Кисерештәр тәрәнерәк, ваҡиғалар ҡалҡыуыраҡ булғанғамы, тап шул мәлдәр ғүмеремдең иң ҙур өлөшө һымаҡ ҡабул ителә. Ас-яланғас йөрөгән саҡтарыбыҙ, нисектер, ситтәрәк тороп ҡала. Ә һуғышҡа тиклемге һәм һуғыштан һуңғы йылдарым тоноғораҡ та, ҡыҫҡараҡ та кеүек.

Эйе, мин һаман да кесерткәндән, балтырғандан аш бешерәм, ыумас ыуам. Шулар булды бит беҙҙең ашыбыҙ. Үҙенсәлекле, туҡлыҡлы, тәмле ризыҡ, айырыуса, йәйге эҫелә ҡорот һалып ашаһаң, һыуһынды ҡандыра. Мостай Кәрим: "Хоҙай һәр бер кешенең үҙенең күңелендә", - тип әйтә торғайны. Бына беҙ шулай күңелебеҙҙәге Хоҙайҙың биргәненә шөкөр итеп йәшәйбеҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА,**
**әңгәмәләште.**

**✓ Башҡорт полктарын әрменең иң яҡшы һуғышсылары, тибеҙ. Ә дәүләт түләүҙәренә килһәң, башҡортҡа тейеш түгел, тигәнде ишетәһең. Сөнки дәүләт уның аҫабалығын һаҡлай, имеш. Ғәмәлдә, ул аҫабалыҡ тураҡланып бөтөп бара...**



Ғәлим ХИСАМОВ

# ПАРИЖДА



**(Романдан өҙөктәр)**

*Быйыл Рәсәй Федерацияһы 1812 йылдағы Ватан һуғышына 210 йыл тулыуҙы билдәләйәсәк. Шул айҡанлы яҙыусыбыҙ Ғәлим Хисамов "Француз яуы" тип исемләнгән роман яҙҙы. Иғтибарығыҙға ошо әҫәрҙән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.*

– Хәҙер ихтыярығыҙ булһа, көрәш майҙанына һәм бәһлеүәндәр ярышына саҡырабыҙ! - тип иғлан итте алып барыусы.

- Бәһлеүәндәр - ул гер, штанга күтәреүселәрме? - тип ҡыҙыҡһынды император Ҡудашевтан.

- Эйе, ауырлыҡ күтәреүселәр.

- Әйҙә, шунда барабыҙ.

Александр Беренсе, һис шикһеҙ, көрәшселәр майҙанына барыр тип, был тирәне бик матурлағайнылар. Яҡшы ултырғыстарҙы ла шунда ҡуйғайнылар, ә бәһлеүәндәрҙә - ҡола ялан. Шуға Ҡудашев йәһәтләп ултырғыстар килтерергә ҡушты. Улар барып еткәндә биш-алты ултырғыс бар ине. Батша менән уның иң яҡын һанаттары ултырҙы, ҡалғандар аяғөҫтө ҡалды.

- Тәүҙә гер күтәреүселәр уртаға сыға! -тип иғлан иттеләр.

Икешәр ботло герҙәрҙе дүрт урында сөйҙөләр. Гер бәһлеүәне икәшәр ботлоно 32 мәртәбә күтәрҙе. Шунан һуң "Хәҙер таш күтәреүселәр алыша!" тип әйткәйне, алға ярым шәрә берәү сыҡты ла, уртала ятҡан ҙур ташты саҡ ҡосаҡлап алып күтәрҙе һәм түңәрәк буйлап китте. Түңәрәкте бер ураны. Уның урынына икенсе кеше сыҡты. Быныһы өс ураны. Өсөнсөһө ике түңәрәк менән генә сикләнде. Шулайтып, икенсе кеше таш бәһлеүәне булды.

- Хәҙер майҙанға старшина Бикбирҙене саҡырабыҙ,- тине.

Императорҙың ҡаршы яғындағы кешеләр ҡуҙғалышты һәм уртаға һыбай берәү килеп сыҡты. Был ат менән ни эшләп йөрөй икән, тип уйланы император һәм башҡа бик күптәр. Һыбайлы аҡрын ғына аттан төштө. Күрәһең, был кеше шул тиклем ауырҙыр инде, ул төшкәс, атының арҡаһы күтәрелеп китте. Ҡыҫҡа кәзәкей кейгән был әҙәм, баш кейемен сисеп, Александр алдында баш эйҙе:

- Һаулыҡ теләйем, император ғали йәнәптәре. Старшина Бикбирҙин, - тине лә һулаҡай ҡулында теҙгенде тотҡан килеш ат аҫтына эйелеп инде һәм аяҡтарын киреп, йәтешләп баҫты, тәрән тын алғас, яйлап ҡына атты үҙенең елкәһенә һалды һәм күтәреп китте. Бер, ике, өс... биш, ете аҙым. Бына атты төшөрөр, бына ат менән ҡуша йығылып китер, тип тын да алмай ҡарап ултырҙылар быны. Әммә Бикбирҙе түңәрәкте урап сыҡты, шунан ғына атты аяҡтарына баҫтырҙы, үҙе турайып ҡатты һәм, батша яғына боролоп:

- Бына шулай беҙ бер-беребеҙҙе күтәреп йәшәйбеҙ, - тине.

Император, ирекһеҙҙән буғай, ҡул сәпәкәйләп ебәрҙе. Шунан Ҡудашевтан һорайһы итте:

- Байрамда ул бәһлеүән. Ярар. Ә һуғышта нимә эшләй һуң? Унда ат күтәреп йөрөүҙең кәрәге юҡ.

- Ғали йәнәптәре, уның атҡан уғы бер километрға тиклем оса, ә ярты саҡрымдан атты тишеп үтә. Бына шуға ул алмаштырғыһыҙ һуғышсы.

Александр тел шартлатып ҡына ҡуйҙы.

Еңеүтуй байтаҡ дауам итте әле. Император һәм уның һанаттары йүгеректәрҙе, бәйгене, бейеүселәрҙе ҡараны. Ҡудашев батшаның талсыҡҡанын шәйләне.

- Ғали йәнәптәре, Александр Павлович, - тип өндәште уға үҙ итеп Ҡудашев. Тегенеһе ялт итеп ҡараны. Яңылышыраҡ өндәштем, шикелле, тип үкенде полковник. Ләкин һүҙ телдән ысҡынғайны инде. - Туҡтап, ҡымыҙ эсеп, аяҡтарҙы ял иттереп алайыҡ тигәйнем.

Өндәшмәне император. Баш ҡағыу менән генә сикләнде. Булон урманындағы сиркәүҙең төпкө бүлмәһендә оҙон өҫтәл ҡуйылғайны. Өҫтәлдә башҡортса аҙыҡ-әүҡәт һәм кәсәләрҙә ҡымыҙ.

- Ғали йәнәптәре, рәхим итегеҙ, ҡымыҙҙан,- тип саҡырҙы Ҡудашев.

- Нимә була ул ҡымыҙ?

- Ҡымыҙ бейә һөтөнән яһалған эсемлек. Башҡорттар уны һыуһынға ҡуллана.

Александр ҡымыҙҙы ирендәрен тигеҙеп кенә тәмләне, шунан аҙ ғына йотто, аҙыраҡ торғас, һауытты бушатҡансы эсте.

- Шәп эсемлек. Тағы бармы? - тип ебәрҙе. Ҡудашев ирен ситтәре менән генә йылмайҙы.

- Әлбиттә, бар. Тик уны һаҡланыбыраҡ эскән яҡшы, эскә тейеп ҡуйыуы бар.

Тәүҙә еңелсә генә ҡапҡылап ултырҙылар, шунан баяғы һарыҡтың һурпаһы менән ите килде, бер юлы шуның янына шештә бешкән ярым ҡурылған ит. Император был рәүешле итте күп ашағаны юҡ ине. Шуға, тағы ла бер тост әйтеп, йәнә елле генә киҫәк ит ҡапҡас:

- Ҡудашев, йәлләмә баяғы ҡымыҙынды. Мин бүтән ит ашай алмайым, - тип ебәрмәһенме.

Йүгертеп ҡымыҙ килтерҙеләр. Император һауытты бушатты ла:

- Рәхмәт байрамығыҙ, һыйығыҙ өсөн. Һағынып һөйләргә ҡалыр. Инде таралышайыҡ, - тип ҡуҙғалды.

Атҡа атланыр алдынан Александр Беренсе янында торған Ҡудашевҡа боролдо.

- Әҙерләгән ризығығыҙ ҙа, туйығыҙҙың саралары ла бик күркәм булды. Аҡса ҡайҙан алдығыҙ? Өҫтәп аҡса һораусылар араһында һеҙҙең ғариза күренмәне.

- Беҙ, ғали йәнәптәре, бер ниндәй ҙә ғариза яҙманыҡ. Сөнки башҡорттарға ҡаҙнанан бер тин дә бирелмәҫен беләбеҙ бит. Рәсәй өсөн һуғышта йөрөйбөҙ, ә сығымдарҙы тулыһынса халыҡ үҙе күтәрә. Байрамға ғына түгел, һуғышҡа һалынған аҡса ла халыҡтыҡы. Бында Парижға ингән полктарҙа хеҙмәт итеүселәрҙең кеҫәһенән алдыҡ. Казактарға, мәҫәлән, хәрби хеҙмәт өсөн аҡса бирелә, орден, миҙал алһа, өҫтәп түләнә. Ә башҡортҡа бер нәмә лә юҡ. Тәреле орден менән наградланһа, уныһы ла бирелмәй. Сөнки башҡорт уны таҡмай, мосолман башы менән күкрәгенә тәре ҡаҙап йөрөй алмай бит инде. Тәре урынына ай ҡуйығыҙ, тип күпме әйтеп ҡараныҡ. Ишетеүсе юҡ. Башҡорт полктарын әрменең иң яҡшы һуғышсылары, тибеҙ. Рәсәй өсөн йәнен аямай утҡа ташлана ул. Ә дәүләт түләүҙәренә килһәң, башҡортҡа тейеш түгел, тигәнде ишетәһең. Сөнки дәүләт уның аҫабалығын һаҡлай, имеш. Ғәмәлдә, ул аҫабалыҡ киҫкеләп, тураҡланып бөтөп бара...

Ҡудашевтың янында торған генерал Платов тамаҡ ҡырҙы, император өҙәңгегә баҫыр өсөн аяғын күтәрҙе. Шул саҡта ғына Ҡудашев артығыраҡ һүҙ ысҡындырып ташлағанын һиҙҙе. Ул арала Александр атҡа ырғып менде лә ҡамсыһы менән юрғаға һыҙырҙы. Ат баҫып торған еренән алға уҡталды. Генерал Платов:

- Полковник, кем янында торғаныңды онотоп ташланың түгелме һуң? Был Наполеонды теҙ сүктергән Рәсәй батшаһы бит,- тине.

Ҡудашев телен тешләне, ләкин һуң ине инде.

- Мин батшаға тик дөрөҫөн генә әйттем бит, - тигән булды.

- Ҡайһы берҙә тоҡта ятҡан беҙ кеүек дөрөҫлөктө әйтмәй ҡалған ялған яҡшы, - тине лә Платов атына менде һәм боролоп та ҡарамай, китеп барҙы.

## Сена буйында

– Әйҙә, ҡайтайыҡ, - тине хеҙмәттәше Усманға.- Алла бирһә, иртәгә тағын килербеҙ. Бигерәк матур донъя. Беҙҙең яҡҡа оҡшап китә ҡай бер ере.

- Шулай шул. Тәүге мәртәбә күргәндә әллә үҙебеҙҙең Аҫҡын һыуы инде, тип аптырап торҙом. Тик беҙҙең һыу шәберәк аға һәм быға ҡарағанда һайыраҡ.

- Ҡоштары ла беҙҙекеләргә оҡшаған, тип әйт.

- Шулай шул. Һайыҫҡан - барыбер һайыҫҡан инде. Шыҡырыҡлауы ла шул уҡ. Сәпсек тә беҙҙәге һымаҡ оса-ҡуна ем эҙләй.

- Усман да беҙҙәге кеүек оҙон көйҙө яңғырата ғына...

Усман тәүҙә һүҙҙең мәғәнәһен төшөнә алмай торҙо. Аңлағас, хахылдап көлөп, иптәшенең арҡаһына ҡулы менән гөпөлдәтеп һуғып алды.

- Йоҙороҡ та беҙҙәге кеүек дөпөлдәп төшөп тора...

Егеттәр көлөшөп, бер-береһен баҫтыра, шаяра башланы. Шул саҡ ҡаршыларына бер егет, бер ҡатын кеше килеп сыҡты. Быларҙы күргәс тә, ҡатын Усмандарға төртөп күрһәтеп, нимәләр әйтте. Ир кеше шаярыусыларҙың ҡаршыһына сығып баҫты ла:

- Туҡтағыҙ әле, - тине урыҫсалап.

Усман менән иптәше ҡапыл шымды һәм баҫҡан ерендә ҡатты.

- Һеҙҙе йырға бик оҫта тиҙәр. Дөрөҫмө?

Тегеләр яуырын һикертеү менән генә яуап бирҙе.

- Оҫта тип... Йырлайбыҙ инде шунда.

- Мин түгел, ана Усман матур йырлай.

- Йә әле, йырлап күрһәт.

- Кит әле. Тиктомалдан ауыҙ күтәреп йырлап торорға, мин һиңә иҫәрме ни?

- Һине берәү ҙә иҫәргә һанамай. Бынау ханым һинең йырлағанды ишеткеһе килә.

- Мине ҡайҙан белә ул?

- Белә һиңә, белмәй ҙә. Ошонда Сена буйында һеҙҙең байрамда йырлағаныңды ишеткән.

- Ҡыҙыҡ икән.

Ҡатын кеше урыҫса, башҡортса аралаштырып һөйләгәндең, әлбиттә, бер нәмәһен дә аңламаны. Тик барыбер Усманға инәлеп-ялбарып ҡараны. Шул арала теге егет кешегә нимәләр әйтеп тә өлгөрҙө.

- Ярар, инәлтмә. Ана бит һорай.

- Нимәне йырлайым һуң?

- Үҙең теләгәнде.

Усман тамағын ҡырғылап алды ла:

- Йырла тиһәң, мин йырлайым.

Һиңә ниндәй йыр кәрәк? - тип ебәрҙе. Юғары, таҙа тауышы туғайға таралды. Усман шымыу менән ҡатын сәпәкәйләп ебәрҙе.

- Браво! - тип тағы ла нимәләр ҡысҡырҙы.

- Тағы, - тине ул арала баяғы ир. - Ана бит һорай.

- Юҡ,- тине Усман. - Бер ҡатлы тигәс тә, һәр мөйөштә йырлап йөрөргә мин иҫерекме ни? Бик тә бик минең йырлағанды ишеткеһе килә икән, иртәгә һыу буйына килһен, унда яр ситендә яҫы ташлы урын бар. Шул ергә.

- Ҡасан?

- Нимә ҡасан?

- Ҡасан килһен?

- Кискә табан.

Быны теге ир ҡатынға һөйләне. Тегенеһе ризалашып, баш ҡаҡты.

Иртәгәһенә вәғәҙә ителгән урынға барырғамы-юҡмы тип икеләнеп йөрөй ине Усман, иптәше Хәйернас уны килеп тапты.

- Усман, әйҙә һыу буйына ат менеп барабыҙ.

- Нишләп?

- Беҙҙе атлы халыҡ, тип белеп торһон французлар. Атлы башҡорт, тип.

- Унһыҙ ҙа белә инде улар.

- Белә һиңә, белмәй ҙә. Улар өсөн беҙ барыбыҙ ҙа - урыҫ.

- Айырманы күреп тора ла инде улар.

- Күрә һиңә, күрмәй ҙә. Кисә теге егеттән һораштым. Тылмас икән ул. Күрше полкта йөрөй, ти. Француз өсөн беҙ - башҡорттар - таш быуаттан сыҡҡан кеше ашаусылар икән. Төньяҡ амур тигәндәре лә әкиәт менән бәйле булған өсөн, ти.

- Ә ни эшләп мине йырлатмаҡсы була һуң улар?

- Уныһы ла шул тәүтормош менән яҡынлыҡты күреү өсөндөр. Шуға беҙ теге ергә ат менеп барайыҡ. Ни тиһәң дә, ат хужаһы таш быуатты үткәнде аңлата бит инде.

- Ярар һуң.

Усман менән Хәйернас һыу буйына барып еткәндә, унда биш алты кеше күләгәлә ултыра ине. Кисәге икәү, тағы ла өс-дүрт ҡыҙ. Былар егеттәрҙе шау-шыу һәм туҡтауһыҙ тигәндәй баш ҡағып, ҡаршыланы. Хәйернас аттан төштө лә иң ситтәге ҡыҙға ҡулын һондо. Тегенеһе ҡаршы ҡулын һуҙғайны, быныһы уны алып, ирендәренә яҡынлатып, үбеп алған булды. Уны күҙәтеп аттан төшмәй ултырған Усман:

- Оһо! - тип ҡуйҙы һәм Хәйернас, барыһы менән дә күрешеп сыҡҡас:

- Башлайбыҙмы? - тип һораны, тылмасҡа ҡарап.

- Беҙҙең халыҡтың йолаһы буйынса, мин тәүҙә йырҙың тарихын һөйләйем. Шунан, йырлайым.

Тылмас Усманды һүҙмә-һүҙ тигәндәй ҡабатлай торҙо.

- Хәҙер һеҙ ишетәсәк йыр,- тип һөйләп китте Усман, - "Тәфтиләү" тип атала. Был йыр бынан бер быуат тирәһе элек сығарылған. Рәсәй батшаһының һанаты - Тәфтиләү тигән полковник башҡорттарҙы үҙҙәренә буйһондора була халыҡты ҡурҡытыр өсөн беҙҙең яҡтағы Һөйәнтуҙ ауылында 105 кешене бикләп, тере көйө яндырта, 1 мең тирәһен аттыра һәм штык ҡаҙатып үлтертә. Халҡыбыҙ ана шул яуызды ҡарғап, йыр сығарған.

**(Дауамы. Башы 17-се һанда).**

✓ *Тәүге һанды сығарған ваҡытта уҡ мин йыйған һәр бер бәләкәй генә ҡурғаш хәрефтең немец фашистары йөрәгенә пуля булып ҡаҙалыуын теләнем. Артабан ошо теләк көсәйгәндән-көсәйә барҙы...*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**"Һуғыш мәлендә гәзит - һулар һауа. Кешеләр гәзитте яҡын кешеләренән килгән хаттан алдараҡ аса. Хәҙер гәзит мотлаҡ һиңә төбәлгән хат. Һинең яҙмышың унда яҙылғанға буйһона", - тип яҙа билдәле памфлет оҫтаһы Илья Эренбург һуғыш йылдарында. Ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ҡәләм яҙыу ҡоралы ғына түгел, бәлки, һуғыш ҡоралына әйләнә. 1942 йылдың аҙағына һуғыш майҙанында 4 үҙәк, 13 фронт, 60 армия, 33 корпус, 600 дивизия һәм бригада гәзите сығарыла. Милли дивизиялар шулай уҡ үҙ гәзиттәрен булдыра, шулар иҫәбендә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының башҡорт телендә нәшер ителгән "Ҡыҙыл атлылар" гәзите лә була.**

# "ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР" -

## Башҡорт кавалерия дивизияһының пропаганда ҡоралы



Али Карнай (уңда) дивизия штабы комиссары Дәүләт Аритҡолов менән.



ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР

Бөгөн немецте үлтерҙеңме әле?

НЕМЕЦТЕ БЕРӘМЛӘП СУПЛӘЙЕК

Орудиеға мөхәббәт

Ул ҡурҡыуҙы белмәне



Шакир Насиров менән Әхтәм Ихсан.

### Гәзитте кемдәр сығарған?

"Ҡыҙыл атлылар" гәзитенең яҙмышы кавалерия дивизияһының һуғыштағы тәүге этабы менән тығыҙ бәйләнгән. Билдәле булыуынса, Башҡорт АССР-ында 112-се һәм 113-сө һанлы ике кавалерия дивизияһы төҙөлә. 113-сө кавалерия дивизияһы составы башҡа хәрби берекмәләргә таратып бирелә, ә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы 1942 йылдың апрелендә юлға сыға. Ошо көндән алып, билдәле булған бөйөк һәм трагик рейдҡа тиклем (рейдта дивизияның күп өлөшө ҡырыла һәм һуңынан уның составы СССР-ҙың төрлө төбәктәренән килгән кешеләр менән тулыландырыла, башҡорттар нисбәте кәмей), "Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә башҡорт атлыларының легендар юлы яҡтыртыла. Редакция хеҙмәткәрҙәре ҡойоп ямғыр яуғанда ла, ел-дауыллы буран ҡоторғанда ла, сатлама һыуыҡта ла - ниндәй шарттарҙа ла гәзиттең һәр һанын үҙ ваҡытында фронттағы яугирҙарға еткереп тора. Гәзит һуғышсыларҙың рухын күтәрә. Уның биттәрендә яңынан-яңы мәғлүмәттәр, тыуған яҡтан килгән хаттар, һуғышсыларҙың ҡаһарманлыҡтары тураһындағы яҙмалар донъя күрә. Гәзит һуғышсыларҙы батырлыҡҡа, дошмандан үс алырға өндәй.

Хәрби шарттарҙа гәзит сығарыу еңелдән булмай. Ҡайһы саҡта мөхәррир русса килгән мәҡәләләрҙе наборщиктарға туранан-тура башҡортсаға тәржемә итеп йыйҙыра. Ҡағыҙ етешмәгән саҡтар ҙа була. Әммә ниндәй генә ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, мөхәррир Али Карнай гәзиттең бер һаны ла сыҡмай ҡалмаһын тип тырыша.

***Дивизияла наборщик булып эшләгән Хөршиҙә Хәирова иҫтәлектәренән:*** "Хәтеремдә, Башҡорт атлы дивизияһы гәзитенең беренсе һанын 1942 йылдың апрелендә сығарғайнык. Тирә-яҡта тынлыҡ, һалдаттар шаяра-көлә, беҙгә эшләргә ҡамасаулаусы юҡ. Шуға күрәлер инде, ул саҡта миңә дивизия гәзите типографияһында эшләү артабан да бына шулай еңел генә үҙ ыңғайына барыр төҫлө тойолғайны. Тәүге һанды сығарған ваҡытта уҡ мин йыйған һәр бер бәләкәй генә ҡурғаш хәрефтең немец фашистары йөрәгенә пуля булып ҡаҙалыуын теләнем. Артабан ошо теләк көсәйгәндән-көсәйә барҙы... Бына беҙ фронттың алғы һыҙығында, Елецк ҡалаһы эргәһендәге бер ауылда. Ҡала яна, тирә-яҡты һуғыш һөрөмө ҡаплап алған. Ошонда беҙ дивизия гәзитенең икенсе һанын сығарҙыҡ, һуғыш шарттарында гәзит сығарыуҙың ауырлыҡтарын мин тәүге тапҡыр ошонда татыным. Бынан һуң беҙ шундай ауырлыҡтар менән йөҙәрләгән гәзит һандары, листовкалар баҫтырҙыҡ. Бармаҡтарым, хәрефтәр соҡоп, ҡанап бөтә торғайны. Эшебеҙ бик күп - үҙебеҙ йыябыҙ, үҙебеҙ уҡып төҙәтәбеҙ (корректор ҡаралмаған), гәзит баҫа торған машинаны ла йыш ҡына үҙебеҙгә әйләндерергә тура килә. Хатта ҡайһы саҡта гәзиттәрҙе полктарға үҙебеҙ алып барып тарата торғайнык. Төндә типографияла эшләүселәр алмашлап, ҡулға карабин тотоп, үҙ мөлкәтебеҙҙе һаҡлайбыҙ - поста торабыҙ. Ләкин беҙ, теш ҡыҫып, бирешмәскә, һыр бирмәскә тырыштыҡ. Шулай итмәй булмай. Беренсенән, ир-егеттәр ҡан ҡойоп һуғышҡанда, миңә беҙ, ҡыҙҙарбыҙ, тип, иҙрәп төшөргә тейеш? Килешмәй. Икенсенән, үҙебеҙ сығарған гәзитте уҡығас, һуғышсыларҙың дәрте күтәрелеп, батырлыҡтары артып киткәнен күреү беҙгә яңынан-яңы көс өҫтәй ине.

Һуғыштар ҡыҙыу барған көндәрҙә гәзит сығарып өлгөрөп булмай. Шундай саҡтарҙа "Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакцияһы иң мөһим хәбәрҙәр менән листовкалар баҫтыра. Редакция хеҙмәткәрҙәренә шәмде снаряд гильзаһынан эшләп алырға тура килә ине. Шинель итәгенән филтәлек бер-ике иле буҫтау ҡырҡып алып, шуны яндырып, тоноҡ яҡтылыҡта хәреф йыйып, корректура уҡып, листовкалар әҙерләйбеҙ. Гәзиттең наборщик ҡыҙҙарына көслө һуғыштар мәлендә санитар булып эшләргә лә тура килде. Улар төнө буйы эшләп арыуҙарын онотоп, һуғыш яланынан яралыларҙы алып сығып, яраларын бәйләргә тотона ине.

Бер тапҡыр алыҫ юлға сыҡҡанда гәзит сығарыу өсөн кәрәк булған типография материалдары - линейкалар, бабашкалар, башҡа пробельный материалдар ҡойолоп ҡалды. Билдәләнгән урынға барып еткәс, "Ҡыҙыл атлылар" хеҙмәткәрҙәре, нисек итеп гәзит сығарабыҙ инде, тип аптырап ҡалды. Бәхеткә күрә, разведчиктар яҡында ғына немецтарҙың типография тейәлгән бер машинаһы ҡыйралып ятҡанын килеп әйтә. Редакция хеҙмәткәрҙәре унда барып, байтаҡ техник материалдар йыйып алып ҡайтты. Гәзит ваҡытында сыҡты..."

"Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә танылған өс әҙип эшләй. Мөхәррир вазифаһын күренекле яҙыусы Али Карнай (Имамғәли Мөхәмәтдин улы Зөлкәрнәев) башҡара. Редакцияның яуаплы сәркәтибе икенсе бер ҙур әҙип Шакир Насиров була. Шағир Әхтәм Ихсан штаттағы хәбәрсе сифатында алғы позиция менән редакция араһында йөрөп, гәзитте мәҡәләләр менән тәьмин итә. Яу яланынан репортаждар яҙа, һалдаттарҙың мәҡәләләрен ойоштора.

Али Карнай башҡорт яҙыусылары-нан иң тәүгеләрҙән булып, һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа китеү теләген белдерһә лә, уның теләге 1942 йылда ғына бойомға аша. Ошо йылдың мартында партияның Өлкә комитеты тәҡдиме буйынса ул яңы ойошторолған Башҡорт атлылар дивизияһы эргәһендә сыға башлаясаҡ "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенә мөхәррир итеп тәғәйенләнә. Али Карнайға бер юлы яуаплы ла, үҙенсәлекле лә вазифа йөкмәтелә. Ул Бөйөк Ватан һуғышы фронтында сыҡҡан берҙән-бер башҡорт телендәге гәзиттең мөхәррире була. Яҙыусы-журналист фашистарға ҡаршы ҡылысҡа-ҡылыс килеп һуғышҡан совет һалдаттары менән яҡындан аралаша. Улар менән бер блиндажда йәшәй, тиһәң дә була. Фронт гәзитендә "Ҡыҙылармеец Х. Мансуров" имзаһы менән ул ошо ҡыйыу көрәшселәр тураһында һөйләүсе тиҫтәнән артыҡ бәләкәй-бәләкәй очерк-һүрәтләмәләр, хикәйәләр урынлаштыра. Күләм яғынан ҙур булмаһалар ҙа, оҫта яҙыусы-журналист тарафынан яҙылған был мәҡәләләр фронт ысынбарлығының күп яғын яҡтырта. Яҙыусы Ватан һуғышы күренештәрен ул һүрәтләмә-мәҡәләләр аша бәйән итеү менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул башҡорт дивизияһының һуғышсан юлын, уның батырлыҡтарын ныҡлап өйрәнә. Ҙурыраҡ әҫәр өсөн материалдар туплай.

(Дауамы 12-се биттә).

ӘЙҘӘГЕҘ...



# ҒӘФҮ ИТЕРГӘ ӨЙРӘНӘЙЕК!

**"Киске Өфө"нөң 2-се һанында Гөлбаныу Гәрәеваның "Күңелемде бикләнем" тип аталған кәлимәһен уҡып сыҡҡас, үҙем дә шундай хәлдә ҡалған ваҡытымды иҫкә төшөрҙөм.**

Студент ваҡытта йәшәргә урыны булмаған яҡташымды үҙемә алып ҡайттым. Бер нисә йыл бер мендәрҙә башыма башын терәп йоҡланы. Аҙаҡ бер түгел, ике тапҡыр эшкә урынлашырға ла ярҙам иттем. Әммә йылдар үткәс, аҫтыртын ғына миңә аяҡ салырға маташҡанын белеп ҡалдым һәм... мин дә йөрәгемде бикләнем. Тик унан миңә еңеллек килмәне. Уны ғәфү иткәс кенә күңел бөтөнлөгөнә өлгәштем. Түбәндәге риүәйәт тә кисерә белеү тураһында.

Көндәрҙән бер көндө Күктә Йәндәрҙең береһе Ергә төшөп, Кеше ғүмере менән йәшәргә йыйынған. Бәндә затына әйләнер алдынан Ғаләмдәр Хужаһы унан:

- Ни өсөн Ергә төшөргә уйлайһың? - тип һораған.

- Ғәфү итергә өйрәнгем килә, - тип яуап биргән ул.

- Ә кемде ғәфү итәһең һуң? Һинең эргәлә киң күңелleләр, бер-береһен яратҡан кешеләр генә буласаҡ бит... Уларҙың уйҙары, ҡылыҡтары, маҡсаттары - барыһы ла изге, яҡты, саф.

Йән тирә-яғына ҡарап алған һәм, ысынлап та, уны яратыусылар, үҙ итеүселәр генә уратып алыуын күргән.

- Минең шул тиклем ғәфү итергә өйрәнгем килгәйне. Хәҙер нимә эшләргә һуң миңә? - тип ҡайғыға ҡалған.

Шул саҡ уның янына икенсе Йән килгән дә:

- Ҡайғырма. Яратыуым шул тиклем көслө, шуға күрә Ерҙә һиңә ғәфү итергә өйрәнеү шарлығын татырға ярҙам иткем килә. Мин һинең әсәйең булырмын һәм һине бала саҡта рәнйетермен, ҙурайғас, һинең эшенә ҡыҫылып, бәхетле йәшәргә бирмәҫмен. Һин шул ваҡытта кисерергә өйрәнерһең, - тигән.

Өсөнсө Йән дә уның менән Ерҙә йәшәргә әҙер булыуын белдергән.

- Һин ҡатын-ҡыҙ затын һайла, ә мин ир булырмын. Мин һиңә хыянат итермен, эштән иҫереп ҡайтырмын. Яҡын кешеңдең ошо кире ҡылыҡтары аша ғәфү итергә өйрәнерһең, - тигән.

Дүртенсе Йән дә уға ярҙам итергә теләүен әйткән:

- Мин һинең иң яҡын әхирәтең булырмын һәм иң кәрәкле саҡта һине һатырмын. Ә һин ғәфү итерһең...

Бишенсе Йән уның эшендә етәксе булып, уға ҡарата ҡаты мөғәмәлә булырға вәғәҙә биргән.

- Минең аша һин үҙеңдән көслөрәк кешеләрҙе кисерергә өйрәнерһең, - тигән.

Шулай итеп, Йәндәр нисек йәшәргә план төҙөгәндәр ҙә Ергә төшкәндәр. Әммә матди тәнгә эйә булыу менән Күктә хәл иткән килешеүҙе онотҡандар ҙа, ысынбарлыҡҡа инеп киткәндәр, йәғни бер-береһен ратһалар ҙа, үпкәләшкәндәр, бер-береһенә гәйеп таҡҡандар, асыуланышҡандар. Һөҙөмтәлә шул сәбәпле бер-береһен юғалтҡандар...

Тормошта ла шулай. Күңелебеҙгә яҡынраҡ кешеләргә башҡаларға ҡарағанда талапты ҡатыраҡ ҡуябыҙ. Ныҡыраҡ үпкәләйбеҙ, ныҡыраҡ рәнйейбеҙ. Уларҙың аҙ ғына яңылышлығын, хатаһын, кәмселеген ғәфү итә алмайбыҙ. Ә был тойғонан үҙебеҙгә генә ҡыйын. Шуға күрә ғәфү итергә өйрәнәйек. Бер-беребеҙҙе юғалтмаҫ өсөн...

**Лена БАРЫЕВА.**

✓ *Иптәше: "Ана шул ҡаршыла йөрөгән немецтарҙың береһен бер атыуҙа үлтерә алһаң, ошо затлы мыйыҡтың бер бөртөгөн йолҡоп алыу шәрәфенә ирешә алырһың", - тип яуап бирә. Шулай итеп, улар араһында ярыш башланып китә.*






# ҠАТЫҠ ЭС, АЛМА АША...

■ Байрамдарҙы мул ризыҡлы табын артында үткәргәндән һуң, үҙеңде диеталар һәм асығыу менән яфаларға ярамай, ти табиптар. Уларҙың фекеренсә, ҡатыҡ эсеп йәки алма ашап ҡына үткәрелгән бер көн диеталарға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Көнөнә 4-5 тапҡыр әҙ-әҙләп ашау, аш һеҙдерөү органдары функцияһын боҙоусы продукттар, мәсәлән, тәмләткестәр, маринадтар, ыҫланған ризыҡтар, хайуан майҙары ҡулланмау ҙа ашҡаҙан эшен көйләп ебәрәсәк. Әгәр ҙә бер ниндәй ҙә ауырлыҡ кисермәйһегеҙ икән, организмды шлактарҙан таҙартыу өсөн өҫтәмә саралар күреү кәрәклеге юҡ. Бары тик майлы һәм татлы ризыҡтарҙан баш тартығыҙ.

■ Көнөнә 4 стакан лимонад эсеүселәр депрессияға йышыраҡ бирелә, тип раҫлай белгестәр. Ғалимдар уҙғарған тикшеренеүҙәрҙә 50 йәштән 71 йәшкә тиклемге 264 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың ниндәй эсемлектәргә - сәйгә, ҡәһүәгә, емеш-еләк һуттарына, лимонадҡа өҫтөнлөк биреүен тикшергәндән һуң, ғалимдар лимонад яратыусыларҙың күберәк төшөнкө кәйефтә булыуын асыҡлаған. Ә кем көнөнә 4 сынаяҡ ҡәһүә эскән, улар был эсемлекте яратмаусыларға ҡарағанда депрессияға һирәгерәк бирелгән. Төньяҡ Каролинаның Сәләмәтлек милли институты докторы Хонглей Чена аныҡлауынса, татлы эсемлектәрҙе ҡәһүә менән алыштырыу депрессия хәүефен күпкә кәметергә ярҙам итәсәк.

■ Хайфа Сәләмәтлек милли институты (Израиль) ҡатын-ҡыҙҙар өсөн идеаль параметрҙар иҫәпләп сығарған. The Epoch Times яҙыуынса, иҫәпләүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡланыуынса, буйы 170 сантиметр булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауырлығы 77 килограмм булырға тейеш. Күптән түгел Израилдә подиумға ябыҡ моделдәрҙе сығармау тураһында закон ҡабул ителде. Был сара - модель стандарттарына ярарға тырышҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙа барлыҡҡа килеүсе анорексияны булдырмауға йүнәлтелгән. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ матурлығы идеалына килгәндә, эштәр былайыраҡ тора. Әгәр ҙә 2012 йылда үткәрелгән һорау алыуҙар буйынса ҡараһаҡ, гүзәл заттың ирендәре Скарлетт Йохансондыҡына, сикәһе ҡара тәнле һылыу Холли Берриныҡына, тиреһе Эмми Адамс һәм тәне Пенелопа Круска оҡшаһа, ул матур, тип иҫәпләнер ине.

■ Стокгольм университеты ғалимдары раҫлауынса, мармелад, емеш желелары, төрлө ҡайнатмалар сәләмәтлек өсөн мотлаҡ кәрәк, сөнки уларҙың составындағы пектин организмдан зарарлы матдәләрҙе сығарыуға булышлыҡ итә. Пектин - үҙенсәлекле химик структураға эйә булған үсемлек сығышлы углевод. Ул организмдан ауыр тоҙҙарҙы, ҡурғаш һәм башҡа матдәләрҙе сығарыу һәләтенә эйә. Еләк-емеш желеһы һәм мармелад организмдың бөтөн проблемаларын хәл итә алмаһа ала, күп белгестәр иҫәпләүенсә, был татлы ризыҡтарҙы көн һайын ашау күнелһеҙ өҙләгеүҙәр хәүефен күпкә түбәнәйтә.

■ Ярты быуат элек музыканттар һәм һауынсыларҙың һөнәри сире иҫәпләнгән беләҙектең туннель синдромы сире бөгөн компьютер уйындары уйнарға яратыусылар ауырыуына әүерелә. Ҡул суктарының ҡабатланып торған һәм автоматизмға еткерелгән хәрәкәттәре һөҙөмтәһендә ҡулдарҙың һиҙгерлеге, хәрәкәттәр боҙола, һыҙлау, ауыртыу, беләҙек һәм ҡушар һөйәге өлкәһендә ҡалтырау барлыҡҡа килә. Быларҙы булдырмау өсөн табиптар 1-2 сәғәт һайын эште туктатып, ҡул суктарындағы ҡан әйләнешен яҡшыртыусы бер нисә күнекмә яһарға тәҡдим итә.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# "ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР" -

## Башҡорт кавалерия дивизияһының пропаганда ҡоралы

**(Башы 11-се биттә).**

Бәрелеш булған урындарҙы характерлаған һәм ваҡиғаларҙы тәфсирләп яҙған көндәлек алып бара. Ләкин алыҫ Дон далаларында, өҫкә пуля ямғыры һибеп торған шарттарҙа, башҡорт телендә гәзит сығарыуҙы ойоштороу, уны һуғышсыларҙы янынан-яңы еңеүҙәргә рухландырырҙай йәнле материалдар менән тәьмин итеү яҙыусының бөтә игтибарын ялмай. Тәүҙәрәк уға ҙурыраҡ әҫәр яҙырға форсат та ҡалмай. Был хаҡта Карнай үҙе лә: "Яҙып булмай! Ваҡыт юҡ. Ә яҙаһы нәмәләр страшно күп! Шулай ҙа тырышып ҡарарға иҫәп юҡ түгел", - тип яҙа Баязит Бикбайға ебәргән хатында.

"Ҡыҙыл атлылар"ҙың ҡыйыу мөхәррире тураһында иҫтәлегендә Кирәй Мәргән түбәндәгеләрҙе яҙа: "Али Карнай һәр ваҡыт һалдаттар, һуғышсан командирҙар, политработниктар араһында булды. Уның полевой сумкаһы һәр төрлө иҫтәлектәр, һуғышсан эпизодтарҙы сағылдырған яҙмалар менән тулы була торғайны. Көн һайын тиерлек ул яңы ҡуйын дәфтәре башлай. Уны тултырғас, серияға бүлеп, номерлап, тәртипкә килтерә лә, йыйып, Өфөгә туғандарына ебәрә: "Материал ҡайта торһон әле. Бында юғалыуы бар бит. Иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, берәй роман һымаҡ нәмә яҙырға тура килер бит инде, ә? Кем яҙырға тейеш уны? Беҙ бит!" - тип яҙа ул. Али Карнайға тыуған иленә әйләнеп ҡайтырға насип булмай. 1943 йылдың 16 июнендә ул яу ҡырында һәләк була. Яҙырға хыялланған роман-эпопеяны ла яҙылмай ҡала. Уның ебәргән көндәлектәренең бер өлөшө тыуған иленә килеп етмәй, килеп еткәндәре бөгөнгө көндәрҙә архивтарҙа һаҡлана".

### Мәҡәләләр тематикаһы

Гәзит биттәрендәге нәфрәт һәм үс менән һуғарылған мәҡәләләр башҡорт атлыларын дошманды аямайынса көрәшергә саҡыра. Уралдан йыраҡта булһа ла, яугирҙың үҙ өйөн, ауылын, туғандарын яҡлап һуғышыуын билдәләй. Сөнки һуғыш яланында шәхси яҙмыш юҡ. Ил яҙмышы - һинең шәхси яҙмышың, ғаилә яҙмышы.

"Беҙҙең менән халыҡ" мәҡәләһендә гәзит яугирға: "Алдыбыҙҙа һуғыш яланы ята. Дошман алыҫ түгел. Ул беҙҙең һөйөклө аталарыбыҙҙың һәм әсәләребеҙҙең, йәрәк өлөшөбөҙ булған ҡатындарыбыҙҙың һәм балаларыбыҙҙың хоҡуҡтарын тапарға, сал Уралды, алтын Башҡортостанды, бай илебеҙҙе баҫып алып, бәхетле тормошобоҙҙо емерергә теләй... Башҡорт воины! Һин Украина яландарында алыштағы ҡатының, балаң, атаң, әсәңде яҡлап һуғышаһың. Улар һинең гвардеец исемеңә тап төшөрмәүҙе талап итә", - тип өндәшә. Немецты үлтерергә, көрәштә арыҫлан булырға, рубежды ныҡ тоторға, дошманды үткәрмәҫкә, бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә саҡыра. "Уҡы, өйрән, коралыңды отличноға үҙләштер", тиғән кәңәштәр бирә һәм "Еңеү беҙҙең яҡта булыр!" тип һуғышсыны тынысландыра.

Агитацион йүнәлеш һәр мәҡәләлә тойомлана. Ошо мәҡәләнең аҙағында автор уҡыусыһына: "... Үҙеңдең Ватаның, халҡың өсөн көрәшеү - был ҙур дан. Ә Ватаның, халҡың өсөн һөйөклө полководец, Верховный Главнокомандующий, Маршал иптәш Сталин етәкселегендә көрәшеү - был икеләтә дан, был воин өсөн бәхет. Был бөйөк данға достоин булайыҡ, гвардеец иптәштәр!" - тип өндәшә. Нәфрәт һәм үс алыу тойғоһо менән һуғарылған мәҡәләләр гәзиттең һәр һанында осрай һәм төп өлөштө биләй.


Ленин-Сталин байрағы астында немец оккупанттарын тамам ҡыйратыуға, алға!

ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР

ҺУҢҒЫ СӘҒӘТТӘ

Беҙ фронтҡа китергә әҙербеҙ!

Совет Информбюроһынан

ИПТӘШ СТАЛИН БЕҘҘЕ ЕҢЕҮҘӘРГӘ АЛЫП БАРА

Агитация маҡсатында әҙәби әҫәрҙәр ҙә ҡулланыла. Улар башлыса был гәзиттең мөхәррире Али Карнайҙың бәләкәй әҫәрҙәре була. "Нисә фрицте үлтерҙең?" исемле хикәйәһендә Али Карнай икенсе эшелонда, йәғни фронт һыҙығынан арттараҡ хеҙмәт итеүсе һалдаттың Уралдан, ҡатынынан хат алыуын һүрәтләй. Ә унда шундай һүҙҙәр бар: "Нисә фрицте үлтерҙең? Шуны айырып яҙ. Балалар ҙа ҡыҙыҡһыналар, һинең батырлығыңды белеп, беҙ шатланырбыҙ, ғорурланырбыҙ..." Ошо хат һалдаттың тынысылығын юғалта. Ул военкомға барып, үҙен тиҙерәк алғы һыҙыҡҡа ебәреүҙәрен үтенә. Уның бында ла мөһим эш эшләүе, барыбер фронтта булыуы тураһында һөйләүҙәренә ҡарашы: "Шулай ҙа, әгәр бер нисә фрицте үҙ ҡулым менән дөмөктөрмәһәм, нисек итеп мин Ватан һуғышында ҡатнаштым, тип һөйләрмен?" - ти ул. Был бәләкәй генә әҫәрҙә яҡын кешеһенән килгән хаттың һалдатҡа ни тиклем ныҡ тәьҫир итеүе һүрәтләнә.

Ә.Кирәйҙең (Кирәй Мәргәндең) "Мыйыҡ" хикәйәһе ике дуҫ боец тураһында. Бикбулатов менән Ишбулатов дуҫ ҡына түгел, улар бер районддан, бер колхоздан, ә һуғышҡа килгәс, икеһе лә олоғайып китә. Бер юлы мыйыҡ ебәрәләр. Шулай бер саҡ блиндажда ултырғанда Ишбулатов иптәшенең мыйығына ҡарап тороп: "Шул мыйығыңдың бер бөртөгө өсөн күпме һорайһың?" - тип һорап ҡуя. Иптәше: "Ана шул ҡаршыла йөрөгән немецтарҙың береһен бер атыуҙа үлтерә алһаң, ошо затлы мыйыҡтың бер бөртөгөн йолҡоп алыу шәрәфенә ирешә алырһың", - тип яуап бирә. Шулай итеп, улар араһында ярыш башланып китә. Бер нисә көндән уларҙың мыйыҡтары шул хәтле һирәгәйә, йәмһеҙ булып тормаһын, тип, икеһе лә уны ҡырып ташлай...

Кавалерия дивизияһы булғас, гәзит биттәренән ат темаһы ла ситтә ҡалмай. Атты тәрбиәләүгә, ашатыуға, яуға әҙерләүгә арналған мәҡәләләргә ҙур урын бирелә. Аттарын насар ҡарағандар тәнҡитләнә. Айырым һандарҙа был темаға бәрәр бер бит урын бүленеүе мәғлүмәттең ни тиклем мөһим булыуы тураһында һөйләй. Хатта "Һин аҡһаҡ булһаң да һуғышҡа бар, һинең атыңдың дүрт аяғы бар бит", тигән башҡорт халыҡ мәҡәле килтерелә 1943 йылдың 4 июль һанында. "Ат - боевой ҡорал" мәҡәләһендә гвардия кесе лейтенанты Сергеев взводының ат ҡарау буйынса беренсе урын алып килеүе тураһында һөйләнелә. Был взводта атҡа һәр кем боевой ҡорал итеп ҡарай. Ат ҡараусы Ҡолғәрәевтың "Яҡшы аттан башҡа яҡшы кавалерия юҡ", тигән һүҙҙәре взводтың көрәш девизы булып тора.

Агитация эшенә айырым урын бирелә. Ошо темаға арналған махсус һандар ҙа сыға. Уларҙа агитация нисек алып барылырға тейешлеге хаҡында һүҙ бара. "Агитация яугирҙың психологияһына һәм шартҡа ҡарап, аныҡ, йөкмәткеле, идея яғынан тотанаҡлы булырға тейеш. Агитаторҙар был бурыстарын һәйбәт үтәһен өсөн уларға ярҙам кәрәк. Семинарҙарҙа, политработниктың агитатор менән осрашыуы мәлендә уға бөтә мәсьәләләрҙе аңлатырға, теге йәки был хәлдә дөрөҫ баһаларға өйрәтергә кәрәк... Беҙ агитаторҙың үҙ бурыстарына яуап бирә алыуына, үҙенең ялҡынлы большевистик һүҙе менән боецтарҙы иптәш Сталиндың бойороғон үтәүгә, немец-фашист бандиттарын йәһәтерәк юҡ итеүгә мобилизациялауына өлгәшергә тейешбеҙ", - тиелә гәзит мәҡәләһендә.

Гәзит бойороҡтарҙың үтәлеүенә ҙур әһәмиәт бирә. 1943 йылдың май айында Сталиндың 195-се бойороғо сыҡҡандан һуң гәзит биттәрендә уның үтәлеше төп урынды ала. Һәр частан бойороҡтоң үтәлеше тураһында хәбәрҙәр килә. Бойороҡто теүәл үтәүселәр өлгө итеп ҡуйыла, уға битараф ҡарағандар ҡаты тәнҡитләнә. Гәзиттең 150-се һанындағы баш мәҡәләлә "Хәҙерге ваҡытта бойороҡто унда ҡуйылған мәсьәләләр буйынса айырым рәүештә ентекләп өйрәнеү бара. Бойороҡто ныҡлап өйрәнергә, яҡшы хәтерҙә ҡалдырырға кәрәк. Ләкин, иң мөһиме, уны ғәмәли яҡтан тормошҡа ашыра башлау", - тип яҙыла. Мәҡәлә аҙағында һалдат алдында торған бурыс аңлатыла: ул, уҡырға, өйрәнергә, бойороҡто тормошҡа ашырырға, тип яңғырай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакцияһы коллективы һуғыш ваҡытында Башҡорт атлылары кеүек уҡ данлыҡлы юл үтә. Дивизияның фронтҡа ебәрелгән көнөнән алып, дивизияның 1943 йылда эшләйәсәк бөйөк рейдына тиклем, гәзит дивизияны тоғро юлдаш булып оҙата бара. Дивизия рейдҡа ингәс, редакция бүленеп ҡала. Ошо осор эсендә Полевая почта 35710 адресы буйынса урынлашҡан редакция дивизияның данлыҡлы юлында төп агитатор, рухи ҡорал булып ҡала. Али Карнай, Шакир Насиров, Әхтәм Ихсан кеүек әҙиптәр, Хөршиҙә Хәирова кеүек йыйыусы ҡыҙҙар гәзиттең һәр һанын ваҡытында сығарыуҙы тәьмин итә. Уларҙың тырышлығы менән күпселеге башҡорттарҙан торған милли дивизия тыуған телендә гәзит уҡыу бәхетенә өлгәшә.**

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ**
**әҙерләне.**

ХӘТЕРКИТАП

**"Өҙөлгән үгеҙ ҡойроғо төҙәләме, Оло инәйем?" "Төҙәлә. Бөтәһе лә төҙәлә. Тик өҙөлгән өмөт менән ҡалған хәтер генә төҙәлмәй..." - бала сағын һуғыш урлаған быуын вәкиле Флүрә Сәғитова менән әңгәмәләшә башлағас та, Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрендәге ошо хикмәтле һүҙҙәр иҫкә төштө. Флүрә Нурфәиз ҡыҙы - Бөйөк Ватан һуғышына атаһын оҙатып ҡалып, көтөп ала алмаған миллионлаған балаларҙың береһе. Ул 1935 йылдың 6 декабрендә Мәләүез районы Бәләкәй Моҡас ауылында донъяға килгән. Үҙе әйтмешләй, ошо ауылда тыуған, ошонда үҫкән, намыҫлы хеҙмәт иткән һәм ошо йәшкә еткән. Өлкән булыуына ҡарамаҫтан, хәрәкәтсән, зирәк аҡыллы, зиһенле, яҡшы хәтерле инәй менән һөйләшеү үҙе бер тарих дәресе булды.**

# АТАЙЫМДЫ ҺАҒЫНАМ...



### Иҫтәлектәр - изге аманат

- Бәләкәй булһам да, атайыма бәйле бала саҡ иҫтәлектәрем яңы ғына булған кеүек, - тип башланы ул үҙенең күңел түренән урын алған хәтирәләрен. - Дүрт йәш кенә булһа ла, уның мәжбүри хәрби хеҙмәттән ҡайтҡанын да хәтерләйем. Ул Украина тарафтарында, Житомир ҡалаһында хеҙмәт иткән. Һалдат хеҙмәтен тултырып, тыуған яҡтарына ҡайтам ғына тигәндә фин һуғышына ингәндәр. 1940 йылдың көҙөндә генә ауылға ҡайтты. Был көн әлегеләй күҙ алдында: командир һынлы атайым барыһы менән дә иҫәнләшеп сыҡты ла, иҙәнгә ҡуйған сумаҙанын асып, өләсәйемә (үҙенең әсәһенә) ваҡ ҡына ҡыҙыл сәскәле күлдәклек, минә мәрйен, ботинка һәм көрән төҫтәге ойоктар алып бирҙе. Ҡәҙерле кешемдең бүләктәрен кейеп, әхирәтем Рәйсәгә күрһәтергә йүгергәнем әле генә булған һымаҡ.

Армияға тиклем тракторсыға, хеҙмәт осоронда водителгә уҡыған булған. Әммә эш һайлап торманы ул, ҡайҙа ҡушһалар, шунда тырышып эшләне. Ул ваҡытта ҙур ғаилә булып өләсәйемдәрҙә йәшәнек. 1941 йылда яҙғы сәсеүҙән мазут, май еҫе аңҡытып арыһа ла ҡәнәғәт йылмайып ҡайтҡаны, мине күтәреп күккә сөйгәне ныҡ иҫтә ҡалған. Тик атайлы булып оҙаҡ йәшәргә насип булманы. Бөйөк Ватан һуғышына повестка ауылда беренселәрҙән булып уға килде. Ул ваҡытта алты йәшем тулмағайны әле. Уны бөтә ауыл халҡы оҙатты. Өйҙән сыйыр алдынан хәрбиҙәрсә ыҫпай, мыҡты көүҙәле атайым мине күтәреп алды. Юлға сығыр алдынан өләсәйем йола буйынса уға сөсө икмәк бирҙе, атайым унан бер ҡабым тешләне лә, ҡалғанын ҡайтҡас ашармын, көтөп ятһын, тип, сарҙаҡҡа һалды...

Атай тигән кешенең ҡәҙере шул тиклем ҙур һәм көслө ине минең өсөн. Әле булһа көтөү һағышы күңелемде тетрәндерә. Уны күреүгә, осрашыуға өмөт менән йәшәлде.

### Әсәй - алтын ҡанат

Фронтта сапер булып, һәр ваҡыт алғы һыҙыҡта хеҙмәт итә атайым. Ауылдашыбыҙ Иван Горячкин менән бергә һуғыша. 1942 йылдың ғинуарында һәләк булған атайымды тап уға ерләргә тура килә. "Был йома көн ине..." - тип һөйләйәсәк ул ҡайтҡас. Ҡара ҡағыҙ ҙа повестка кеүек беренселәрҙән булып беҙҙең ғаиләгә килде. 1942 йылдың 12 ғинуарында уның ғүмерен дошман бомбаһы ҡыйыуы хаҡында хәбәр ителгәйне унда. Бөтә ауыл йыйылып илағаны хәтерҙә. Атайым һәләк булғас, өләсәй беҙҙе айырып сығарҙы. "Килен, һин егәрлеһең, юғалып ҡалмаҫһың, иргә барһаң - ир булыр, бала тапһаң - ул булыр. Башҡа сыҡ, һыйырҙы һинә бирәбеҙ, өй беҙгә ҡала", - тине. Беҙ һыйыр етәкләп, Моҡас урамы буйлап күп йөрөнөк. Сығышы менән әсәйем Ҡотош ауылынан. Ике йәштә генә етем ҡалған, революция ваҡытында атаһын аҡтар атҡан. Баш төбөп кенә барыр кешебеҙ юҡ. Шуға күрә кем өйҙәш итеп индерә, шунда йоҡлап, фермала ла, мал өйөндә лә йәшәргә тура килде. Ысынлап та, бик уңған ине әсәйем. Бер ниндәй ауырлыҡ алдында ла юғалып ҡалманы. Көндөҙөн колхоз эшендә булһа, төнөн бәйләм бәйләп, үҙебеҙгә ғаилә кәрәк-ярағы йүнәтте.

### Өйлө булыу - көйлө булыу

Һыйыр етәкләп, гел кешелә йөрөп арытылды. Әйткәндәй, тап ошо һәүкәшебеҙ арҡаһында ла беҙҙе үҙҙәренә йәшәргә индергәндәр ауылдаштарыбыҙ. Яҡты киләсәккә ышанып йәшәлһә лә, бик ауыр осор ине һуғыштан һуңғы йылдар: аслыҡ, яланғаслыҡ, тиф ауырыуы. Ҡырҡынсы йылдар башында дизентерия бик күп кешене алып китте. 1941 йылда ошо сир Моҡаста 12 баланың ғүмерен ҡыйҙы. Шулай итеп, йорт һатып алырға булдыҡ. Бәләкәй генә ситән өйгә 1 мең һум һоранылар. Уны "өй" тип әйтеп тә булмай ине. Мейесенән төбө генә ҡалған, иҙәне - ер. Быға тиклем йәшәгән йорттан алып килгән ларҙы боҙоп, әсәйем урындыҡ эшләне, еткәненсә иҙән түшәне, мейесен сығарып, стенаһын тал менән үрҙе, балсыҡ менән һылап ҡуйҙы. Ҡыйыҡлы булыу кеше тупһаһында йөрөү түгел инде. Үҙебеҙҙең өйөбөҙ-көйөбөҙ барлыҡҡа килде.

### Кеше эше менән матур

Быға тиклем ауылдан ситтә фермала йәшәү, көҙгө һынауға ҡалыу һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында урыҡ-һурыҡ ҡына уҡырға тура килгәйне. Белем алыу теләге шул тиклем ҙур булһа ла, дүрт кластан ары китә алманым. 1950 йылда беренсе сирек тамамланғайны ғына, тиф менән ауырыным, өс ай тора алманым. Шәбәйеп, аяҡҡа баҫҡас, 1951 йылдың апрель айында Мәжит Ғафури исемендәге дөйөм хужалыҡҡа эшкә сыҡтым да киттем. Был ваҡытта минә 16 йәш тулмағайны әле.

Оҙайлы йылдарға һуҙылған хеҙмәт юлым шулай башланып китте. Кем генә булып эшләргә тура килмәне. Хаҡлы ялға һауынсы булып сыҡтым. Һәр эшкә яуаплы, кеше менән ипле булғанғамы, йәмәғәт эштәренә лә йәлеп итәләр ине. Бер ҡасан да әрләшеп, низағлашып йөрөгәнемде хәтерләмәйем. Әйткәнен урынында әйттем, әйтмәгәнен үҙемдә ҡалдырҙым. Ауыл, район советтарына депутат итеп тә һайланылар. "Почет билдәһе" орденым, "Хеҙмәт ветераны" тигән маҡтаулы исемем бар. Беҙҙең быуындың барыһы ла тиерлек ҡайғыһын да, һағышын да эш менән баҫты бит. Эшләгән кешене кем яратмаһын?...

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Туҡһанды артмаҡлаған ошо Флүрә инәйҙе мин дә яраттым да ҡуйҙым. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, намаҙын, ураҙаһын ҡалдырмағанына һоҡландым. Үҙенең 87 йәшкә тиклемге ғүмере эсендә булған ваҡиғаларҙы датаһы, бергә эшләгән, уҡыған, яҡты хыялдар ҡорған кешеләренең барыһының да исем-шәрифе менән һөйләүе, ер-һыу атамаларын яҡшы белеүе менән иғтибарымды яулап алды ул. Эшендә генә уңыш яуламаған ул, ғаилә бәхетен дә кисерҙе. Бәләкәй генә саҡтан иңенә төшкән ауыр һынауҙарҙы лайыҡлы үткәне өсөн Аллаһы Тәғәлә уға оҙон ғүмеренә ҡушып, ырыҫ, ҡот һәм бәрәкәт бирә. Колхозда электрик булып эшләгән гармунсы егет Сөнғәтулла Сәғитов менән татыу ғаилә ҡоралар. Биш балаға ғүмер бүләк итәләр. Әлеге ваҡытта инәй ҡыҙҙарының, ейән-ейәнсәрҙәренең ҡәҙер-хөрмәтендә йәшәй. "Үкенестәрем юҡ, шуға ла үҙемде бәхетле тип һанайым", - ти Флүрә инәй.**

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Тимерҙе ҡыҙыуында сүке

Әгәр һеҙгә бик ныҡ аҡса кәрәк икән, хыял көсөнә мөрәжәғәт итергә ҡулай ваҡыт. Уның өсөн түбәндәге күнекмәләрҙең береһен эшләгеҙ. Сөнки икеһен дә бер юлы эшләһәгеҙ, уларҙың һәр ҡайһыһы ярҙам итеренә бик ышанмаҫһығыҙ. Ышанмайынса был күнекмәгә тотоноу ҡәтғи тыйыла!

Присцилла "Яныусы шар" күнекмәһен яһап, 75 мең доллар эшләй. Эштондың, көтмәгәндә, фондтары тулылана, кемдер оҙаҡ көткән гонорарын ала.

"Дөйөм банк" күнекмәһе бөтөн донъяға таралмаған. Ул АҠШ-тың көнбайыш өлөшөндә генә иң ҙур популярлыҡ яулаған, күрәһең.

Бер генә күнекмәне һайлағыҙ ҙа, бары тик уға күрһәтмәләрҙе генә уҡығыҙ. Юҡһа, һеҙҙең һайлауығыҙ ихтыяждың үҙенә түгел, ә инструкцияларға нигеҙләнәсәк. Эшләй башлар алдынан күнекмәне нисек эҙмә-эҙлекле эшләргә икәнлеген хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

### "Яныусы шар"

- Ҡулығыҙға ҙур сумма аҡса алығыҙ. Купюра ни тиклем ҙурыраҡ, күнекмәнең һөҙөмтәһе шул тиклем яҡшыраҡ.
- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ, аҡсалы ҡулығыҙҙы тубығығыҙға һалығыҙ.
- Баш осоғоҙҙа дүрт метр бейеклектә баскетбол тубы ҙурлығында янып тороусы шар эленеп тора, тип күҙ алдына килтерегеҙ.
- Янып тороусы шарҙы уйығыҙҙа ғына баш аша түбәнгә төшөрөгөҙ. Уның тәнегеҙҙән кендек тапҡырына төшөүен тойоғоҙ.
- Шарҙан яҡтылыҡ нуры сығып, күкрәк ситлеге аша үтеп, тубығығыҙҙа ятҡан аҡсаларға төшөүен күҙаллағыҙ.
- Аҡсаларығыҙҙың ошо яҡтылыҡтан заряд алғанын күҙәтегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына яҡтылыҡ нурын һүндерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына аҡсаларығыҙҙы үҙегеҙҙән киңлеккә ебәрегеҙ.
- Төрлө яҡтан һеҙгә шундай уҡ миллионлаған купюра ҡайтыуын күҙаллағыҙ. Уларҙың ағымы буранға оҡшаған.
- Янып тороусы шарҙы үҙенең урынына ҡуйығыҙ, уның йайлап ҡына юғалғанын күҙаллағыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ. Тәүлек эсендә тубығығыҙҙа ятҡан аҡсаларҙан ҡотолоғоҙ: йә берәй нәмә алығыҙ, йә ваҡлатығыҙ.

### "Дөйөм банк"

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм ҙур ҡаланы күҙ алдына килтерегеҙ. Алдығыҙҙа колонналы етди, "Дөйөм банк" тигән яҙыуы булған бина пәйҙә булһын.
- Таш баҫҡыстар буйлап төп ишектән банкка инегеҙ. Таҙа бланкылар ятҡан өҫтәлгә килегеҙ.
- Үҙегеҙгә үҙегеҙ ихтыяжығыҙға тура килгән сумманы күрһәтеп, чек яҙығыҙ. Ҡомһоҙланмағыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына кассирға килегеҙ һәм уға чегығыҙҙы һоноғоҙ. Уның йылмайып, барыһы ла дөрөҫ, тәртиптә, тип раҫлауын күҙәтегеҙ.
- Банктан төп ишектән сығығыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм тиҙҙән аҡса проблемаһы хәл ителерен аңлап, ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Бөтөн күрһәтмәләрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырһағыҙ, күнекмәне ҡабатлағыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Фитотерапия күҙлегенән ҡарағанда, ҡайын һыуы организмда матдәләр алмашыныуын яйға һалырға булышлыҡ итеүсе иң шәп әмәл. Ябай һыуҙан артыҡ айырмаһы юҡ кеүек булһа ла, ул ашҡаҙанға ла ыңғай йоғонто яһай.*



*ШИФАХАНА*



# ҠАЙЫН ҺЫУЫ

**Яҙ миҙгелендә кешеләр йыш ҡына витамин етешмәүҙән яфалана. Оҙайлы ҡыш айҙарынан һуң сәләмәтлеген нығытып, организмдары талап иткән файҙалы витаминдарҙы туплап алырға теләгән һәр кемгә тәбиғәт үҙ ярҙамын тәҡдим итә. Был юлы һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ, тәбиғәт аптекаһының шифалы сығанаҡтарының береһе - ҡайын һыуы тураһында ентекләберәк һөйләмәксебеҙ.**

Ҡайын һыуын көндәр йылынып, ҡар ирей башлағандан алып ағастар бөрөләнгәнгә тиклем йыйырға була. Һут иң шәп аҡҡан ваҡыт иртәнге ундан киске алтыға тиклем. Ғәҙәттә бер ҡайындан 2-3 литр һут алырға мөмкин. Ҡайын һыуы бик шифалы булыуын белеп, күберәк йыйырға теләгән осраҡта ла үтә һаҡһыҙ рәүештә бер ағасҡа күп тишектәр тишергә ярамай. Әгәр ҙә олононоң диаметры 20-25 см булһа - бер, 25-35 см - ике, 35-40 см - өс, 40 сантиметрҙан күберәк булған осраҡта дүрт тишек тишергә мөмкин.

Ҡайын һыуының составында эфирлы майҙар, витаминдар, сапонин матдәләре, бетулол, ундан артыҡ төрлө органик кислоталар бар. Уны 2-3 аҙна дауамында даими рәүештә көнөнә өс тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсеү организмдың яҙ осоронда миктәүе, авитаминоз, онотоусанлыҡ, хәлһеҙлек һәм күңел төшөнкөлөгөнән арыныуға ярҙам итә. Фитотерапия күҙлегенән ҡарағанда, ҡайын һыуы организмда матдәләр алмашыныуын яйға һалырға булышлыҡ итеүсе иң шәп әмәл. Ябай һыуҙан артыҡ айырмаһы юҡ кеүек булһа ла, ул ашҡаҙанға ла ыңғай йоғонто яһай. Төрлө микроэлементтарға бай ҡайын һыуын шулай уҡ тире, ҡан ауырыуҙары, быуындар һыҙлауы, тамаҡ шешеүе, бронхит, үпкә шешеүе һәм башҡа төр тын юлы ауырыуҙарын дауалауҙан тәҡдим итәләр. Бөйөр һәм бәүел ҡыуығында барлыҡҡа килгән ташты, ҡанды таҙарта, йоғошло ауырыуҙар менән яфаланған осраҡта организмдан зыянлы матдәләрҙе йыуып сығара. Ашҡаҙан язваһы, бауыр, бөйән, үт ҡыуығы ауырыуҙарын, түбән кислоталылыҡ, радикулит, ревматизм, быуын шеше, туберкулез, зәңгә, баш ауыртыуын, венерик ауырыуҙарҙы дауалау өсөн эсергә мөмкин. Экзема, һыҫҡы сыҡҡанда тирене таҙартыу һәм дымландырыу йәһәтенән дә ярҙам итә. Тағы ла сәстәрҙәге ҡауаҡты бөтөрөү, уларға тәбиғи йомшаҡлыҡ индереү өсөн ҡайын һыуы менән йыуырға кәңәш ителә. Ҡаты тымау тейгәндә яңы ғына йыйылған ҡайын һыуын һәр көн иртәнсәк бер стакан, йүтәлләгәндә йә һыуыҡ тейҙергәндә һөт ҡушып йылытып, аҙ ғына он йәки крахмал бутап эсергә кәрәк. Шулай ҙа, ҡайын алҡаһы һеркәләренән аллергия булған кешеләргә, күкрәк һөтө имеүсе балаларға ҡайын һыуы эсеү зыянлы.

Әгәр ҙә һеҙ һыуҙы йыйып алғандан һуң бер аҙ һаҡлап эсергә теләһәгеҙ, быяла һауытҡа тултырып, һыуытҡысҡа ҡуйырға кәрәк. Әммә 2-3 көндән артыҡ һаҡламау хәйерле, юғиһә, әсеген һыуҙың файҙаһынан зыяны күберәк булыр. Тағы ла ҡайын һутын быяла банкыларға ябырға мөмкин. Быныӊ өсөн уны эмалле һауытта 80 градусҡа тиклем ҡайнатып, быяла банкыларға ҡойоп, тимер ҡапҡас менән ныҡлап ябырға. Шунан 15-20 минут тирәһе 85 градуслыҡ эҫе һыуҙа тотоп алырға һәм бүлмә температураһында һыуытырға. Һауыттарға ошо рәүештә ябылған ҡайын һыуы бер нисә ай шифаһын юғалтмай.

Ҡайын һыуынан кеүәҫ тә эшләп эсергә була. Иң ябай ысулы шундай: яңы йыйылған ҡайын һыуын 1,5 литрлыҡ пластик шешәгә ҡойоп, эсенә 5-10 бөртөк йөҙөм төшөрөп, ҡапҡасын ҡаты итеп бороп ябабыҙ һәм йәйгә тиклем мөғәрәпкә төшөрәбеҙ. Кеүәҫ тиҙ арала әҙер булһын, тиһәгеҙ, ҡайын һыуын 35 градусҡа тиклем йылытып, 1 литрға 15-20 грамм сүпрә һәм 3 йөҙөм бөртөгө иҫәпләп һалырға кәрәк. Лимон ҡабығын өҫтәп ебәрергә лә мөмкин. Тәмле кеүәҫ 5-7 көн эсендә әҙер буласаҡ.

Сәләмәтлекте, иммунитетты нығытыу өсөн 300 грамм ҡыҙыл көртмәләнең һутын һығып сығарып, бер аҙ бал ҡушып һалып, 2 литр ҡайын һыуы менән бутап эсергә тәҡдим ителә. Ҡыҙыл көртмәле урынына үҙегеҙгә оҡшаған бүтән төр еләк-емештәр һутын һалырға мөмкин.

Ҡайын һыуы нигеҙендә эшләнгән маска биткә бик файҙалы икән. 1 ҡалаҡ ҡаймаҡты 2 ҡалаҡ ҡайын һыуы һәм 1 балғалаҡ бал менән ҡушып бутарға. Масканы биткә һөртөп, 15 минут тирәһе тоторға һәм һалҡынса һыу менән йыуып төшөрөргә кәрәк. Биткә һыҫҡы, экзема сыҡҡан осраҡта ҡайын һыуына мамыҡты сылатып битте һөртөү килешә.



# ИКМӘК

**Хәҙерге диетологтарҙың барыһы ла икмәк кешене һимертә, уны рациондан алып ташларға кәрәк, тигән ҡараштa. Әммә Сидней ҡалаһы белгестәре был фекергә ҡаршы сыға, улар ун йыл дауамында үҙ теләктәре менән тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең тукланыуын күҙәтә. Һөҙөмтәлә, даими рәүештә икмәк ашаусылар диабет йәки эсәктәге яман шеш ауырыуына бик һирәк дусар булыуын асыҡлай.**

Ғалимдар фекеренсә, бөтә ғилләә иген культураларының составындағы күҙәнәклектә (клетчатка). Был матдә ашҡаҙанда эшкәртелмәй һәм эсәккә тиклем төшөп етә, уның торошон яҡшырта һәм артыҡ бөтә ҡалдыҡтарҙы тышҡа сығара. Эсәктең торошо яҡшы икән, бер ниндәй шеш тә барлыҡҡа килмәй. Бынан тыш, күҙәнәклек оҙаҡ эшкәртелә һәм кеше үҙен туҡ тоя.

Һаулыҡ өсөн бигерәк тә ярҙыртылмаған бойҙай файҙалы. Уларҙа күҙәнәклектән тыш, организм өсөн кәрәкле, алыштырғыһыҙ аминокислоталар, "В" төркөмө витаминдары, төрлө минералдар, ҡатмарлы углеводтар бар. Шуға ла борондан икмәк кеше өсөн иң мөһим аҙыҡ һаналған. Элек уны ярҙыртылмаған бойҙай ононан бешергәндәр, араһында көрпәһе лә күп киткән. Ә хәҙер икмәк бешергәндә таҙартылған он алына, һуңынан ул организмдан тулыһынса сығып бөтмәй. Был икмәк эстә лайлалы йомарлам булып йәбешеп ҡала, унда төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килтерә торған микробтар үрсей башлауы бар. Бындай ондоң составында витаминдар ҙа, минералдар ҙа юҡ. Сөнки улар барыһы ла ашлыҡты һуғып алған саҡта уның ҡабығында ҡала. Бынан тыш, ашлыҡты һуғып, ярҙыртылған бойҙайҙан он тартҡанда бөтә органик тоҙҙар юҡҡа сыға. Аҙаҡ ул ондо байыҡтырыу тәбиғи витаминдарҙы кире ҡайтармай. Икмәк элекке кеүек һурҙырып тартылған йәки эре тартылған арыш, бойҙай оно һәм тәбиғи әсеткенән бешерелергә тейеш, ти белгестәр. Шул саҡта ғына уның бөтә файҙалы үҙенсәлектәре һаҡланасаҡ. Таҙартылған он һәм йәһәлма сүпрәнән бешерелгән ҡамыр аштарынан баш тартырға кәрәк. Сөнки аҡ икмәк бешергәндә бойҙайҙың йомшаҡ сорттары ҡулланыла, уларҙа глютен матдәһе күп. Глютен үҙе лә төрлө матдәләргә тарҡала, улар үҙ сиратында асығыу тойғоһон көсәйтергә һәләтле. Шунлыҡтан, ярты батон икмәк ашаһаң да ҡайһы саҡта асығыу тойғоһо үтмәй, тағы ла ашағы килеп тик тора. Бына шулай, таҙартылған бойҙай ононан бешерелгән икмәктең зыяны 450-500 килокалорияға тиклем барып етеүе бар. Диетологтар шыттырылған бойҙайҙан бешерелгән әсетелмәгән икмәкте иң файҙалы, тип иҫәпләй. Унда углеводтар, минералдар, витаминдар - барыһы ла бар. Был икмәк үҙәкте көйҙөрмәй, ашҡаҙанға ла ауыр булмай. Ярҙырылмаған бойҙайҙан бешерелгән икмәктә күҙәнәклек күп, ул эсәктең эшен яйға һала. Бындай икмәкте бешергәндә ҡайһы берҙә тәм өҫтәү ниәтендә көнбағыш йә кунжут орлоҡтары ҡушалар. Улар икмәктең калорияһын арттырыусы күҙ уңында тоторға кәрәк. Составында иң күп микроэлементтар булған икмәк - арыш икмәге. Унда баҡыр, марганец, цинк, тимер матдәләре бар. Бынан тыш, арыш икмәгендә лизин күп. Ул матдәләр алмашыныуы өсөн кәрәкле аминокислота, калорияһы ла түбән. Шулай уҡ, ярҙырылмаған бойҙайҙан махсус диета өсөн эшләнгән икмәктәр ҙә файҙалы (хлебцы). Улар ашты ашҡаҙанда тотоп ҡала һәм шунлыҡтан кеше оҙаҡ ҡына асыҡмай йөрөй. Диабет, һимереү менән яфаланғанда, атеросклероз менән ауырығанда уларҙы күберәк ашарға мөмкин.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

**Директорыбыҙҙы - йөҙөнән әсәйҙәрсә наҙ, күңеленән яҡты нур һәм һүнмәҫ өмөт урғылған абруйлы педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф эшмәкәре Фәнисә Малик ҡыҙы Бәҙретдинованы 60 йәшлек юбилейы менән ҡотлайбыҙ.**

Бына ун һигеҙенсе йыл рәттән ул ошо вазифаны яуаплы башҡара. Фәнисә Малик ҡыҙы эшләгән дәүерҙә балалар йорто бик матур үҙгәрештәр кисерҙе. Ул етәксе булараҡ та тапалған юлды һайламай, һәр һуҡмаҡты үҙе яра. Балалар йортонда йәшәүсе етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм һәр сабыйға үҙенең әсәлек хистәрен ихлас бүлә. Бөгөнгә көндә Фәнисә Малик ҡыҙы өлгәшелгән уңыштарын, бай хеҙмәт һәм тормош тәжрибәһен йәштәргә ихлас өйрәтә. Ғүмер байрамы менән ҡотлап, Фәнисә Малик ҡыҙына ҡаҡшамаҫ һаулыҡ, рух ныҡлығы, күңел көрлөгө, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр шатлығы теләйбеҙ.

***Ихтирам һәм ҡотлауҙар менән Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәге коллективы.***

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 май "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+

**11 май "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

**14 май "Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (Р. Н. Гюнтекин), музыкаль драма. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**

**10 май "Муха-Цокотуха"** (К. Чуковский). 12.00, 14.00 0+

**14 май "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+

**15 май "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 май "Музыку слушаем вместе. Сказки органного зала".** 11.00 0+

**15 май "Weekend с органным залом"** Өфө сәнғәт училищеһының 100 йыллығына ғаилә өсөн концерт. 15.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**12 май "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+

**14 май "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1443 һижри йыл.***

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (8) дүшәмбе | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 18:33 | 21:02 | 22:32 |
| 10 (9) шишәмбе | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 18:34 | 21:04 | 22:34 |
| 11 (10) шаршамбы | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 18:35 | 21:06 | 22:36 |
| 12 (11) кесе йома | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 18:36 | 21:08 | 22:38 |
| 13 (12) йома | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 18:37 | 21:10 | 22:40 |
| 14 (13) шәмбе | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 18:38 | 21:11 | 22:41 |
| 15 (14) йәкшәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 18:39 | 21:13 | 22:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Ҡарағат аҙҡанлылыҡты дауалауҙа иң файҙалы сараларҙың береһе, ул ҡан яңалышын һәм әйләнешен яҡшырта. Түбән әселекле гастритты дауалай. Депрессияны дауалауҙа үтә файҙалы.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 9 МАЙ - ЕҢЕҮ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**17-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡумта. Ашнаҡсы. Ҡауҙы. Йәймә. Ҡолаҡ. Балыҡсы. Бейеүсе. Шәрәк. Йыйын. Серге. Көс. Тәгәс. Ынйы. Литр. Рәсем. Ыҙа. Етем. Көтөүсе. Айран. Һунарсы. Һауынсы.

**Вертикаль буйынса:** Баҡсасы. Йәйгор. Фа. Үткерлек. Алым. Өй. Әбей. Ҡунаҡ. Көргә. Үс. Ары. Уҡытыусы. Тезис. Ахыры. Ыуы. Ҡыш. Тырма. Әшнә. Еңгә. Ҡаҡ. Саман.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ШТРАФТАР

**Рәсәй Хөкүмәте 2022 йылда торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә штраф һәм пеня иҫәпләү өсөн 9,5 процент ставка билдәләй.**

Рәсәй Хөкүмәте ҡабул иткән ҡарарға ярашлы, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәрен ваҡытында түләмәгән өсөн ҡаралған пенялар һәм штрафтар Рәсәй банкының төп ставкаһы буйынса түгел (әле 20 процент), ә 2022 йылдың 27 февраленә ғәмәлдә булған ставканан сығып иҫәпләнә - 9,5 процент. Был хаҡта үҙенең телеграм-каналында Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин хәбәр итте. Бындай иҫәпләү тәртибе 2022 йылдың аҙағына тиклем ғәмәлдә була.

## ЯҢЫСА ТҮЛӘҮ

**Башҡортостанда һәм тотош Рәсәйҙә электроника магазиндары техниканы бүлеп түләү мөмкинлеге менән һатып алыуҙы ваҡытлыса туҡтатты.**

Сәбәбе - Үҙәк банктың төп ставканы күтәреүе һәм донъяла килеп тыуған хәлгә бәйле валюталар курсының үҙгәреп тороуы. "М.Видео", DNS һәм "Эльдорадо" ошо мәғлүмәтте раҫланы. Магазин вәкилдәре әйтеүенсә, хәҙер тауарҙы 100 процент түләп кенә һатып алырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта электроника һәм көнкүреш техникаһы селтәрҙәрендә клиенттар өсөн кредит хеҙмәте һаҡлана.

## ОТПУСКЫЛАР

**Рәсәйҙә 2022 йылдан түләүле отпуск көндәре үҙгәрҙе. Эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәргә 28 көн түгел, ә 30 көн отпуск бирергә тейеш.**

Рәсәйҙең социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы комиссияһы шундай тәҡдимдәр индерҙе. Коронавирустан прививка яһатыу өсөн хеҙмәткәрҙәргә түләүле ике көнлөк ял бирергә кәрәк, тип иҫәпләй комиссия. Был көндәрҙе отпускыға ҡушырға, шулай уҡ улар өсөн аҡса түләргә мөмкин. Ковидҡа ҡаршы вакцинацияға бәйле өҫтәмә ял көндәре коллектив килешеүҙәрҙә йәки локаль акттарҙа яҙып ҡуйылырға тейеш.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# ҠАРА ҠАРАҒАТ

**Ҡарағат - А, В1, В2, В6, Р, РР, Д, Е, К, С витаминдарына, калий, кальций, натрий, магний, баҡыр, тимер, фосфор, бор, кобальт, молибден, цинк, фтор кеүек макро-микроэлементтарға бик бай.**

Ҡоро исемлек рәүешендәге был мәғлүмәт ҡарағаттың төрлө ауырыуҙарҙан дауа булыуын дәлилләй. Мәҫәлән, С, К, Р витаминдарының күп булыуы уны атеросклероздарҙы, айырыуса аорта атеросклерозын, иҫкәртеү һәм дауалауҙа алыштырғыһыҙ итә. Был исемлектән беҙ ҡарағат Аддисон ауырыуы арҡаһында бөйөр өҫтө биҙҙәренең эшмәкәрлеге боҙолғанда уның ҡабыҡ матдәһенә стимул бирә алыуын аңлайбыҙ, ә бит бындай осраҡта хатта иң көслө гормональ саралар ҙа ярҙам итеп бармай. Ҡарағат япраҡтары төнәтмәһен дөрөҫ миҡдарҙа ҡулланғанда, артыҡ бәүел һәм ҡуҙғалаҡ кислоталарын сығарырға ярҙам итә, ә был үҙ сиратында подагра һәм ревматизмды һәҙмтәлә дауалай. Яңы емештәре һәм япраҡтарынан төнәтмә баҫымды түбәнәйтә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына тонус өҫтәй, бөйөр һәм бәүел ҡыуығы ауырыуҙарын дауалай. Ҡарағат аҙҡанлылыҡты дауалауҙа иң файҙалы сараларҙың береһе, ул ҡан яңалышын һәм әйләнешен яҡшырта. Түбән әселекле гастритты дауалай. Был витаминдар һәм микроэлементтарҙың барыһы ла депрессияны дауалауҙа үтә файҙалы. Япраҡтарынан эшләнгән сәйҙе тире ауырыуҙары, диатез, лимфа биҙҙәре туберкулезы булғанда эсәләр. Халыҡ дауаһында ҡарағаттың япрағы һәм емештәре генә түгел, бөрөләре лә ҡулланыла: улар бактериялар һәм үңәҙ бәшмәктәрҙе үрсеүен тотҡарлай.

Дауалағанда ҡыр ҡарағатын ҡулланыуға өҫтөнлөк бирәм, шуға урманда үҫкәнен йыям.

**Йөрәк ритмы боҙолғанда.** Көнөнә 3 тапҡыр стакандың өҫтән бер өлөшө ҡарағат емеше һутын эсергә. Бер нисә аҙнанан ритм тейешле хәлгә ҡайта.

**Тауыш ҡарлыҡҡанда.** Ярты стакан һутҡа 2 балғалаҡ шәкәр ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Йүтәлдән дә яҡшы ярҙам итә.

**Ревматизм, подагра.** 10-12 бөртөк япраҡҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 4-6 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Әселеге түбән гастрит.** Көнөнә 5 тапҡыр ашарҙан 20-25 минут алда стакандың өҫтән бер өлөшө ҡарағат һуты эсергә. Был эсте лә йомшарта.

**Аддисон ауырыуы, бөйөр өҫтө биҙҙәренең ҡабыҡ матдәһенә стимул биреү.** Нәҙек һабаҡтарын һәм япраҡтарын ваҡларға. 2 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 5-6 тапҡыр ашағандың аҙағынан 30-40 минут үткәс стакандың өҫтән бер өлөшө төнәтмә эсергә.

**Бәүел тотҡарланыуы (хатта простатитҡа бәйле булһа ла), бөйөргә бәйле шешенеүҙәр (отек), бәүел ҡыуығында таштар.** 20 бөртөк емешен һанап алып (яңы йәки киптерелгән), термосҡа һалырға һәм 2/3 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтергә. Ашау ваҡытына ҡарамай йылы көйөнсә көнөнә 5-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Лимфа төйөнө туберкулезы.** 3 ҡалаҡ ваҡланған япраҡҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр стакандың өҫтән бер өлөшө йәки яртыһынан ҡойоп эсергә. Был рәүешле оҙайлы дауаланырға кәрәк.

Ҡарағат бик файҙалы булыуға ҡарамаҫтан, уны ҡулланыу бөтәһенә лә килешеп етмәҫкә мөмкин. Мәҫәлән, уны бауыр ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланырға кәңәш ителһә лә, гепатит булғанда яңы емештәрен һәм һутын ашап-эсеү ярамай.

Ҡарағат менән дауаланыу шулай уҡ гиперацид гастриттар (ашҡаҙан һутында хлорид кислотаһы күп булыуға бәйле), ашҡаҙан һутының юғары әселегенә бәйле бөйән эсәге һәм ашҡаҙан сейле яраһы булғанда ла тыйыла.

Уны ҡан тиҙ ойошҡанда, тромбофлебит булғанда ҡулланмайҙар. Был К витаминына һәм фенол берләшмәләренә бәйле. Шулай уҡ йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға ла ҡарағатты дауаланыу маҡсатында ҡулланырға ярамай, тигән күрһәтмәләр бар.

Рим ӘХМӘДОВ дауаһынан.

СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ.ӘҘӘБИӘТ.

# ЯУГИРҘАР УҠЫЙ...

**Был көндәрҙә Башҡортостандың төп телеканалында фронтовик-шағирҙарҙың тауыштары яҙылған үҙенсәлекле яҙмалар яңғырай. Бөйөк Еңеүҙең 77 йыллығы айҡаны Башҡортостан юлдаш телевидениеһында БСТ, "Юлдаш" радиоһы һәм М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының "Яугир һүҙе" проекты эфирға сыҡты.**



"Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы йырҙар һәм шиғырҙар - дошманды еңеүгә өлгәшкән, художестволы образдарҙа үҙ фекерен, характерын, тыуған илгә һөйөүен һәм Еңеүгә ынтылышын сағылдырған халҡыбыҙҙың рухи байлығының мөһим бите. Бөйөк Ватан һуғышының төүге көндәренән үк шағирҙар һәм яҙыусылар фашизмға ҡаршы көрәшкә баҫҡан. Һүҙ уларҙың төп ҡоралы булған. Башҡортостан радиоһы архивтарында фронтовик шағирҙарҙың тауыштары һаҡланған - улар шиғырҙарын үҙҙәре уҡый. Видеороликтар тап ошо яҙмаларға нигеҙләнеп төшөрөлдө", - ти проект авторҙары.

- Шағирҙарҙың тауышы - социаль, тәрбиәүи роликтар һәм һүрәтләмәләр өсөн шәп материал бит ул! - тине "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы директорының радиотапшырыуҙар буйынса урынбаҫары Тәнзилә Үлмәҫбаева. - Әлегә 10 исем һайлап алынған, күберәк тә эшләргә мөмкин. Беҙҙең фонотекала Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан 20-нән ашыу шағирҙың тауышы һаҡлана.

Проектты Башҡортостан юлдаш телевидениеһы режиссеры Светлана Громова, шулай уҡ танылған оҫта Руслан Юлтаев ("Өс хат", "Сируси", "Бәхет ҡошо") гәмәлгә ашыра. Республиканың төп телеканалынан Муса Ғәли, Хәким Ғиләжев, Ҡадир Даян, Мостай Кәрим, Хәниф Кәрим, Сәләх Кулибай, Яҡуп Ҡолмой, Назар Нәжми, Ғилемдар Рамазанов, Зәйни Рафиҡовтың һуғыш лирикаһы яңғырай. Проекттың үҙенсәлеге шунда: күпселек авторҙарҙың тап ошо әҫәрҙәре рус теленә тәүгә тәржемә ителгән. "Роликтарҙа профессиональ актерҙар, журналистар, уҡыусылар ҡатнашты. Беҙгә Республика Хәрби Дан музейы, Милли музей, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика Башҡорт гимназия-интернаты, Константин Хабенскийҙың ижади үҫеш студияһы ярҙам итте. Проектты тормошҡа ашырыуҙа ярҙам күрһәткәндәрҙең барыһына ла рәхмәт белдерәбеҙ, - тине "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы директорының телевидение буйынса урынбаҫары Шамил Ишемйәров.

# ШАҒИР ИҪТӘЛЕГЕНӘ...



**Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тормошона һәм ижадына арналған "Шағир көндәлеге" тулы метражлы нәфис фильмын төшөрөү тулыһынса тамамланды.**

"Йәнле таҫма" кинокомпанияһы хәбәр итеүенсә, байопикты әҙерләп төшөрөүгә ике йыл ваҡыт киткән. Был иһә Башҡортостан кинематографияһы тарихында тамашасылар, меценаттар, предприятиелар һәм дәүләт менән берлектә эшләнгән тәүге халыҡ фильмы. Төп күренештәрҙе Өфө, Шишмә районы, Һамарҙа төшөргәндәр. "Аҙаҡҡы көндә мәктәптә уҡыған йылдарында, 1948 йылдың йәйендә, Рәми Ғариповтың генерал Миңлеғәли Шайморатовтың хәрби дан эҙҙәре буйлап Донбасҡа экспедицияла ҡатнашыуы хаҡында төшөрҙөк", - тине кинорежиссёр Булат Йосопов. Премьера 2022 йылдың көҙөндә көтөлә.

Быйыл республикала Башҡортостан Башлығы указы буйынса Рәми Ғариповтың 90 йыллығы киң билдәләнә. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры Рәми Ғарипов совет осорондағы башҡорт әҙәбиәте тарихында айырым урынды биләй. Ижадында тормош мәғәнәһе, халыҡтың тарихи яҙмышы, быуындарҙың рухи бәйләнеше тураһында уйланыуҙары, туған телдең һәм мәҙәниәттең киләсәге өсөн борсолоуҙары сағылыш таба. Шағир нәфис тәржемә оҫтаһы булараҡ та билдәле.

Әйткәндәй, апрель аҙағында "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған "Һөйләшһәләр әгәр туған телдә, телгә алыр улар мине лә..." тигән әҙәби-музыкаль кисә үтте. Программа шағирҙың кадр артындағы тауышы менән асылды. Артабан Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актерҙары Артур Кәбиров, Руслан Хайсаров һәм Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актерҙары Рәмзил Сәлмәнов, Илгиз Таһиров шағирҙың шиғырҙарын уҡыны. Тантаналы концертҡа Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Азат Бадранов һәм республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова килгәйне. Азат Шамил улы тамашасыларҙы республика Башлығы Радий Хәбиров һәм Башҡортостан Хөкүмәте исеменән сәләмләне. "Быйыл Рәми Ғариповтың исеме һәм уның шиғырҙары йыш яңғыраясаҡ әле. Шағирға арналған саралар дауам итәсәк. Быйыл уның бер нисә китабын сығарыу планлаштырыла. Иң мөһиме, Рәми Ғарипов тураһында режиссер Булат Йосопов төшөргән фильмдың сығыуын түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ..." - тине Азат Шамил улы. Кисәгә килгән тамашасылар беренселәрҙән булып кинорежиссер Булат Йосоповтың "Шағир көндәлеге" фильмынан өҙөктәрҙе ҡараны ла инде.

# ЯҢЫ РЕЖИССЕР ЯҢЫСА...

**Салауат дәүләт башҡорт драма театрында билдәле драматург Флорид Бүләковтың пьесаһы буйынса "Go, Баламишкин!" (Алға, Баламишкин!) спектакленең премьераһы күрһәтелде.**



Спектаклдең ҡуйыусы рәссамы - Юлиә Сиражетдинова, композиторы - Ләйсән Шәрипова, хореографы - Эмиль Һөйәрғолов. Уны йәш режиссер, театрҙың һәләтле актеры Рафаэль Ғәйнуллин сәхнәгә ҡуйған. Әлеге ваҡытта ул Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының режиссура бүлегендә уҡып йөрөй. Режиссер М.Бартенёвтың "Бишкә тиклем һанайым", В.Илюховтың "Шат Эльф" тигән балалар өсөн спектаклдәрен сәхнәләштергәйне инде, ә быйылһы - уның өлкәндәр өсөн тәүге спектакле.

- Актер һәр саҡ ижади яҡтан үҫешергә тейеш. Был йүнәлеште мин күптән һайланым, хатта ун йыл элек Мәскәүгә уҡырға инергә хыялланғайным. Ләкин шул уҡ ваҡытта режиссерлыҡҡа барыуҙың иртәрәк икәнен аңлай инем, ә хәҙер мин быға әҙер, сәхнәлә тәжрибә тупланым, төрлө режиссерҙар менән эшләү бәхете тейҙе. Балалар өсөн ике әкиәт ҡуйҙым, ә өлкәндәр өсөн был - йыр-бейеүҙәр менән тәүге музыкаль комедия, ул да тапҡыр һүҙҙәргә, көтөлмәгән һәм ҡыҙыҡлы хәлдәргә бай, - ти йәш режиссер Рафаэль Ғәйнуллин. - Ни өсөн тап ошо әҫәр? Беренсенән, пьеса минең маҡсатыма тап килә, музыка тураһында бик ҡыҙыҡлы яҙылған. Икенсенән, был пьесала мин үҙемдең һорауҙарыма яуаптар таптым. Өсөнсөнән, пьеса авторы Флорид Бүләковтың тыуыуына 75 йыл тулыуға бағышланған.

Сәхнәлә халыҡтың яратҡан артистары - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Яҡуп Шәрипов, Башҡортостандың халыҡ артисы Гөлфирә Сафиуллина, артистар Рәмзиә Мәҡсүтова, Йәнгүзәл Халиҡова, Фидан Шәйәхмәтов, Риф Мусин, Револь Ғималов, Лилиә Байгилдина, Нәфисә Мәжитова сығыш яһаны.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ТЕЛЕ БОҘОҠТОҢ...

## күңеле боҙоҡ

Ирҙәр имән тамыры, ҡатындар - бойҙай ҡамыры.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Күңел йылының йәлләмәй тотон, ул бит тулыланып тора.

**(Зигмунд Фрейд).**

Кешенең нисек үлеүе түгел, нисек йәшәүе мөһим.

**(Самюэл Джонсон).**

Бөркөттө йолҡҡолаһаң, йөнө аҫтында ҡаҙ тиреһе күрерһең.

**(Станислав Лец).**

Әҙер фекерҙәрҙе яҡшы таныштарҙан һорап та, китап лавкаһынан һатып та алып булмай. Фекерҙе беҙҙең үҙебеҙҙең башта үҙаллы барлыҡҡа килгән уйланыуҙарҙан булдырырға кәрәк.

**(Д.И. Писарев).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Икенсе Бөтә донъя һуғышында ҡатнашып, юғары наградаларға эйә булып ҡайтҡан бер һалдат үҙенең ил алдындағы бурысын намыҫлы үтәүҙән ҡәнәғәт булып, тыныс тормоштоң һәр көнөнә ләззәтләнеп, матур ғына йәшәп ята, ти. Бәләкәй генә ҡошсолоҡ фермаһы ойоштороп, шунда бил бөгә, ғаиләһен аҫырарлыҡ аҡса эшләй. Бына бер көндө йомортҡа тултырылған биҙрәһен тотоп, урам буйлап өйөнә ҡайтып бара ҡарт һалдат. Урам сатында өймәкләшеп торған иҫерек ир-егеттәр шаяртырға була быны һәм берәһе "Смирно!" тип ҡысҡырып ебәрә. Ҡарт ҡулынан биҙрәһен төшөрөп ебәрә лә, ҡәүҙәһен тура тотоп, таштай ҡатып ҡала. Ирҙәрҙең дәррәү көлөүенән һуң ғына үҙенең көлкө хәленә ҡалғанын аңлап ҡала. Биҙрәһен алырға эйелһә, йомортҡалар ватылып, ергә һибелгән. Йомортҡаларҙы йәлләүҙән түгел, ә был ир-егеттәрҙең ҡарт кеше менән шулай шаяртырға батырсылыҡ итеүенән әрнеп, уларҙы бик ҡаты итеп һүгеп ташлай ул.**

**- Ә ниңә асыуланырға һуң?- ти теге ир-егеттәрҙең береһе. - Беҙ ни, нимә ҡысҡырһаҡ та - үҙ иркебеҙҙә. Уға буйһоноу-буйһонмау - шулай уҡ һинең иркеңдә ине бит...**

**- Һуғыш яланында бирелгән бойороҡҡа буйһонорғамы, буйһонмаҫҡамы тигән һорау торманы шул беҙҙең алда. Һалдат аны машина кеүек, уның үҙ ирке юҡ. Йылдар үтһә лә, ул ғәҙәттән арыныу бик ауыр, - тип көрһөнә лә ҡарт һалдат, юлын дауам итә...**

**...Яу яланын үткән ҡарт һалдат менән булған әлеге хәлде аңларға ла, аҡларға ла була. Ләкин бөгөн тормошта илде һаҡлау, намыҫты һаҡлау менән бәйле булмаған бойороҡтар алдында "Смирно" тороусылар күбәйҙе. Бына быныһы ысынлап та бәлә бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
29 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ -